ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 июнь (һөтай) 2016

№25 (703)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Һабанда һайрашайыҡ... 3



Матур ҡартайыу ҙа бәхет... 6



Ябай тамаша ғына түгел, ә рухыбыҙ сағылышы ла был уйындар 7,16



Булыр илдең балалары... бер-береһен күтәрер 8-9




ТВ-программа 14

**МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!**

***Йортоғоҙҙа аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡуҙғыуы теләһәгеҙ, "Киске Өфө"лө булығыҙ. Ни өсөн "Киске Өфө" гәзитен уҡырға кәрәк? Етенсе сәбәп. Тарихи тамырҙарыңды нығыраҡ белер өсөн. Атын-затын, шәжәрәһен белмәгән кеше тамырһыҙ ағас һымаҡ, ил-йортоноң тарихын белмәгәндәр ҡараңғы урман эсендә аҙашҡан әҙәмгә бәрәбәр. Гәзиттең индексы - 50665, 6 айға яҙылыу хаҡы - 574 һум 32 тин.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Кино йылында төплө генә проекттарҙа нигеҙ һалыныуы бик урынлы булыр ине. Мәҫәлән, һеҙ нисек уйлайһығыҙ: милли геройыбыҙ Салауат Юлаев хаҡында яңы кинофильм төшөрөү кәрәкме беҙгә?



*Әхтәм АБУШАХМАНОВ, Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты, БР Театр эшмәкәрҙәре берлеге рәйесе:* Ихтимал, кәрәктер... Дөрөҫөн әйткәндә, һәр замандың үҙ Салауаты булырға тейеш, тип уйлайым. Яков Протазанов фильмында Салауат ролен башҡарған Арыҫлан Мөбәрәковтан һуң Мостай Кәрим трагедияһында Салауат ролен башҡарырға ҡурҡыбыраҡ та торҙом тәүҙә, сөнки Арыҫлан ағай тыуҙырған образ күптәрҙең күңелендә нығынып өлгөргәйне бит. Тамашасы тап ошо образ аша күҙ алдына килтерҙе милли батырыбыҙҙы. Икеләнеүҙәремде Мостай ағайға еткергәс, ул минә: "Ҡурҡма, был беҙҙең Салауат булыр. Беҙҙең заман Салауаты, шағир Салауат", - тине. Һәм, ысынлап та, тамашасы йөрәгенә үтеп инде беҙҙең Салауат та. Минең һәм замандаштарым күңелендә ул тап мостайса көрәшсе-шағир, аҡыл эйәһе Салауат булып урын алды.

Бөгөнгө заманға килгәндә, тарихи хәҡиҡәтте һәм образ логикаһын боҙмайынса, психологик йәһәттән икенсерәк юҫыҡта күрһәтеү кәрәктер геройыбыҙҙы. Ләкин бик уйлап, тарихсы-ғалимдар, башҡа белгестәр менән кәңәшләшеп эшләү фарыз быны. Һәр хәлдә, яңы проект ошоға тиклем ижад ителгәндәрҙән һис тә ҡайтыш булырға тейеш түгел - шуны бер ҡасан да иҫтән сығармайыҡ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# "КИСКЕ ӨФӨ" ҠОРОТ КЕҮЕК...

## уның "тәмен" бөтәһе лә белмәй



**"Киске Өфө" гәзитенең шул яғы бигерәк тә оҡшай: унда төрлө дәрәжәләге, төрлө һөнәрҙәге кешеләр сығыш яһай, ул ысын мәғәнәһендә фекер алышыуҙар майҙансығы. Ҡайһы бер фекерҙәр менән бөтөнләй килешмәҫкә лә мөмкинһең, әммә ул барыбер һине уйландыра, яңы һығымталар яһата.**

Мин гәзиттең һәр һанын аҙаҡҡы битенән башлап уҡыйым. "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһында баҫылған башҡорт халыҡ мәҡәлдәре, әйтемдәр, риүәйәттәр бик фәһемле. Беҙҙең ата-бабаларҙың аҡылына иҫең китерлек, улар төрлө ситуацияла, төрлө мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, хатта кеше характерын билдәләргә яраҡлы кәңәштәр биреп ҡалдырған. Ҡыҫҡа ғына, әммә йөкмәткеле, тәрән фекерле, фәһемле мәҡәл-әйтемдәрҙе гәзит уҡыусыларға еткереү бик яҡшы. Сөнки улар кешенең тормошон еңелләштерә. Бигерәк тә йәштәргә әллә ҡайҙан аҡыл һорап йөрөйһө, сит ил кешеләренең тормош тәжрибәһенә таянып йәшәйһе түгел. Мәҡәлдәрҙә, хикәйәттәрҙә һәр ваҡыт эҙләгән һорауҙарыңа яуап табырға була.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

✓ *Һәр ваҡыт ситтән килеп эшләһендәрме ни беҙгә? Нимә көтөргә кәрәк ошоғаса? Степан Злобин беҙгә роман яҙып китте, Яков Протазанов фильм төшөрҙө, Сосланбәк Тавасиев килеп һәйкәл ҡойҙо, ә үҙебеҙҙең ижадсылар эше ҡайҙа?*



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# "КИСКЕ ӨФӨ" ҠОРОТ КЕҮЕК...

## уның "түмен" бөтәһе лә белмәй


**(Башы 1-се биттә).**


Ваҡытымды дөрөҫ бүлеп, гәзитте башынан аҙағына тиклем уҡырға тырышам. Алған белемем буйынса тарих уҡытыусыһы булғас, тап тарихи темаларға бағышланған мәҡәләләрҙе яратып уҡыйым. "Һүҙлек" рубрикаһында баҫылған үлән, ағас һәм башҡа төрлө үҫемлектәрҙең башҡортса-русса атамаларын ҡыҙыҡһынып ҡарайым. Сөнки күп кенә башҡортса атамалар онотолған, ҡайһыларын бөтөнләй белмәйем. Ғөмүмән, һәр һанда үҙемә кәрәкле мәғлүмәт табам. "Киске Өфө" гәзитенең сере нәҡ шунда: уны уҡырға теләгән, үҙенә кәрәк тип тапҡан кешеләр генә алдыра. Мин эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә башлағас, атайым: "Улым, ҡорот түмен башҡорт ҡына белә, ә белмәгән кешегә уны һатып алырға тәҡдим итмә", - тип әйтте. "Киске Өфө" гәзите лә шул ҡорот кеүек, уның "түмен" белмәгән, файҙаһын аңламаған кешеләргә, гәзитте алдырығыҙ, тип тәҡдим итергә кәрәкмәй. Был теләп яҙыла торған баҫма, уны бөтәһе лә уҡымаясаҡ. "Киске Өфө" милләттең зыялы шәхестәре гәзите.

"Мин үҙ принциптарымдан тайпылмайым", тип ҡатбатларға яратҡан кешеләр була. Бөтә нәмәне лә принциптарҙан сығып ҡына эшләп булмай, ваҡыт үтеү менән кеше үҙе туплаған тормош тәжрибәһенән сығып үҙгәрә, фекерҙәре лә үҙгәрә, донъяға ҡарашы ла бөтөнләй икенселәйгә әүерелеүе мөмкин. Принцип, тигәс тә, ул тимер бағана кеүек ҡағып ҡуйылған да, ғүмер буйы шулай торасаҡ нәмә, тигәнде аңлатмай. Тормош тимер бағананы ла шылдырып, ҡолатып, баш түбән әйләндереп, бөтөнләй икенсе урынға ҡаҙап ҡуйыуы бар. "Киске Өфө" гәзите лә нәҡ шулай: ул кешене үҙгәртә, уйландыра, дөрөҫлөктө бер яҡлы ғына ҡабул итмәҫкә, төрлө яҡлап анализ яһарға күндерә. Ғөмүмән алғанда, милләттең иң алдынғы ҡарашлы, фекерле кешеләрен үҙе менән бергә үҫешергә, үҙе белгәнде башҡаларға ла еткерергә ынтылып торған баҫма был.

**Даян МӨХӘМӘҘИН,**
**шәхси эшҡыуар.**

КЕМ АЛЫҠ?

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торғаныбыҙҙы беләһегеҙ.**

Июнь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер **"400 башҡорт халыҡ йыры"; "Башҡорттарҙың хәрби тарихы"** китаптарын, шулай уҡ 5 уҡыусы **Мөнир Ҡунафиндың "Йөҙөп барған, ти, аттар диңгеҙҙә"**, 10 уҡыусы 2017 йылға **"Башҡортса дини календарь"** алып ҡыуанасаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

# Кино йылында төплө генә проекттарға нигеҙ һалыныуы бик урынлы булыр ине. Мәсәлән, һеҙ нисек уйлайһығыҙ: милли геройыбыҙ Салауат Юлаев хаҡында яңы кинофильм төшөрөү кәрәкме беҙгә?


**(Башы 1-се биттә).**


***Вилүрә ИСӘНДӘУЛӘТОВА, Башҡортостан киностудияһы режиссеры, күп һанлы халыҡ-ара кинофестивалдәр лауреаты:*** Мәсьәлә бик урынлы ҡуҙғатыла: дөрөҫ, Салауатыбыҙ хаҡында яңы кинофильм бик кәрәк. Яков Протазановтың фильмынан һуң 76 йыл үтеп китте бит инде. Заманалар үҙгәрҙе, күп нәмәгә ҡараш, мөнәсәбәт, идеология үҙгәрҙе, ләкин халыҡ батырына мөнәсәбәт, һөйөү һәм ихтирам үҙгәрмәне, киреһенсә, уның шәхесенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу арта ғына төштө. Йәш быуында илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү, халыҡтар дуҫлығын нығытыу темаһы һәр заманда ла, айырыуса беҙҙең көндәрҙә, актуаль булып ҡала. Хәҙер башҡорт донъяһы тураһында фильмдар төшөрөү өсөн ситтән оҫталар саҡырырға түгел: үҙебеҙҙең бына тигән ижадсыларыбыҙ, киностудиябыҙ бар. Тик ана шул маҡсаттың беҙҙәң теләк-хыялдарға ғына бәйле булыуы етмәй шул әле. Мәсьәлә дәүләт кимәлендә күтәрелергә тейеш, сөнки, үҙегеҙ беләһегеҙ, иң кәрәкле, мөһим пландарыбыҙҙың барыһы ла тип әйтерлек бөгөн иң түҙә финанс ҡытлығына килеп терәлә һәм бойомға ашмай ҡала. Ә был ябай ғына проект булмаясаҡ. Дәүләтебеҙ гербында һүрәтләнеш алып, күптән инде Башҡортостан Республикаһының үҙенсәлекле символына әүерелгән был героик тарихи шәхес образын заманаларыбыҙға асып биреү юғары ижад потенциалы ла, байтаҡ матди сығымдар ҙа талап итәсәк. Хыял менән генә тотоноп, атҡарып сығырлыҡ эш түгел был. Хыял менән ысынбарлыҡ араһында бөгөн ниндәй кәртәләр ҡоролғанын үҙегеҙ ҙә яҡшы күреп торабыҙ. Дәүләтебеҙ ҡыҙыҡһыныу күрһәтергә тейеш был йүнәлештә. Шул саҡта ғына тарихсылар, этнографтар һәм башҡа күп һанлы белгестәрҙе йәлеп итеп, көслө ижади команда туплап, ең һыҙғанып эшкә тотонорға ла булыр ине. Әйткәндәй, тағы бер мөһим шарт: Салауат Юлаев тураһында иң яҡшы сценарийға махсус конкурс үткәреп, һайлап алырға кәрәк булыр ине, тип уйлайым, сөнки яҡшы сценарий - уңыштың ҡап яртыһы.

***Фирүзә ИШБИРЗИНА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Минеңсә, был күптән хәл итеүҙе көткән мәсьәлә. Үҙ дәүләтселегебеҙ була тороп, донъяла танылыу алған милли геройыбыҙ хаҡында фильм төшөрөлөк тә хәле юҡмы ни республиканың? Был хаҡта һүҙ алып барыуы ла оят, минеңсә. Хәҙер беҙҙә Башҡортостан Башлығы һәм дәүләт грантгарына бик күп проекттар тормошҡа ашырыла. Был бик яҡшы эш. Тик Кино йылында ана шул миллиондарҙы ваҡ проекттарға тәләфләмәй генә, Салауат тураһына фильм өсөн тотонорға булмаймы икән, әгәр башҡа төрлө юлы юҡ икән? Быйыл проектҡа нигеҙ һалып ҡалдырған хәлдә, артабанғы 2-3 йылда бына тигән фильм эшләргә булыр ине, моғайын. Тап Салауаттың тыуған көнөнә 265 йыл тулыуға (2019 йыл) әҙер ҙә булыр ине картина. Юғиһә, ишетеп-белеүемсә, Өфөгә килеп китҡәнендә билдәле Рәсәй кинорежиссеры, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Владимир Бортко Салауат Юлаев тураһында фильм төшөрөргә теләге барлығын һөйләп китҡән, тиҙәр. Ысын булһа, был турала хатта республика Башлығы Рөстәм Хәмитов менән осрашыуында ла фекер алышҡандар икән. "Башҡорттоң милли батыры образы кино сәнғәтендә күптән сағылдырылғаны юҡ. Минә был тема бик ҡыҙыҡлы тойола. Мәсьәләләр хәл ителә ҡалһа, мин фильм төшөрөргә әҙермен", - ти режиссер үҙе лә интернет хәбәрҙәрендә. Рәхмәт, әлбиттә, был ижадсыға, ни тиһәң дә, "Эт йөрәге", "Мастер һәм Маргарита","Тарас Бульба" һәм башҡа шундай билдәле фильмдар авторы насар картина ҡуймаҫ ине, ә шулай ҙа үҙебеҙҙең башҡорт киностудияһы коллективы өсөн йән әрней. Һәр ваҡыт ситтән килеп эшләһендәрме ни беҙгә? Нимә көтөргә кәрәк ошоғаса? Степан Злобин беҙгә роман яҙып китте, Яков Протазанов фильм төшөрҙө, Сосланбәк Тавасиев килеп һәйкәл ҡойҙо, ә үҙебеҙҙең ижадсылар эше ҡайҙа? Күпме рәссамдарыбыҙ була тороп, Салауаттың киндерҙә һүрәте лә образы һынландырылмаған. Рәхмәт рәссам яҡташыбыҙ Алексей Кузнецовҡа ("Салауаттан һорау алыу"), скульптор Тамара Нечаеваға Салауат батырҙың үлемһеҙ образын һынландырғандары өсөн. Уйлап ҡараһаң, күпме рус ижадсыларын рухландырған батырыбыҙҙың образы һис тә ябайҙан түгел, ә ҡатмарлы ла, бай ҙа, ҡыҙыҡлы ла. Шуныһы менән дә йәлеп итәлер был тема ижад маһирҙарын. Батырыбыҙҙы һәр кем үҙенсә күҙ алдына килтерә. Дөрөҫ, ошоға тиклем Салауат күптәрҙең аңында Протазанов фильмындағы Арыҫлан Мөбәрәков тыуҙырған образ рәүешендә күҙалланды. Ләкин талантлы актер башҡарыуында ла был образ примитив ҡалыптарҙан азат түгел ине - аңлашыла ки, режиссер һәм сценарий шулай талап иткәндер. Бөгөн иһә йәштәр аңында ул - атҡа атланған мөһабәт һыбайлы. Тәҫ-һыны ла фильмдағынан нығ айырыла.Салауат Юлаев исемен йөрөтөүсе хоккей командаһына ла рәхмәт - герой образына был йәшлек дәрте, спорт саяҡлығы өҫтәп ебәргәндәй булды. Әйе, ҡалыплашыуҙан һаҡ булыу шарт был йәһәттән. Һәр кем тарихи материалдарҙа "йөҙөүе"нә ҡарап, төрлөсә күҙ алдына килтерә милли батырыбыҙҙы. Эш бит уның йөҙ-һынында ла түгел, ә психологик бөтөнлөгөндә. Ошоға тиклем тыуҙырылған образдарҙан бер бөтөн титаник шәхесте хасил итеп, шул уҡ ваҡытта халҡы азатлығы өсөн көрәшеп, таш зинданда сирек быуат буйы баш эймәй йәшәргә үҙендә көс тапҡан ир азаматы икәнлеген дә күрһәтә алырға кәрәктер, тип уйлайым яңы фильмда.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Чебоксар ҡалаһында (Сыуашстан Республикаһы) Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәйҙең Именлек Советы секретары Николай Патрушев менән ил Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабичтың берлектәге күсмә кәңәшмәһендә ҡатнашты. Унда етештереү һәм ҡулланыу ҡалдыҡтары менән эш итҡндә экологик хәүефһеҙлек мәсьәләләре тикшерелде.

✓19 майҙа Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтайҙың пленар ултырышында Салауат Харрасовты Башҡортостандың Контроль-иҫәп палатаһы рәйесе вазифаһынан бушатыу тураһында ҡарар ҡабул ителгәйне. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында депутаттар бер тауыштан Рәмил Искужиндың кандидатураһын Контроль-иҫәп палатаһының яңы рәйесе итеп хупланы. Рәмил Кәбир улы был вазифаға тәғәйенләнгәнгә тиклем республиканың Ведомство-ара йәмәғәт хәүефһеҙлеге советы секретары булып эшләне.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйған тейешле Указға ярашлы, Башҡортостанда Юл фонды сығымдары 1080,6 миллион һумға артҡан. Документтан күренеүенсә, аҡса төбәк, муниципаль-ара һәм урындағы әһәмиәттәге автомобиль юлдарын тәртипкә килтереүгә йүнәлтелә. 2015 йылда Юл фондына бюджеттан бүленгән аҡса күләме 11 миллиард 800 миллион һум тәшкил иткән. Быйыл республиканың Юл фонды күләме - 12 миллиард 390 миллион һум.

✓Республика Хөкүмәте бойороғона ярашлы, Ураҙа байрамы уңайынан 5 июль ял көнө тип иғлан ителде. Быйыл Ураҙа байрамы шишәмбегә тап килә. 4 июлдә эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Рәсәй Хеҙмәт кодексының 120-се статьяһына ярашлы, ошо арала йыллыҡ отпуск алған хәлдә 5 июль календарь көндәр иҫәбенә инмәй.

✓Башҡортостанда халыҡ-ара форумдар һәм саммиттар уҙғарыуҙың ыңғай тәжрибәһен иҫәпкә алып, 2020 йылда үтәсәк Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерлек башланды. Был хаҡта Рәсәй халыҡтары ассамблеяһы Советы президиумының киңәйтелгән ултырышында Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы етәксеһе Зөһрә Рәхмәтуллина һөйләне.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ҺАБАНДА ҺАЙРАШАЙЫҠ...

**Йыл һайын ер-һыу ҡороп, сәсеү мәле етһә, ер кешеһе булғанғанмы икән, һабан иҫкә килә лә төшә. Заманында ауыл еренең төп эш ҡоралдарының береһе ине бит ул. Ҡыҙғаныска күрә, бөгөн ул үтә лә һирәк ҡулланыла, әлегә һүрәттәре гәзит-журналдарҙа күренгеләй, ниндәйерәк ҡулайлама икәнлеге аңлатмалы һүҙлектәрҙә лә бар барлыҡҡа.**



Хәйер, йәшерен-батырын түгел, сәсеү эштәре лә йәкомһорағандай, йыбаныулы ҡыймылдағандай һүлпән үтә хәҙерге заманда. Күҙ күреме ерҙә сәскес таҡҡан берәй тракторҙың бөҙөлоп ултырғанын күрһәң дә ҡыуанып китәһең әле. Ни тиһәң дә, ételeп-төртөлөп булһа ла, яҙғы баҫыу эшенә сыҡҡан бит, ә уның эшләүэшләмәүе бер кемгә кәрәк тә, хәжәт тә түгел. Әллә беҙ ерҙән ялҡтыҡмы, әллә ер беҙҙән биҙҙеме, бер Хоҙай белә. Ә бына һабантуй байрамдары ҡалды! Ҡалыу ғына түгел, ер аяғы ер башынан арҙаҡлы ҡунаҡтарҙы саҡырып, гөрләтеп үткәрәләр. Аңлашыла, тир түгеп эшләгәнгә ҡарағанда, ирәүәнләп, маҙырап байрам итеүе, күҙ бәйләп көрәшк ватыуы, башты ҡатыҡлы табаҡҡа тығып, тел менән тәңкә эҙләүе, һуңынан күләгәлә ятып, бишбармаҡ һоғоноуы, һыра һемереүе күпкә рәхәтерәк тә, мәшәҡәтһеҙерәк тә. Артыҡлап талсыҡмаһаҡ та, һабантуйҙан һуң өс көн ял да бирәләр әле. Ҡуй инде, йыл буйы дауам иткән ял итеүҙәрҙән арманһыҙ булып арып кителә...

Яныраҡ яланды арлы-бирле тырматып йөрөүсе тракторсы янында туҡталып, унын ары ни эшләргә йыйыныуы менән ҡыҙыҡһындым. Ул миңә наҙан кешегә ҡараған һымаҡ таҫырайҙы: "Һин нимә, күрмәйһеңме ни, ер эшкәртеп йөрөйөм дә..." "Ары ни ҡылырға иҫәбең?" "Ошонда иген сәсәсәкбеҙ..." "Һөрмәйенсәме?" "Һин тормоштан артта ҡалғанһың, абзый, ер һөрмәгәнебеҙгә нисә йыл инде... Был ысул яңы технология, фәнни нигеҙҙә эшләү тип атала..." Ҡапыл ғына Ғабдулла Туҡайҙың "Шүрәле"һендәге шиғыр юлдары хәтергә төштө: "Ерҙе аҙ-маҙ тырмалап, сәскән инем, урған инем..." Ошо көндән килерен үткән быуаттың башында уҡ әйтеп бирә алған бит бөйөк шағир!

Ер эшкәртеү, тигәндәй, туңға һөрөү эштәрен август аҙаҡтарында уҡ тулыһы менән тамамлап ҡуйған саҡтар иҫкә төшә. Тотош баҫыуҙар мамыҡтай ҡабарып, әллә ҡайҙан күренеп ята торғайны. Әйтерһең, уңып бешкән икмәк, тот та ҡаймаҡ һылап, ҡабып ебәр! Шул сифатлы эштең дә сейен эҙләп аҙаплаңдыҡ, мыжыған булдыҡ - берәй ерҙә шараҡ-фәлән ҡалһа, йә һөрөү тәрәнлеге 18 сантиметрға етмәһә, бүлексә ултырыштарында ол ғауға сыға ине!

Туңға һөрһәң, баҫыуҙың уңдырышлылығы яҡынса 25 процентtan артып китә ине. Ә көҙ етһә, ырҙын табаҡтарында тау-тау өйөлөп ятҡан игенде күреп, өлгөрөп еткән ашлыҡ еҫенә иҫереп, күңел ҡыуана торғайны. Әллә тырышлығыбыҙға күҙ тейҙе инде, хеҙмәтебеҙҙең, нишләптер, йәме китте, ҡабыр ризыҡтан бәрәкәт ҡасты, эскелек, ялҡаулыҡ бәләһе лә булғандыр инде. Шул эҙемтәләрҙе бөгөн бөтә тәрәнлегендә татыйбыҙ. Ауылға бер ҡайтҡанымда ер йотҡандай юҡҡа сыҡҡан ырҙын табағына йәнем әрнене. Шул мәлдә Мостай Кәримдең шиғыр юлдары ауырттырып мейене сүкене: "Ниндәй быуат бөгөн урамда?.. Бер мәл шағир шулай һораған..." Шул һорауҙы үҙемә үҙем ҡат-ҡат бирәм дә осо-башына сыға алмайым. Әллә бәғзеләр һымаҡ уйланмай ғына йәшәп ҡарарғамы икән? Бәлки, һабантуйға барып, ҡатыҡлы табаҡҡа башты тыҡһаң, зиһен сафланып китер, кем белә...

Ер эшкәртмәйбеҙ, тип, лаф ороуым, бәлки, урынһыҙыраҡтыр, дәлилһеҙерәктер? Гәзиттәрҙә һандар бөтөнләй икенсе нимә хаҡында һөйләй бит - беҙ көн-төн йәкламай сәсеп үҫтергән, урған игенде бөгөн йонсомай ғына йыйып алалар ҙа ҡуялар. Ҡаһыҙҙа. Ҡайһы бер урындарҙа күрһәткестәр торғонлоҡ осорона ҡарағанда юғарыраҡ та. Әллә мин алданам, әллә ҡайһы берәүҙәр үҙҙәрен үҙҙәре алдайҙар. Әлеге лә баяғы беҙҙең заманда мәктәптә киң таралған йырҙы класс сәғәте һайын тамаҡ ярып йырлай торғайныҡ:

*Ит тә күп беҙҙә,*
*һөт тә күп беҙҙә.*
*Иген мул үҫә беҙҙең ҡырҙарҙа.*
*Ҡыуып етербеҙ,*
*уҙып китербеҙ,*
*Американы яҡын көндәрҙә!*

Ошо ерҙә минең бер урынлы тәҡдимем бар: әйҙәгеҙ, ҡағыҙҙа иген үҫтерә белгәс, теге буш ятҡан баҫыуҙарҙы ла һөрөп-сәсеп ташлайыҡ. Ул саҡта бөгөнгә "йыйып алғанға" ысын тир түгеп эшләгәндә ҡушһаҡ, уныш ике тапҡырға артып китә лә баһа! Шул саҡта, бәлки, ысынлап та американдарҙы ҡыуып та етербеҙ, уҙып та китербеҙ. Юғиһә, һабанда һайрашмаһаҡ, бер килеп ырҙында ыңғырашырға тура килер...

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

УҠЫП СЫҠТЫМ...

# ЭШТЕ ЭШЛӘМӘ,

## эште үҙеңә эшләт ...

**Байгилде Моталлаптың "Киске Өфө"ләге (14-20 май) "Ауылдарыбыҙҙы һаҡлап алып ҡалыу юлдары бар" тигән мәҡәләне битараф ҡалдырманы. Ауылды йәшәүсеһеҙ итә барған иң көнүҙәк проблемалар күрһәтелгән унда.**

Автор, ауылда эш юҡ, тип зарланып, түбәгә төкөрөп диванда ятҡан, дөйөм хужалыҡтарҙы тарҡатыуҙа гәйепләп, түрәләрҙе, дәүләт хужаларын әрләп, үҙенең булдыҡһыҙлығын аҡларға маташҡан кешеләр заманы яйлап ҡына сигенә, тип бик дөрөҫ әйтә. Әйе, ысынлап та, ул замандар артта ҡала, уның урынына эште эшләргә түгел, ә эште үҙҙәренә эшләтергә теләгәндәр килә. Мин был тәңгәлгә Бөрйән районының Яңы Усман (Тараул) ауылын үрнәк итеп ҡуйыр инем. Эшләмәй, эсеп, өйҙә ятҡан ир-егеттәр бармаҡ менән генә һанарлыҡтыр унда. Ауыл йылдан-йыл ҙурая, күркәмләнә, ҙурҙан ҙурыраҡ йорттар ҡалҡа. Йәштәрҙең ғаиләләрендә 4-5-6-шар бала булыуы ғәҙәти хәл. Кәртә-ҡура тултырып мал аҫырайҙар, һәр ихатала трактор, еңел машина. Транспорты булмағандар ҙа бик һирәктер. Берәү ҙә кемдәндер көтөп ултырмай хәҙер. Һәр кем үҙ транспорты менән юлға йөрөй, бесән-утын әҙерләй, мал, бал, ағас көсө менән балаларын уҡыта, ситкә сығып эшләй. Ерҙе ҡуртымға алғандар, ниндәйҙер эш асҡандар, магазиндар тотҡандар ҙа аҙ түгел. Ҡыҫҡаһы, ауыл заманға ҡулайлашып, алға китеүгә, тереклеккә хәрәкәт алған.

Бик күп ауылдарҙа мәктәптәр ябылһа ла, Яңы Усманда ул эшләп килә. Быға өҫтәп, балалар баҡсаһының да ишектәре асыҡ. Халыҡ ауылдағы мәктәпте һаҡлап ҡалыу өсөн, үҙ-ара һөйләшеп, балаларын ситкә уҡырға ебәрмәй, ситтә булғандарын да алып ҡайтҡан. Был уларҙың ауыл киләсәген һаҡлап алып ҡалыуға ҡоролған аҡыллы, ҡайғыртыусан бер эше.

Ауылда бер түгел, ике мәсет бар, халыҡ күпләп дингә баҫа. Мәсеттәрҙә дини уҡыуҙар, кәңәшмәләр, һөйләшеүҙәр үтеп тора, хәйриә аштары, кисәләре ойоштороla. Бында шулай уҡ ауыл клубы (хәҙергесә, бәлки, мәҙәниәт йортолор) гөрләп эшләп тора. Халыҡ дәртләмe, әллә ойоштороусылары шәпме, ураған һайын ниндәйҙер сара үтеп кенә тора. Яңы Усмандар кеүек бер ауыл да район буйлап үҙ концерттары, спектаклдәре менән йөрөмәйҙер. Ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, ир-егеттәр ҙә һәр төрлө ансамблдәр төҙөп, милли кейем-һалым тектереп алып бөткән. Бөгөн ҡайҙалыр гармунсы табып булмаһа, бында гармунсылар сығып, сәхнә тултырып теҙелеп ултыра ала. Китапханала китап уҡыусылар күп. Ысынлап, унда китап һөйөүселәр араһында ярыштар уҙа. Шундайҙар улар!

Бөтөн был ыңғай күренештәр, нисек булғанда ла, халыҡтың аңлы булыуынан, үҙҙәренең ошо ауылһыҙ көн итә алмаясаҡтарын, ауыл киләсәге уларҙың балаларының киләсәге икәнен аңлауҙан киләләр, тип уйлайым. Байгилде Моталлаптың мәҡәләһендәге эште эшләргә түгел, ә эште үҙҙәренә эшләтергә өйрәнгәндәр һәм өйрәнеүселәр бар ул ауылдарҙа.

**Миләүш МИҘӘТҒАЛИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостандан йөҙҙән ашыу вәкил "iВолга-2016" йәштәр форумында ҡатнаша. Сарағa Волга буйы федераль округы төбәктәренән, Ҡытай Халыҡ Республикаһынан һәм Францинан ике меңдән ашыу кеше йыйыла. Форум 15-24 июндә Һамар өлкәһенең Фестиваль паркында Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич етәкселегендә уҙа. Форумдың приз фонды 13 миллион һумдан ашыу тәшкил итә (быltыр - 11 миллион).

✔19 июндә Иглин районы Түбәнге Ләмәҙ ауылында тәүге тапҡыр республика Театр һабантуйы ойоштороlа. Байрамда республиканың барлыҡ театрҙарынан вәкилдәр ҡатнаша. Һәр театр концерт номерҙары менән сығыш яһай. Ярыштарҙың мотлаҡ төрөндә еңеүселәргә бүләктәр тапшырыла. Байрам иртәнге сәғәт 11-се яртыла башлана.

✔Быйыл май айында республикала эшһеҙлек буйынса пособиеның уртаса күләме 4166 һум тәшкил иткән. Был - эшкә һәлһәтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы дәүмәленең 45 проценты. Башҡортостан Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, эшһеҙлек буйынса пособие алыусыларҙың өлөшө иң аҙы - 29, иң күбе 51 процент тәшкил иткән. Әлеге ваҡытта республикала рәсми рәүештә теркәлгән 25,6 меңдән ашыу эшһеҙ иҫәпләнә.

✔Былтыр "Башҡортостан Республикаһының Өфө ҡала округында физик культураны һәм спортты үҫтереү" муниципаль программаһын тормошҡа ашырыу өсөн 572 миллион һум аҡса бүленгән. Бынан тыш, 49 миллион һум бюджеттан тыш средстволар йәлеп ителгән һәм улар иҫәбенә 24 адрес буйынса физкультура-спорт ҡоролмаһы төҙөлгән. Бөгөн ҡалала барлығы 1885 спорт ҡоролмаһы, шул иҫәптән 855 майҙансыҡ, 372 спорт залы, 46 бассейн бар. Шулай уҡ 85 хоккей ҡумтаһы төҙөлгән. Ҡалала 34 муниципаль спорт мәктәбе эшләй, уларҙа 64 спорт төрө үҫешә.

✔Ейәнсура районы Таҙлар ауылы янында "Кош юлы" бард йыры фестивале үтте. Быйыл "Кош юлы" биш йыллыҡ юбилейын билдәләне. 2016 йыл Рәсәй киноһы йылы тип иғлан ителгәнлектән, быйылғы фестиваль Виктор Цойға һәм "Кино" төркөмөнә бағышланды. Сарала уҙған йылдарҙа еңеп сыҡҡан 14 лауреат һәм быйыл интернет тауыш биреүҙә еңеү яулаған алты йырсы ҡатнашты.

ҠЫҪҠАСА

## ЙӘШТӘР ЙЫЙЫНЫ, МАТБУҒАТ БАЙРАМЫ...

✓ **24-28 июндә Өфөлә "БРИКС һәм ШОС илдәренең студент яҙы" халыҡ-ара фестивале уҙғарыла.** Фестивалдә ҡатнашыу өсөн баш ҡалаға донъяның 17 иленән меңдән ашыу ижади һәм талантлы студенттар килә. Сараны ойоштороусылар - Рәсәй Йәштәр союзы, илдең Мәҙәниәт, Фән һәм мәғариф министрлыҡтары һәм Башҡортостан Хөкүмәте. Сараның үҙенсәлеге шунда: ул ҡатнашыусыларҙың ижади сығыштары ғына түгел, "Студент яҙы" барышында белем биреү майҙансыҡтары ла эшләй. Бер үк ваҡытта биш майҙансыҡ асыла. Сәхнә йүнәлешендә ҡатнашыусылар айырым номинацияларҙа һайлап алыу турын үтә. Уларҙы эксперттар һәм шоу-бизнес йондоҙҙары баһалай.

✓ **2014-2018 йылдарҙа Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу сараларының календарь планына ярашлы инструкторҙар эш башланы.** Биналарҙың әҙерлеген баһалау һәм акт буйынса ҡабул итеү уларҙың күҙ алдында башҡарыла. Инструкторҙар унда сентябрь айы башланғанға тиклем эшләй. Башҡортостанстатта хәбәр итеүҙәренсә, инструкторҙар участкаһы телефон элемтәһе менән йыһазландырылған, Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу объекттары тураһында мәғлүмәт йыйыусыларҙы өйрәтеү һәм уҡытыу, документтар һаҡлау өсөн уңайлы булырға тейеш. Төбәктә 1,2 миллион объектты теркәү күҙ уңында тотола. Кампанияла ике меңдән ашыу иҫәп алыусы ҡатнаша. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу 1 июлдән 15 авгусҡа тиклем дауам итә.

✓ **Быйыл Башҡортостанда бөтәһе 36 меңдән ашыу туғыҙынсы класс уҡыусыһы Төп дәүләт имтиханын тапшырҙы.** Һөҙөмтәләрҙең былтырғыға ҡарағанда яҡшыраҡ булыуы асыҡланды. Математика буйынса имтихан һөҙөмтәләрен тикшереп, Башҡортостан Мәғариф министрлығы эксперттары "икеле" алыусылар һиҙелерлек кәмегән тип белдерә. Ошо фәндән һынау тотҡан 36 меңдән ашыу кешенең 1875-е эшен "икеле" билдәһенә яҙған. 19 меңдән ашыуы - "дүртле", 4,6 мең самаһы уҡыусы "бишле" алған. Яҡын арала рус теленән һөҙөмтәләр билдәле буласаҡ.

✓ **Башҡортостан матбуғаты көнө билдәләнгәндә Өфөлә яҙыусы, журналист, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Шәһит Хоҙайбирҙиндың һәйкәле янында мемориаль таҡтаташ асыу тантанаһы булды.** Был һәйкәл 1981 йылдың 4 декабрендә асылған. Һәйкәлдең авторҙары - скульпторҙар Тамара Нечаева, Борис Фузеев, архитектор Фәрит Рехмуков. Быйыл октябрь айында Шәһит Хоҙайбирҙиндың тыуыуына 120 йыл тулыу киң билдәләнәсәк. "Китап" нәшриәтендә яҙыусы һәм журналист Ризван Хажиев әҙерләгән Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаттары тураһында китап донъя күрәсәк. Лауреаттар Күгәрсен районында эшмәкәрҙең тыуған ауылында тантаналы сараларҙа ҡатнашасаҡ.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ИҠТИСАД БЕЛГЕСТӘРЕНӘ ЛӘ...

## илһөйәр булыу кәрәк



**Республика иҡтисад лицей-интернаты 1996 йылда иҡтисад өлкәһендә милли кадрҙар әҙерләү маҡсатында булдырыла. Хәҙер был белем усағында Башҡортостандан һәм күрше өлкәләрҙән килгән балалар иҡтисад һәм физика-математика фәндәрен тәрәнәйтеп өйрәнә. Уҡытыу физика-математика, физика-химия һәм социаль-иҡтисади йүнәлештәр буйынса алып барыла.**

Лицей республиканың һәм Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттары, профилле уҡыу йорттары менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. INTEL корпорацияһы менән төҙөлгән килешеү буйынса РЭЛИ уның STEM-үҙәге булып тора. Тимәк, был тикшеренеү лабораториялары лицей уҡыусыларына фәнни, техник, инженерия буйынса өҫтәмә белем алырға мөмкинлек бирә. Шулай уҡ лицейҙа робот техникаһы һәм компьютер программалау буйынса уникаль лаборатория булдырылған. Уҡыусылар анимацион йәнһүрәттәр төшөрөргә өйрәнә, йыл да робот техникаһы ярыштарында ҡатнашып, еңеүҙәр яулап тора.

Беҙҙең лицейҙың тағы бер мөһим үҙенсәлеге бар - малайҙар һәм ҡыҙҙар айырым уҡытыла. Егерме йыл эшләү дәүерендә был тәр уҡытыуҙың өҫтөнлөклө булыуына инандыҡ, баланың иғтибарын уҡыуға йүнәлтеү өсөн дә, тәрбиә йәһәтенән дә уңайлы. Билдәле булыуынса, малай һәм ҡыҙҙарҙың фекерләүе, мәғлүмәтте ҡабул итеү, белемде үҙләштереү үҙенсәлектәре төрләсә ҡоролған. Былар барыһы ла айырым уҡытҡанда күҙ уңында тотола. Әлбиттә, улар бөтөнләй үк бер-береһе менән аралашмай йәшәмәй. Төрлө мәҙәни саралар, олимпиада, конкурстарҙа бергә ҡатнашалар. Балаларға төплө белем биреү, киләсәктә юғары уҡыу йортона инергә әҙерләү, шәхес булараҡ үҫтереүгә йүнәлтелгән эшмәкәрлектән тыш, беҙ уларҙы илһөйәр, рухлы итеп тәрбиәләүгә лә ҙур иғтибар бүләбеҙ. Был маҡсатҡа ярашлы, быйыл Республика иҡтисад лицей-интернатында "Бельское казачество" хутор казактары йәмғиәте менән берлектә "Яугир" хәрби-патриотик клубы асылды. Унда шөғөлләнгән уҡыусыларға физик күнекмәләр, үҙеңде яҡлау алымдары өйрәтеүҙән тыш, башҡорт халҡының батырҙары, хәрби тарихы, мәҙәниәте, йолалары тураһында ла һөйләйҙәр. Балалар ҡырҙа йөкләргә тура килгәндә, урманда аҙашҡанда ашығыс ярҙам күрһәтергә өйрәнә. "Яугир" хәрби-патриотик клубы беҙгә йәш быуынды берләштереү, ойоштороу, рух тәрбиәләргә мөмкинлек бирә. Ғөмүмән, ул элекке "Пионер" ойошмаһын алмаштыра, балаларға маҡсат, йәшәү мәғәнәһе табырға, шә хес булараҡ үҫешергә ярҙам итә.

Беҙҙең уҡыу йортона Башҡортостандан ғына түгел, сит өлкәләрҙә йәшәгән милләттәштәр ҙә балаларын уҡырға алып килә. Улар бында рус һәм башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡый. Мотлаҡ инглиз һәм немец теле, социаль-иҡтисади йүнәлеш буйынса белем алыусылар теләк буйынса тағы ла ҡытай йә испан телен өйрәнә. Башҡорт архитектура-төҙөлөш колледжы менән килешеү төҙөп, киләһе йылдан уҡыусыларға эшсе һөнәрҙәре буйынса өҫтәмә курстар ойошторорға уйлайбыҙ. Әлегә был ниәт кенә булып ҡала, сөнки яңы уҡыу йылында Республика башҡорт лицей-интернаты менән ҡушылыу көтәбеҙ. Егерме йыл эсендә туплаған тәжрибә, яуланған үрҙәр, күрһәтелгән һөҙөмтәләр киләсәктә тағы ла юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелеүҙе күҙаллай ине. Был ике белем усағы берләшеүгә тап шул үҫеш, тип иҫәпләргә кәрәктер.

**Айгөл ХӘБИБУЛЛИНА,**
**Республика иҡтисад лицей-интернаты директоры.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҠУРАЙ МОҢО АҪТЫНДА...



**12 июндә баш ҡала бер юлы өс байрамды - Рәсәй көнөн, милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуыуына - 262 йыл һәм Өфө ҡалғаһенә нигеҙ һалыныуға 442 йыл тулыуҙы байрам итте. Байрам саралары Салауат Юлаев һәйкәленә, Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыуҙан башланды.**

Был көндә барлыҡ майҙандарҙа байрам саралары гөрләне.

Рус дәүләт академия драма театры алдында "Кала мөхите" социаль рекламаһы фестиваленең иң яҡшы эштәре күргәҙмәһе урын алһа, Ленин һәйкәле алдындағы майҙанда балаларҙың "Мультяшный калейдоскоп" байрамы барҙы. Һуңынан уны "Яратам һине, Рәсәй!" музыкаль композицияһы, йәштәрҙең "Сикһеҙ тыуған ил" акцияһы дауам итте. Киске яҡҡа иһә баш ҡаланың ижади коллективтары, башҡорт эстрадаһы артистары, "Ҡурайсы" төркөмө менән Башҡортостандың билдәле ҡурайсыһы Роберт Юлдашев ҡатнашлығында концерт булды. Элекке йылдарҙағы байрамдарҙан айырмалы, был юлы баш ҡала мәҙәни программаға Рәсәй эстрадаһы йондоҙҙарын саҡырмайынса, сараны урындағы йондоҙҙар көсө менән күтәрҙе.

Конгресс-холл артындағы "Ватан" майҙанында былау байрамы ойошторолдо. Ул Бөтә Рәсәй "Былау культы" мәрхәмәтлек марафоны сиктәрендә "Мәрхәмәт" фонды тарафынан ойошторолдо. Һөҙөмтәлә барлығы 1503 порция былау һатылып, 225 мең 450 һум аҡса йыйылған.

М. Ғафури исемендәге паркта иртәнге сәғәт 10-дан киске 6-ға тиклем "Тәмле ҡала" гастрономик фестиваль үтте. Программа буйынса оҫталыҡ дәрестәре, конкурстар үткәрелде, йыйылыусылар тәмлекәстәр менән һыйланды, күңел асыу һәм башҡа саралар тәҡдим ителде. Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының Йәйге сәхнәһендә музыка факультеты һәм башҡорт музыкаһы факультеты студенттары концерт күрһәтте.

Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓21 июндә киске сәғәт 10-да баш ҡаланың Еңеү паркындағы мемориаль комплексҡа сәскә һалыу була. Башланғысты "Иртәгә һуғыш булды" дөйөм Рәсәй акцияһы сиктәрендә Рәсәй Эске эштәр министрлығы ҡарамағындағы Йәмәғәт советы тәҡдим иткән. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы ҡарамағындағы Йәмәғәт советы рәйесе Айрат Халиҡов билдәләүенсә, сарала теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Үҙең менән шәмдәр һәм сәскәләр алыу мотлаҡ. Акцияла ҡатнашыу тураһында 279-47-05 телефоны буйынса хәбәр итергә кәрәк.

✓Синоптиктар фаразлауынса, был аҙнала Башҡортостанда көндәр йәйгесә йылы торасаҡ. Һауа температураһы яйлап ҡына күтәреләсәк. Республиканың ҡайһы бер райондарында ҡыҫҡа ваҡытлы ямғыр яуасаҡ, төбәктең күпселек өлөшөндә яуымтөшөм көтөлмәй. Рәсәй Гидрометүҙәге мәғлүмәттәре буйынса, июндең икенсе декадаһында Башҡортостанда көндәр йылы торасаҡ. Уртаса һауа температураһы күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән ике градусҡа юғарыраҡ булмаҡсы.

✓Быйыл Федераль юл агентлығының Башҡортостан идаралығында өҫтөнлөклө йүнәлеш - Р-240 трассаһын ремонтлау. Ырымбур юлы 2010 йылда федераль милеккә тапшырылған. Уның торошо бик насар, шуға күрә төп ресурстар ошонда йәлеп ителәсәк. Юл япмаһы, яһалма ҡоролмалар, тышҡы яҡтыртыу системалары, барьерҙар тәртипкә килтереләсәк. Шулай уҡ өс юл үткәргесте, ике күперҙе, һыу үткәреүсе торбаны ремонтлау ҡаралған.

✓Башҡортостанға бөтә донъянан сәсәндәр йыйыла. 26 октябрҙә Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивале ойоштоpола. Сара башҡорт эпостарын һәм уларҙы башҡарыусыларҙы популярлаштырыуға йүнәлтелгән һәм донъя халыҡтары араһында үткәрелә. "Фестиваль халыҡ ижадын, башҡорт эпостарын Рәсәй халыҡтарының матди булмаған мәҙәни мираҫ өлгөһө булараҡ пропагандалау маҡсатында тәүге тапҡыр уҙғарыла", - тип аңлатма бирҙеләр Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтендә. Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивале "Бөтә донъя фольклориадаһын-2020" үткәреүгә әҙерлек булып тора. Проект Башҡортостан Башлығының 900 мең һумлыҡ грантына лайыҡ булған.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ЫРЫМБУРҒА БАРҘЫҠ,

## милләттәштәр эргәһенә...

**Һаумы, боронғо башҡорт ере! Иге-сиге булмаған башҡорт төйәгенең гүзәл бер төбәге - Ырымбур ере! Тарихы, моңо, мәҙәниәте менән хайран итер, ғорурландырыр киң далалар иле! Сик-самалар ҡуйылһа ла, күңелгә ғәзиз, ҡәҙерле булған, Мөхәмәтша Буранғолов, Сәғит Агиш, Дауыт Юлтый, Муса Йәлил, Рауил Бикбай, Риф Тойғон, Артур Туҡтағоловтарҙы бүләк иткән бәрәкәтле төбәк.**

Республикабыҙҙың Мәғариф министрлығынан Ырымбур өлкәһенең Новосергиевск районын Ейәнсура районына беркетеп, бәйләнеш булдырыу, был районда урынлашҡан башҡорт ауылдарындағы мәктәптәргә методик ярҙам күрһәтеү кәрәклеге тураһында хат алғас, район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзалары, башҡорт теле уҡытыусылары, район мәҙәниәт йорто артистары Ырымбур өлкәһенә юл алды. Булып үткән IV ҡоролтай ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу, сит өлкәләрҙә йәшәүсе милләттәштәребеҙгә ярҙам итеү, уларҙың көнкүреше менән танышыу, рухтарын нығытыу, бәйләнеш булдырыу ине маҡсатыбыҙ.

Тәғәйен урынға барып еткәнсе шиғырҙар һөйләнек. Был төбәктә йәшәгән башҡорттарыбыҙҙың сығышы ҡайҙан булыуы тураһында фараздар әйттек. Новосергиевск районының Ҡотош ауыл хакимиәтенә Ҡотош, Ҡараяр, Ғөмәр ауылдары инә икән. Беҙ Ҡотош ауылына барып еткәндә , көн кискә ауышҡайны. Шулай ҙа концерт башланыр алдынан халыҡ менән аралашыу, ауылдың ағинәйҙәре менән ихлас һөйләшеү мөмкинлеге булды. "Сәлимәкәй" ансамблен ойоштороған, йолаларыбыҙҙы тергеҙеп, балалар күңеленә һала алған бынамын тигән ағинәйҙәр йәшәп ята икән Ырымбур өлкәһендә. Дәррәү генә хәл итеп, үҙҙәренең Ағинәйҙәр ҡоро рәйесе итеп Гөлшат Ейәнбәтованы һайлап ҡуйҙылар, киләсәккә план төҙөп, кәңәшләшеп тә өлгөрҙөләр. Артабан Ҡотош ауылы мәктәбенең татыу коллективын етәкләгән Зөфәр Мәҡсүтов мәктәп менән таныштырҙы. Ун бер йыллыҡ был мәктәптә 57 бала уҡыуы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре аҙнаһына өс тапҡыр инеүе тураһында һөйләне. Уҡытыусылар, уҡыусылар бәләкәй генә концерт та күрһәтте: матур итеп башҡорт телендә шиғырҙар уҡыны, ҡумыҙҙа уйнаны, бейене лә. Аҙ комплектлы мәктәптең һаҡланып ҡалыуында Новосергиевск районы хакимиәте башлығы С.В. Балыкиндың ярҙамы ҙур, тине ҡотоштар. Баҡтиһәң, уның ҡатыны башҡорт ҡыҙы икән. Етәксенең төрлө саралар ойоштороуҙа ла ярҙамы тейә, тип ҡыуанышты мәктәп коллективы. Ә бына Ҡобай ауыл хакимиәтенә ҡараған Мерәс ауылы урта мәктәбендә туған тел факультатив булараҡ ҡына уҡытыла икән. Мәктәп директоры Алсирә Иҙелғужина әйтеүенсә, милләттәштәр барыбер бирешмәй, халыҡ традицияларын, тел, моңдарыбыҙҙы һаҡлап, матур итеп йәшәп яталар.

Ейәнсура районынан килгән ҡунаҡтарҙың һәр сығышын йотлоғоп тыңланы Ҡотош, Мерәс ауылдары халҡы. Уларҙың ошондай рухлы сығыштарға, аралашыуҙарға ни тиклем һыуһағанын тойҙоҡ беҙ. Вафа Мәүлетов башҡарыуында башҡорт халыҡ йыры "Урал"ды, "Уралтау" этно төркөмө егеттәренең сығыштары яңғырағанда залда ниндәйҙер гөүләү ишетелгәндәй булды. Был шау-шыу түгел, ә кемдер ҡушылып көйләй, кемдер көй ыңғайына бәүелеп ултыра ине. Әйтерһең дә ошо мәлдә боронғо башҡорт ерендә, йәмле Тыҡсоран буйында ҡанбабаларыбыҙ рухы, йәнтөйәк хәтере уянып тулғана ине. Алҡымға төйөр, күҙҙәргә йәш төйөлдө шул саҡ. "Быуаттарҙан-быуаттарға күсеп килгән, ата-бабаларыбыҙҙың изге аманаты - быуындар бәйләнешен өҙмәйек. Ошо залда ултырған муйыл күҙле башҡорт малайҙары, ҡыйғас ҡашлы башҡорт ҡыҙҙары телебеҙҙе, моңобоҙҙо, йолаларыбыҙҙы һаҡлап, үҙ милләтебеҙгә кейәүгә сығып, өйләнеп, быуындар сылбырын дауам итһен. Халҡыбыҙҙы һаҡлар усаҡ торонбашы һеҙҙең ҡулда, ағинәйҙәр, милләт усағының утын йәш быуында баҙлатып, эшегеҙ, һүҙегеҙ менән ҡуҙ һалып йөрөгөҙ!" тип хушлаштыҡ был бәрәкәтле, изге төйәк менән.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**
**Ейәнсура районы.**

Әйткәндәй, был көндә баш ҡаланың Калинин районындағы Азатлыҡ урамында "Азатлыҡ аллеяһы" асылды һәм йәштәр, балалар өсөн тәғәйенләнгән программаның бер өлөшө тап шунда үтеүе лә юҡҡа түгел. Киләсәктә инде уның районды Арбатына әйләнере күҙаллана.

Ғәҙәттәгесә, байрам тантаналарына сағыу фейерверк нөктә ҡуйҙы. 10 минут самаһы дауам иткән фейерверк башынан аҙағынаса ҡурай моңо аҫтында балҡыны. Был моңдо хатта гөрһөлдәгән пиротехника тауышы ла баҫа алманы.

## ҠАЛАЛАР КӘҢӘШЛӘШӘ

**Өфөлә IV Рәсәй ҡалалары берләшмәһенең иң яҡшы муниципаль практикаһы форумы асылды. Сара Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ярҙамында, шулай уҡ беренсе тапҡыр халыҡ-ара кимәлдә үтә. Унда 400-ҙән ашыу кеше - Федерация Советы, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы ағзалары, министрлыҡ вәкилдәре, эксперттар, ҡала мэрҙары ҡатнаша.**

Форумда Рәсәй ҡалалары берләшмәһенең иң яҡшы муниципаль практикаһы механизмдарын ҡулланыу буйынса фекер алышыу төп урында торасаҡ. 12 секция эшләй, улар араһында "Рәсәй ҡалаларының мәҙәни үҙенсәлеге һәм оҡшашлығы", "Муниципаль стратегияларҙы тормошҡа ашырыуҙа уңышлы һәм алдынғы технологиялар", "ЖКХ - яңы сифат" һәм башҡалар бар. Бер секция халыҡ-ара бәйләнешле хеҙмәттәшлек итеүгә, туғандаш ҡалалар араһында мөнәсәбәттәр төҙөүгә һәм Рәсәй ҡалаларын халыҡ-ара кимәлгә сығарыуға арналған.

Рәсәй ҡалалары берләшмәһе - Рәсәйҙә 1991 йылда булдырылған йәмәғәт ойошмаһы. Бөгөнгө көндә унда 91 муниципаль берләшмә ағза булып тора, уларҙың 69-ы - РФ субъекттары үҙәктәре.

ҠЫҪҠАСА

## ИҢ ЯҠШЫ ТАБИП...

✓ **Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығында ведомство башлығы Әнүәр Бакиров "2015 йылдың иң яҡшы табибы" республика конкурсы лауреаттарын бүләкләне.** Быйыл конкурс комиссияһы 120 эште ҡараны. Бәйгелә ҡатнашыусылар төрлө: 40 йыллыҡ эш стажы булған белгестәр ҙә, йәш табиптар ҙа бар. Өфөләге 3-сө балалар поликлиникаһы табип-педиатры, 4-се педиатрия бүлексәһе мөдире Зилә Усманова "Иң яҡшы педиатр" номинацияһында билдәләнде. "Медицина ойошмаһының иң яҡшы етәксеһе" номинацияһында Асҡар үҙәк район дауаханаһының баш табибы Заһир Сакаев еңеп сыҡты. "Иң яҡшы участка терапевы" номинацияһында Малаяҙ үҙәк район дауаханаһы табибы Нурия Хәйруллина еңеү яуланы. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы икенсе йыл рәттән медицина темаһына яҙышҡан журналистарҙы билдәләй. Был номинацияла "Республика Башкортостан" гәзитенең сәйәсәт бүлеге начальнигы Гүзәл Нәбиева һәм "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының социаль өлкә бүлеге начальнигы Эльмира Сабирова еңеүсе тип танылды.

✓ **Башҡорт дәүләт медицина университетында психотерапевтар әҙерләү буйынса яңы кафедра асылды.** Башҡорт дәүләт медицина университеты ректоры, БР Дәүләт Йыйылышы депутаты Валентин Павлов фекеренсә, психик сәләмәтлек, күңел торошо проблемалары - хәҙерге йәмғиәт өсөн бик мөһим. Стресс, урбанизация, коммуникатив мөмкинлектәр, виртуаль донъяға күсеү - быларҙың барыһы ла төрлө проблемаларға килтерә, улар йәштәрҙә, урта йәштәге кешеләрҙә кире сағылыш таба. Һөҙөмтәлә психик сирле пациенттар күбәйә. Ректор әйтеүенсә, яңы кафедра ҙур фәнни эште дауам итәсәк һәм ошо өлкәлә тәжрибә мәктәбен ойоштораса. Профессор Владимир Юлдашев, профессор Лилиә Вәлиуллина һалған нигеҙҙәр (хәҙер Илгиз Тимербулатов дауам итә) Рәсәй һәм сит ил белгестәренең юғары баһаһына лайыҡ.

✓ **Өфө дәүләт авиация техник университеты - илдең инженер-техник йүнәлеш буйынса Шанхай рейтингына ингән өс юғары уҡыу йорто иҫәбендә, тип хәбәр итеlә РИА Новости сайтында.** Рейтингта М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетынан тыш, Милли тикшеренеүҙәр ядро университеты һәм Өфө дәүләт авиация техник университеты бар. "Төбәк университеты тәүге тапҡыр Мәскәү дәүләт университеты менән бер төркөмдә, был илдәге уҡыу йорттарының тигеҙ үҫеш мөмкинлектәре тураһында һөйләй", - тине "Рәсәй бөгөн" медиатөркөмөнөң "Социаль навигатор" проекты етәксеһе Наталья Тюрина. Инженер-техник йүнәлеш буйынса вуздар рейтингын төҙөгәндә ғилми эшмәкәрлектең һөҙөмтәлелек күрһәткестәре, фәнни ҡаҙаныштар, тикшеренеү эшмәкәрлеге кимәле, халыҡ-ара һәм шәхси сектор менән хеҙмәттәшлек, ғилми наградалар, халыҡ-ара кимәлдәге премиялар иҫәпкә алына. Рейтингта донъяның 55 иленән 730-ҙан ашыу юғары уҡыу йорто бар.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Гайморит

❖ Гаймориттан ҡыҙыл сөгөлдөр ярҙам итә. Сөгөлдөрҙө ҡырғыстан үткәреп, марлянан эшләнгән жгутты сөгөлдөр һутына манып, уларҙы танау ҡыуышлығына тығаһың һәм 40 минут буйына башты эйеп ултырып тораһың. Был ваҡыт эсендә жгут буйлап танауҙан бүленеп сыҡҡан эрен ағырға тейеш. Өс көн дауамында ҡулланырға.

### Тонзиллит

❖ Тамаҡ ныҡ ауыртҡанда 1 стакан йылы һыуға ярты балғалаҡ аш содаһы, бер семтем тоҙ, 1 тамсы йод өҫтәп, көнөнә 5 тапҡыр тамаҡты сайҡатырға.

❖ Шешеүҙе бөтөрөү өсөн иртән миндалиналарға алоэ һуты (1 ҡалаҡ) һәм бал (3 ҡалаҡ) һөртөргә була.

*Йыш ҡына тонзиллит йөрәккә бирә. Йөрәк мускулын нығытыу өсөн 1 ҡалаҡ энәлек сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡасын ябып 2 сәғәт талғын утта быҡтырырға, тик ҡайнатмаҫҡа. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашар алдынан 3-әр ҡалаҡ эсергә.

### Үксә тибенгеһе

❖ Аяҡ кейеменә үксә аҫтына баҡыр пластина һалып йөрөһәң, үксә тибенгеһе юҡҡа сыға.

### Мастит

❖ Тары бутҡаһы тәмле ризыҡ ҡына түгел, файҙалы ла. Мастит ваҡытында йылы бутҡаға ит турағыс аша үткәрелгән бер баш һуған ҡушып болғатырға һәм етен туҡымаға һалып, төнгөләккә йылы яулыҡ менән түшкә бәйләргә. Түштәге тығыҙланған урын юғалғанғасы бер нисә тапҡыр эшләргә.

### Ашҡаҙан аҫты биҙе

*Ашҡаҙан аҫты биҙе эшмәкәрлеге нормаға килһен өсөн лимонды ҡабығы менән 2-3 минут ҡайнатырға, һутын һығырға, сей йомортҡа һарыһына ҡушып болғатырға һәм ас ҡарынға эсергә. Ай дауамында 3 көн һайын ҡабатларға. 4 сәғәт ашамаҫҡа ла, эсмәҫкә лә, шулай уҡ рациондан майлы һәм ҡыҙҙырылған ризыҡтарҙы алырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Уҡыу, бәйләү, гөл үҫтереү, шахмат уйнау, яҙышыу һ.б. Хәрәкәт итеүҙе лә оноторға ярамай, "аяғым, билем, башым" тип ултырыу яғын ҡараған ололар хәрәкәт итеп йөрөп ятҡандарына ҡарағанда 8 йылға иртәрәк ҡартая.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

## ТУҒАНДАРЫНА КҮРҺӘТЕҮ

Бала тыуғас, уны ағаһына йә апаһына күрһәткәндә, йөҙөнән элек аяғын күрһәтәләр. Шулай итһәң, улар татыу була. Өлкәне кесеһен йәберләмәй.

## ҠАРЫН СӘСЕН АЛЫУ

Сабыйҙың сәсен тәүге алыу ҡарын сәсен алыу була. Уны теләһә кемдән түгел, күңеленә оҡшаған кешенән генә алдырырға кәрәк. Ғөсөл алып тороп, сабыйҙы тотоп тораһың. Шунан сәс алыусы сабыйҙың сәсен ҡыра. Шунда әйтәһең инде: "Ҡыҙыма (улыма) - бер бәрәс!"

Сабый сағында ҡарын сәсе алынмаған кешене рәнйетергә ярамай. Юҡһа, рәнйеүсегә рәнйеше ҡаты төшә.

Ҡарын сәсе баланың ҡырҡы сыҡмаҫ элек алына. Баланың ата-әсәһе ҡарын сәсен алыусыға бүләк бирә. Ҡарын сәсен утҡа яғырға ярамай, уны төрөп, ҡыҫтырып ҡуялар. Шунан ҡарын сәсе сәйен эсәләр.

Ҡашы матур үҫһен тип, сабый кешенең ҡашын көмөш тәңкә менән һыҙып сығалар: "Һыҙылып үҫһен, аҡ уйлы булһын!" - тип теләк теләйҙәр.

## БАЛА КҮРЕРГӘ БАРЫУ

Балаға исем ҡушылғас, ҡатындар бала күрергә баралар. Бала күрергә барыуҙы таныша барыу тиҙәр. Унда ҡорот, май, бал, ит, баҫмаланған (аяҡланған) еп тотоп баралар.

Йәш балалы ҡатын, кешегә килеп, ҡайтырға булһа: "Өйҙән ҡоро ауыҙ менән сыҡма", - тип, баланың ауыҙына бал, май яғалар.

Бала тыуыу ғаиләгә ҙур шатлыҡ һәм бәхет алып килә. Әсәгә бөтә күрше-күләне тәмле аҙыҡтар, бәпес ҡоймағы, бәпәй бәлеше алып килә. Был йола әсәгә һәм балаға һаулыҡ теләү маҡсатынан атҡарыла.

Баланың "ҡырҡы сыҡҡас" (тыуғандан һуң 40 көн үткәс) бәпәй туйы үткәрелә. Балаға бүләктәр бирәләр. "Инәһенә иш булһын, атаһына ҡуш булһын", - тип теләктәр әйтелә. Ошо уҡ туйҙа исем ататыу ҙа үтергә мөмкин. Элегерәк мулла саҡырып исем ҡушалар ине.

Яңы тыуған балаға беренсе тапҡыр ризыҡ биргәндә, теләк теләйҙәр. Уны "Бала ауыҙландырыу" йолаһы тиҙәр. Шул ваҡытта былай тип һамаҡлайҙар:

*- Атаңа шәфҡәтле бул,*
*Әсәңә ярҙамсы бул!*
*Атаңдан олоға, бабай, тиң,*
*Үҙеңдән олоға, ағай, тиң,*
*Әсәңдән олоға, инәй, тиң,*
*Үҙеңдән олоға, апай, тиң!*

Баланың ҡырҡы сыҡҡас, әбейҙәр йыйыла. Әсәй йәки өләсәй кеше уларға сабый ебе йәки кендек ебе бирә. Ул, аяҡланып, осо төйөлгән була. Аяҡлы еп биреү - баланың тиҙерәк аяҡланыуын теләү, ололарҙан шуға фатиха һорау ул. Еп әбейҙәрҙең уң тубығына һалына. Епте алып, кеҫәләренә һалғанға тиклем, улар доға ҡылалар:

*- Оҙон ғүмерле булһын!*
*- Тиҙерәк атлап китһен!*
*- Ата-әсәһенә изгелекле, илгә игелекле булһын!*
*- Тәүфиҡлы булһын!*
*- Бәхетле булһын!* - тиҙәр.

Шунан күмәкләп, сәй эсәләр. Шуны еп сәйе (еп туйы) тиҙәр.

Бала ауыҙлыҡландырғанда, бал, май ҡаптыралар. Шул саҡ:

*- Телең балдай татлы булһын,*
*Түрең майҙай йомшаҡ булһын!* - тиҙәр.

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

ИШАРА

**Яҡын ғына туған бер инәйемә шылтыратып, хәл белештем. Һикһәнгә аяҡ баҫҡан тимәҫһең, яҡшы ишетә, аңы теүәл, бөтәһен дә белә йәки белергә теләй. Минең ғәҙәттәгесә хәл-әхүәл һорашыуыма ҡаршы ризаһыҙ ғына итеп: "Беҙҙең хәл ней, шул инде..." - тип әйтеп бөтөрөлмәгән яуап ҡалдырҙы. Уның был хәбәрен аңламағанға һалышып, үткәреп ебәрҙем. Тик артабан һөйләшеү әҙәмсә ялғанманы, мин нимә тип кенә һүҙ башлаһам да, инәйем "Бына былар..." тип, өйҙәгеләрен яманлауға күсте лә китте, күсте лә китте. Бәлки, ыңғайына ҡуйып, һөйләтеп тә алыр инем, "быларҙың" уның яҡындары икәнен дә, уларҙың ғәйепһеҙ икәнен дә беләм шул. Бына шундай булып ҡартайҙы инәйем. Ә элек улай түгел ине...**

# МАТУР ҠАРТАЙЫУ ҘА БӘХЕТ...



Ҡартайыуҙың, ҡартлыҡтың кешегә ниндәй холоҡ алып килере билдәһеҙ икән. Быны ғалимдар ҙа иҫбатлай: бала үҙ асылын йәшерә белмәгән кеүек, олоғайған кешенең дә эске донъяһы асыла икән ҡартлыҡта. Әлеге инәйем бик көслө рухлы, сая ҡатын булды. Бар нәмәне тота килеп хәл итә ала, ҡыйыу фекер йөрөтә, ҡырҡыу итеп һөйләшә ала торғайны. Ауылда үҙен хөрмәт иттеләр, беҙ ҙә кәңәшкә йөрөй инек. Уның ирен, бабайымды, холҡһоҙораҡ, еңмешерәк кеше итеп белдек. Хатта инәйемде ыҙалатып йәшәгән бер әҙәм кеүек итеп күрә инек. Улар олоғайышып, ул-килендәре ҡулына ҡалды хәҙер. Яҡшы ҡарауҙалар былай. Тик... Инәйемдең ҡапыл ғына үҙгәреп китеүе, ингән-сыҡҡанға балаларын яманлап ултырыуы хаҡында туғандарҙан ишеткәйнем инде. Үҙемә лә әллә нисә тапҡыр тыңларға тура килде уны. Хәбәренән тыш, тәртибе лә маҡтарлыҡ түгел ине уның. Ололарға хас сабырлығын, баҫалҡылығын бөтөнләй юғалтҡан. Бер туҡтауһыҙ кухня-зал-йоҡо бүлмәһе араһында йөрөп тора. Сәбәпһеҙгә бүлмәләрҙең ишектәрен асып ҡарай, кемдәр ултыра, тип тикшерә. Әленән-әле аш бүлмәһенә килә лә, килененә: "Йә, буламы шул сәйең?" - тип һорай. "Хәҙер була", тиһәләр ҙә, "Булмаҫ һеҙҙән!" тигәнерәк һүҙ ташлап китеп бара. Телефон шылтыраһа, йүгереп бара, һөйләшеүселәрҙе тыңлап тора, бер туҡтауһыҙ һорауҙар бирә. Уға: "Әсәй, йүгермә, һине һораһалар, саҡырырбыҙ", - тип торалар, ул барыбер үпкәләй. Улы менән килененең араһындағы хәбәргә аңлаһа ла, аңламаһа ла ҡыҫыла, өҫтәл артында ризыҡтарҙы улы яғынараҡ шылдырып ҡуя. Өҫ-башын бөтөнләй ҡарамай, йыуыныырға, кейем алыштырыуға өгөтләүселәрҙе әрләп ташлай һ.б. Тамам ыҙалананалар уның менән.

Ә бына бабайы, киреһенсә, әҙәпле генә булып ҡартайған. Тыныс ҡына телевизор ҡарап ултыра, ейәндәре менән ипле генә һөйләшә, залға һәр ваҡыт кейемен алыштырып ҡына сығa, ҡулында ҡулъяулығы була. Хәбәргә ҡыҫылып бармай, йәштәргә "үҙегеҙгә уңай булғанса эшләгеҙ" тип кәңәш бирә. Ейәндәрен туҡтауһыҙ кәзәкләп ултырған әбейен: "Йә, мынауҙы..." - тип асыуһыҙ ғына шелтәләп ала.

Әлбиттә, оло кеше шулай булырға мөмкин, улар менән сабыр булыу кәрәк, тип уйларға лә, әйтергә лә мөмкин. Уныһы шулай. Тик оло кешегә лә, аҡылы теүәл булғанда, әхлаҡи нормаларҙы үтәү зарур. Был тәңгәлдә мин динде күҙ уңында тотам. Диндә булған ололар бөтөнләй икенсе була бит...

Ғалимдар иһә, һәр кеше ҡартайғас башлана торған холҡон контролдә тота ала, тип иҫбат итә. Һин был хәлгә олоғая башлауыңды һиҙеү менән әҙерләнә торорға тейешһең. Ә нисә йәштә килә һуң олоғайыу мәле? Ҡырҡҡа тиклемгеләр "йәш" булып иҫәпләнә икән, ҡырҡтан иллегә - урта, илленән алтмышҡа - оло, унан арылар ҡарт тип йөрөтөлә. Ана шул "урта" төшөнсәһен үткәс, үҙеңә күберәк ваҡыт бүлергә кәрәк, тиелә (әлбиттә, үҙеңде башҡа йәштәрҙә лә яратыу мөһим). Таҙалыҡ, гигиена, туйыныу тәртиптәрен иң беренсе сиратҡа ҡуйырғалыр (үҙаллы була алғанға тиклем). Унан был тормоштоң йәштәр, балалар ҡулына күсеүен ҡабул итергә, уларға үҙ теләгең менән юл ҡуйырға кәрәктер. Башҡалар менән булышып ултырмау өсөн берәй шөғөл табыу бик мөһим. Уҡыу, бәйләү, гөл үҫтереү, шахмат уйнау, яҙышыу һ.б. Хәрәкәт итеүҙе лә онотторға ярамай, "аяғым, билем, башым" тип ултырыу яғын ҡараған ололар хәрәкәт итеп йөрөп ятҡандарына ҡарағанда 8 йылға иртәрәк ҡартая. Ә бит ололарҙың күбеһе ысынлап ауырымай ҙа ул, тик ҡартайыуҙарын ауырыу тип ҡабул итеп, ҡайһыларылыр үҙҙәрен йәлләтергә, иғтибар үҙәгендә торорға тырышып, мыжыуҙы ғәҙәт итеп ала. Бары тик аҡыллы булғандары ғына ололоҡтарынан йәм, тәм табырға тырышып, оптимистик рух һаҡлап алып ҡала. Ундай ололар эргәһендә, күҙәткәнегеҙ барҙыр, көлгө килеп кенә тора. Улар үҙҙәренең ҡайһы бер нәмәләрҙә яңылышып киткәнен дә, йәшлек хәтирәләрен дә, булған хәл-ваҡиғаларҙы ла шаяртыуға бороп һөйләй, күңелде күтәрә. 9 Май көндө бер һуғыш ветераны парк эскәмйәһендә ҡатын-ҡыҙҙарға комплименттар яһап, егет-еләнгә үҙҙәрен ҡыҙҙар менән нисек тоторға икәнлекте аңлатып, халыҡҡа бер мажара ҡорҙо. Шаян, теремек бабайға 92 йәш ине. Ыңғай энергияһы менән үҙе әллә кемдәрҙе тоҡандырып ебәрерҙәй ине ул. Барыһы ла уға яратып, һоҡланып ҡараны. "Матур ҡартая белеү - үҙе бер бәхет" тип, юҡҡа әйтелмәйҙер инде...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# КЕМ УЛ ИНТЕЛЛИГЕНТ?



**Күптәр интеллигентты яҡшы белем алған, күп уҡыған һәм сәйәхәт иткән, бер нисә тел белгән, бөхтә кейенгән кеше тип уйлай. Ә ысынында былarһыҙ ҙа интеллигент булып була. Сөнки был төшөнсә кешенең эске донъяһына, эске тәртибенә бәйле.**

Интеллигентлыҡ - ул уҡымышлылы түгел, ә донъяны, кешеләрҙе аңлай һәм ҡабул итә белеү. Йәғни, бәхәсләшкәндә берәүҙең дә йөҙөн йыртмау, өҫтәл артында үҙеңде әҙәпле тотоу, ашты, аҡсаны йәки кейемде күңел торошонан өҫтөн ҡуймау, ярҙамға мохтаж яҡындарыңа иғтибарлылыҡ, шауламай ғына изгелек эшләү, тәбиғәтте һаҡлау, йәнлектәргә ҡаты булмау, йәмһеҙ һөйләшмәү, ҡысҡырмау, һүгенмәү һ.б.

Интеллигентты, нишләптер, мотлаҡ ҡала кешеһе тип уйлайбыҙ. Ә ауылдарҙа үрҙә һанап үтелгән матур сифаттарға эйә булған, әммә эске күркәмлектәрен тышҡа әйләндереп күрһәтеп бармағандар аҙмы ни? Ысынында, интеллигенттар ауыл мөхитендә күберәк тә ул. Улар малсы, көтөүсе, һатыусы, уҡытыусы йәки ябай ғына хужабикә лә. Үҙе йәшәгән йортон һәм эргә-тирәһен таҙа тота, тәбиғәтте ҡәҙерләй, яҡындарын аңлай, уларҙы рәнйетмәҫкә тырыша, эсеү-тартыу кеүек яман ғәҙәттәрҙән алыҫ тора, яҡшылыҡ эшләү йәненә рәхәтлек бирә һәм был кешегә башҡалар тартыла, унан үрнәк ала һәм хөрмәтләй. Тимәк, был кеше ысын интеллигент. Интеллигент булайыҡ!

**Алиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**

**✓ "Ылаҡ"та ике һыбайлы төркөм кәзә өсөн талашты. Ҡайһы яҡ иң беренсе булып кәзәне майҙанда урынлаштырылған ҡаҙанға төшөп ятырлыҡ итеп ырғыта - шул еңеүсе.**



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЯБАЙ ТАМАША ТҮГЕЛ,

## ә рухыбыҙ сағылышы ла был уйындар



**Ошо көндәрҙә БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәте халҡыбыҙҙың онотола башлаған атлы һәм йәйәүле уйындарын тергеҙеү, пропагандалау маҡсатында Ҡырмыҫҡалы районының Тауһеңер ауылы янында тәүге тапҡыр "Уйын" Республика халыҡ байрамы ойошторҙо.**

– Башҡорт халҡының һыбайлы һәм йәйәүле спорт төрөнә ингән уйындарын туплап, өйрәнеп, ошолай халыҡ алдына сығарыу үрнәге - тәүге тапҡыр, - тип һөйләне БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, - Был эштең маҡсаты - милли мәҙәниәтебеҙҙе үҫтереү, халыҡсанлыҡты, тәүмәҙәниәтте ҡайтарыу, спортты һәм сәләмәт тормошто пропагандалау. Уйлап ҡараһаң, халыҡ ошондағы уйындарҙың ҡайһы берҙәрен белмәй ҙә бит. Мәҫәлән, таш ырғытыуҙы ҡайҙа күргәнебеҙ бар? Әле барыһының иғтибарын яулаған "Ылаҡ", ҡыҙ ҡыуыу, уҡ атыуҙар һәр һабантуй күренеше лә түгел. Әлегә был башланғыс ҡына. Киләсәктә был проекттар тағы ла ҙурыраҡ һәм киңерәк масштабта йәйелдерелеп, матур бер йолаға әүерелер, тип өмөтләнәбеҙ...

Ысынлап та оло йыйын ине был. Халыҡ һаны, һәр береһе айырым бер ауылдай булып урынлашҡан тирмәләр, аш-һыу нөктәләре, күргәҙмәләр, балалар майҙансыҡтары, сауҙа урындары шул тирәне гөжләп торған ҡырмыҫҡа иләүенә әйләндергән. Уйын майҙанында теге йәки был төрҙә көсөн һынап ҡарарға самалаусылар шөғөлләнә. Көрәш балаҫының мөйөшө һайын берәр ҡуй бәйләп ҡуйылған, улар хужаларын көтөп, күндәм генә баш һалып тора. Арыраҡ бәйге шауҡымын тойоп ярһыған арғымаҡтар тыныслана алмай үрәпсей. Улар, ҡупшы баштарын алаҡандатып, бер-береһенә кешнәшеп ауаз ебәрә лә, әллә нисә урындан шундай яуап алып, тағы ла нығыраҡ ҡуржып ер сапсый. Был күренеш тамашасыға ла йоғонто яһамай ҡалмай, уларға ла аттарҙың ярһыулығы, уйын ҡомары күсә.

Етәкселәрҙең сәләмләүенән, уңышлы, имен уйындар теләүенән һуң, ярыштар башланып китте. Башта халыҡты "аһ" иттереп аттар бейене! Әйе, яңылыш уҡымайһығыҙ, еңелсә башҡорт көйөнә бер тигеҙ баҫып бейегән аттарҙың ҡылығы хайран итте. Уларҙы быға өйрәтмәгәндәр, улар быны үҙҙәре белә кеүек тойолдо хатта. Унан Учалы һәм Ҡырмыҫҡалы районы егет-ҡыҙҙары егетлектә һынашты. Тамашасы алдынан елеп килгән аттар өҫтөндә ниндәй генә трюктар яһаманы улар, сит ил киноларындағы каскадерҙарың ары торһон. Ысынлап та, борон ат өҫтөндә йөрөгән һәр башҡорт һуғышсыһы ошондай һәләткә эйә булһа, ниндәй таҫыл һәм саялыҡ булған уларҙа. Ә инде был бәйгелә ҡыҙҙарҙың да ҡатнашыуы күренешкә икеләтә сағыулыҡ өҫтәне. Уларҙың береһе, ат белгесе Нәйлә Булатова әйтеүенсә, борон башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары өсөн атҡа менеп һыбай сабыу бер ни тормаған. "Үҙемде белә-белгәнемдән аттарға ғашиҡмын, "ат ене" ҡағылған миңә. Әле башҡарған трюктарҙың күптәрен бала саҡта уҡ эшләй ала инем. Бөгөнгө көндә бала әсәһе булыуға ҡарамаҫтан, был шөғөлөмдө ташламайым", - ти сая ҡыҙ.

Тамашасы йыйылғансы, милли көрәш буйынса төп ярыш үткәйне. Шуға ла улар алдында алдынғылыҡҡа сығыусы ике батыр алышты. Учалы бәһлеүәне ғәйрәтле булып, ҡарар күҙҙе ҡурҡытһа ла, Ҡырмыҫҡалы исеменән көрәшеүсе донъя чемпионы, спорт мастеры Артур Зөлҡәрнәев йәшлеге менән алдырҙы. "Беҙҙең затта әллә нисә быуын көрәшселәр килә. Атайым, ағайым көрәшсе. Көрәш - беҙҙең халыҡтың төп көс һынашыу ысулы, ул ғәйрәт һәм сослоҡто сағылдыра. Бөгөнгө балаҫта мин үҙемдән ауырлығы күпкә ҙур булған көрәшсе менән бил һынаштым. Бында көс менән алдыра алмаҫымды аңлағас, мин сослоҡ һәм йылғырлыҡты ҡулландым", - ти Артур.

Ике тәгәрмәсле арбала уҙышыу бер аҙ ят уйын булғанғамы, унда ҡатнашыусылар һаны ла күп булманы. Бында ат менән генә түгел, арба менән дә идара итә белеү оҫталығы талап ителә. Финишҡа беренсе булып елеп килеп инеүсе чемпионға 63 йәш тип иғлан итеүҙәре беҙҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты һәм еңеүсене эҙләп таптыҡ. Ул Венер Батталов булып сыҡты: "Миңә 63 йәш, шуның 40 йылын ошо спорт төрө менән шөғөлләнәм. Быға саҡлы һыбай ҙа ярышҡаным булды. Ауыл кешеһе булараҡ, атһыҙ, этһеҙ йәшәгәнем юҡ. Мине әлеге ваҡытта халыҡта аттар һаны кәмеүе борсой. Был байрамдың ойошторолоуы ат спортының әһәмиәтен үҫтерә - маладистар! Тик бына арбала йүгереү юлы ғына тарыраҡ булды..."

Уҡ атыуҙа мәргәнлеген төрлө райондарҙан килгән уҡсылар һынаны. "Любизар - Төньяҡ Амурҙары" хәрби-тарихи клуб ағзалары уларҙы бәйге алдынан ярышҡа әҙерләгән. Уҡ атыусыларҙың янын алып, атып ҡараныҡ. Дөрөҫөрәге, ҡарамаҡсы булғайныҡ, ян керешен асырлыҡ та көс булмай сыҡты. Тимәк, мәргән уҡсы булыу өсөн дә кәмендә ике-өс йыллыҡ тәжрибә кәрәк. Әйткәндәй, 15 июлдә Ғафури районы Имәндәш ауылында "Мәргән уҡсы" Республика фестивале үтәсәк һәм был спорт төрөнә башланғыс һалынмаҡсы, сөнки әлегә ул бары тик һанаулы ғына кешеләрҙең фиҙаҡәрлеге менән йәшәп килә. Был байрамда иң мәргән уҡсы тип танылған Әбйәлил егете Раушан Хәсәнов та үҙ аллы шөғөлләнеүен әйткәйне. "Һәр ауыл малайының бәләкәйҙән уғы була бит инде, мин дә бала саҡтан уҡ атып үҫтем. Ул саҡта был уйындың спорт төрө икәнлеген белмәй ҙә инек. Әле сабырлыҡ, көс, күҙ үткерлеге, beləktər таҫыллығы һәм һалҡын ҡанлылыҡ талап иткән бер арбағыс әүрәү итеп күрәм уны", - ти ул.

Уйында беҙ быға саҡлы күреп өйрәнмәгән ҡыҙ ҡыуыу, ылаҡ, таш ырғытыу кеүек ярыштар ҙа булды. "Ылаҡ"та ике һыбайлы төркөм кәзә өсөн талашты. Ҡайһы яҡ иң беренсе булып кәзәне майҙанда урынлаштырылған ҡаҙанға төшөп ятырлыҡ итеп ырғыта - шул еңеүсе. Был уйын халыҡты бәйгегә ҡарағанда ла нығыраҡ ҡыҙыҡһындырҙы. Киләсәктә "Ылаҡ"ты ялан буйлап сабышып йөрөп уйнаһалар, тағы ла мажаралыраҡ булыр ине.

"Борон иң көслөләр, иң мәргәндәр, сәсән теллеләр, оҫта йырсылар, бейеүселәр йыйындарға йыйылып, үҙ-ара бәйге ойошторған. Был сара шул матур йоланы тергеҙеү маҡсатынан үткәрелде. Әлегә республиканың 6 районын ғына саҡырҙыҡ, тотош Башҡортостанды йыйһаҡ, "Уйын" өс көн, өс төн барыр ине, моғайын. Халыҡ байрамында бейеүгә һәм ат спортына баҫым яһалды, сөнки башҡорт атһыҙ, ҡурайһыҙ, йырһыҙ, бейеүһеҙ булмай. Ат тураһында һүҙ әйтеп тороу ҙа кәрәкмәй, ул халҡыбыҙ менән бер рәүеш, бер бөтөн булып йәшәй. Элек тә атһыҙ тора алмаған башҡорт бөгөн дә телефон, төрлө гаджеттар ваҡытында ла атһыҙ йәшәй алмай, быны "Уйын" да раҫланы. Ат тояғы тауышы, башҡорт бейеүендәге тыпырлауҙар башҡорттоң йөрәген аса, рухын күтәрә.

Яңы уйындар килеп сыҡты, бөрйән, ҡатай башҡорттары ташты бейеклеккә ырғытһа, бында бәйгеселәр алыҫлыҡҡа ырғыттылар. Баймаҡта, Учалыла атта һыбай төрлө трюктар эшләү йүнәлеше үҫешә башланы, бына хәҙер уларҙың рәтен ҡырмыҫҡалылар тулыландырҙы.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

...Кискә табан Әй буйында урынлашҡан Ҡыҙылбай (автор "Казылбаево" тип яҙа. - **Ред. иҫк.**) исемле башҡорт ауылына килеп еттек. Красноуфимскийҙың үҙенән ошо урынға тиклем иген үҫтереүселәр йәшәй, һәм улар ошо иркен ерҙәр менән тиккә генә файҙаланмай; Әй буйында йәшәүсе башҡорттар ҙа ҙур үҙгәреш кисергән. Үҙҙәренең күршеләре кеүек үк, улар ҙа бик яҡшы игенселәр. Уларҙың тауҙан атылып сыҡҡан шишмәләрендә он тарттырыусы ҙур ғына тирмән төҙөлгән. Уларҙың өйҙәрендәге таҙалыҡ мишәрҙәрҙекенән һәм башҡа яһаҡлы татарҙарҙыҡынан кәм түгел. Ашаған аҙыҡтары татарҙарҙыҡы кеүек; етешерәк йәшәгәндәренең йөҙөм эсемлектәре, сәй-ҡәһүәләре лә бар.

Ер эшкәртеүгә өйрәнеү һәм тирмәләрҙә йәшәүҙән биҙеү уларҙы крәҫтиән тормошоноң ошо камилыраҡ кимәленә күтәргән. Башҡа башҡорттарҙыҡы кеүек, уларҙың да малдары күп, малсылыҡ өсөн иркен ерҙәрҙән торған оло йәйләүҙәре иген игеүгә лә, мал аҫрауға ла етерлек. Ошо ҙур булмаған башҡорт йәмғиәте үҙҙәренең ырыуҙаштарына ер эштәренә итәғәт итеү өсөн өлгө булып торһа ла, барса башҡорттарҙа ошондай тәртип урынлашыуын беҙ түгел, ейәндәребеҙ генә күрәсәк: сөнки бынан 15 саҡрымда ятҡан Һабанаҡ исемле башҡорт ауылында, шулай уҡ 20 саҡрым алыҫлыҡтағы Салйоғот, Мағазы, Ләмәҙ йылғасығы буйындағы Трөпкилде, Йыланыш йылғасығы буйындағы башҡорттар элеккесә вайымһыҙ йәшәүен дауам итә, ә уларҙың да һәр төрлө ауыл ҡоролошон үҫтереү мөмкинлектәре Ҡыҙылбай ауылында йәшәүсе башҡорттарҙыҡы кеүек үк бит: Әй йылғаһын һәр яҡтан урыны-урыны менән ҡалҡыулыҡтар менән айырылған мул һәм тигеҙ яландар уратып алған. Башҡорттар әлегә ер эшкәртеүгә битараф булһа, бесән сабыуға ла хәҙер шул тиклем ныҡ илтифат итә: оҙайлы ҡыш айҙарында малдар ҡалын ҡар менән ҡапланған үләнде һәр саҡта ла таба алмай, шуға улар хужаларының ашатыуына мохтаж. Башҡа урындарҙағына ҡарағанда, уларҙың бесән әҙерләү мөмкинлектәре күберәк, сөнки Урал буйы тигеҙлектәрендә, бигерәк тә уйһыу ерҙәрҙә үлән шул тиклем бейек үҫә, хатта унда йөрөгән аттар ҙа күренмәй. Башҡорттар бесән сабыу эшен бар ғаиләләре менән башҡара, унда ҡатын-ҡыҙ ҙа ҡатнаша; шулай уҡ ярҙамға башҡа кешеләр саҡырыла, йәғни ит бешереп, күп итеп ҡымыҙ алып, үҙҙәренең таныштарын бергә йыйып һыйлайҙар, ә улары һый өсөн хужаға бесән сабырға ярҙам итә (бында һүҙ өмә тураһында бара. - **Ред. иҫк.**). Барса Урал арьяғында йәшәүселәрҙәге кеүек үк, башҡорттарҙа ла бесән сабыу өсөн көмрө салғы (горбуша) ҡулланыла. Ул ҡәҙимге салғынан байтаҡҡа тарыраҡ һәм ҡыҫҡараҡ булып, оҙон булмаған һапҡа беркетелә, һәм бесән сабыусы һәр һелтәгән һайын эйелергә мәжбүр була; шуға күрә бесән сабыу ҡыйыныраҡ та, файҙаһыҙыраҡ та: уның менән бар үләнде тамырынан сабып алып булмай, байтағы сабылмайынса тороп ҡала.

*✓ Ишембайҙа уҡыған саҡта күп ата-әсәләр балаларына спорт кәрәк-яраҡтары һатып ала алмай ине. Сөнки ауыл кешеһенең ундай ҡиммәтле әйберҙәргә һатып алыр аҡсаһы юҡ. Шул арҡала әллә күпме һәләтле балалар спорттан ситләште.*



**Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа йәштәрҙе спортҡа, сәләмәт йәшәү рәүешенә ылыҡтырыуҙың әүҙемләшеүе һәм уларҙың үҙҙәренең дә был өлкәлә ярайһы уңыштар яулауы күҙгә салына. Ошо арала был матур күренешкә тағы ла бер сағыу бит өҫтәлергә тора: баш ҡалаға Башҡортостанда грэпплинг көрәше Федерацияһын асыу мәсьәләләре тураһында һөйләшеү өсөн ҡатнаш алыш төрҙәре һәм панкратион буйынса спорт мастеры, Рәсәй һәм Халыҡ-ара турнирҙар чемпионы Илфат ӘМИРОВ килде. Белеүебеҙсә, Илфат ММА буйынса "Курск - 2014" - Халыҡ-ара, "Спецназ хәтере" бөтә Рәсәй турнирҙары еңеүсеһе, грэпплинг буйынса Мәскәү беренселегендә - беренсе, "Moscow Open" BJJ чемпионатында икенсе урын һәм башҡа еңеүҙәр яулаусы. Ул грэпплинг федерацияһының "Тархан" һуғышсылар командаһы етәксеһе, грэпплинг буйынса спорт мастеры, Халыҡ-ара һәм региональ турнирҙар еңеүсеһе, БР чемпионы Динар АҠМЫРҘИН менән республикабыҙҙың ҡала һәм райондары буйлап йөрөнө, йәштәр менән осрашты, урындарҙа турнирҙар үткәрҙе. Спортсылар "Киске Өфө" редакцияһына ла килеп, уй-фекерҙәре менән бүлешеп китергә ваҡыт тапты.**

# БУЛЫР ИЛДЕҢ

## бер-береһен

*Башҡорт егеттәренең рухы ла, физик үҫеше лә, мөмкинлектәре лә башҡаларҙан кәм түгел, хатта күпкә юғарыраҡ та. Тик уларға ялҡаулыҡты һәм үҙ яҙмышына битарафлыҡты ғына еңергә кәрәк.*




**▸ Илфат, һеҙ май башында ғына донъя кимәлендәге сираттағы ҡатнаш алыштар һуғышында чемпион исемен яуланығыҙ. Был беҙҙең Башҡортостан өсөн дә оло ғорурлыҡ, ҙур мәртәбә. Шул үткән алыш хаҡында бер аҙ һөйләшеп үтәйек әле.**

**И. Әмиров:** Мин дә, үҙ сиратымда, милләттәштәремә ярыш барышында күрһәткән иғтибарҙары, ихтирамдары өсөн рәхмәт әйтеп китәйем. Уларҙың мине шундай дәррәү күтәреп алыуҙары, алҡыштары, интернет селтәре аша яҙған сәләмдәре - барыһы ла шул еңеүгә булышлыҡ итте. Ә турнирға килгәндә, ул Мәскәү ҡалаһында үтте. "Донбасс тыныслығы өсөн" тигән лозунг аҫтында, патриотик һәм социаль рухта ине сара. Ул Украина ҡан ҡойошонда һәләк булған ҡорбандар иҫтәлегенә бағышланды. Мин "Ҡатнаш алыштар клубы №1" Рәсәй командаһы иҫәбендә ҡатнаштым. Етмеш килоға тиклемге ауырлыҡта ҡырғыҙ һуғышсыһы Марип Орзбекка ҡаршы сыҡтым. Ярыш күрһәткестәре һеҙгә мәғлүм.

**▸ Беҙҙең республикала иң үҫешкән спорт төрө ниндәй? Ә ниндәйен һеҙ беҙҙең менталитетҡа тура килә һәм спортсыларыбыҙға күберәк уңыштар килтерер ине, тип уйлайһығыҙ?**

**И. Әмиров:** Хоккей, тип әйтер инем, әгәр ҙә уны ҡараусы һәм көйәрмән генә булыуҙан үтеп, уйнай ҙа башлаһалар. Үкенескә ҡаршы, беҙҙә спорт уйындарын әүҙем күҙәтеүсене лә "спортсы" итеп ҡабул итәләр. Ә инде һеҙҙең һорауға килгәндә, беҙҙең менталитетҡа көрәш, бокс, дзюдо кеүек төрҙәр тап киләлер. Мин быларҙы үҙемдең миҫалымдан сығып әйтәм.

**Д. Аҡмырҙин:** Әлбиттә, башҡа спорт төрҙәрендә лә уңыш яулаған спортсыларыбыҙ бар, әммә Илфат һанап үткән төрҙәр беҙҙең асылды тулыһынса аса. Көрәш бер ваҡыт үҫешеп киткәйне, әммә һуңғы йылдарҙа ул да һүлпәнләнде, мин быны спортсылар күрһәткестәренән алып әйтәм. Бөгөн грэпплинг, панкратион, бокс, ҡатнаш көрәш төрҙәре алда бара. Әле күптән түгел генә Венер Ғәлиев ниндәй шанлы еңеү алып килгәйне, бына, Илфат та һыр бирмәне. Һеҙ уларҙың алышҡанын ҡарағыҙ! Уларҙың көрәш алдынан рингта баҫалҡы, тыныс ҡына баҫып тороуҙары, әммә ҡараштарынан һалҡын саялыҡ бөркөлөүе, бәрелеш ваҡытында үҙ-үҙҙәрен аямауҙары үҙе үк эске тәртип һәм һуғышсан рух билдәһе бит...

**▸ Йәш быуынға өлгө булһын өсөн, әйҙәгеҙ, һеҙҙең спортҡа килеү тарихығыҙҙы ла бәйән итәйек. Юғиһә, беҙҙә ниндәйҙер өлкәлә уңыш үренә барып етеү, билдәлелек яулау өсөн тик "бәхетле йондоҙ" аҫтында ғына тыуырға кәрәк, тип уйлайҙар...**

**И. Әмиров:** Мин Күмертау ҡалаһында үҫтем, шунда ун ике йәштән дзю-до менән шөғөлләндем. Ишембай кадет корпусына уҡырға килгәс, ҡул һуғышына күстем. Унан Мәскәүҙә уҡыған саҡта (әйткәндәй, спортсының һөнәре юрист. -**Ред.**) спорттың ҡатнаш алыштар төрөн һайланым. Бала саҡта атай-әсәйем мине мәжбүр итеп спорт менән шөғөлләндерҙе, тип әйтә алмайым. Ҡайһы саҡ арып киткән саҡтарҙа, йәлләп: "Ярай, күнекмәгә барма ла ҡуй", - тип тә ҡуялар ине. Шулай ҙа улар минең был ҡыҙыҡһыныуымды хуплап, гел контролдә тота торғайнылар.

**Д. Аҡмырҙин:** Мин дә шулай уҡ мәктәп йылдарынан спортҡа ылыҡтым. Башта йүгереүҙән башланым, артабан спорттың башҡа төрҙәренә лә мөрәжәғәт иттем. Көстө, таҫыллыҡты, барымымды билдәләп алыу һәм күңел ятыуына ҡарап һайлау булғандыр был. Унан грэпплингта туҡталып, шуның менән ныҡлап шөғөлләнә башланым.

**▸ Егеттәр, бына һеҙ грэпплинг, панкратион тигән тел һындырыр атамалар әйтәһегеҙ. Нимә һуң ул грэпплинг һәм панкратион? Ниндәй көрәш шулай атала хәҙер?**

**И. Әмиров:** Боронғо олимпия көрәше төрө ул - панкратион. Был "ҡағиҙәһеҙ һуғыш" кеүегерәк: көрәш мәлендә бөтөн алымдар ҙа файҙаланылырға мөмкин. Бында көс тә, таҫыллыҡ та, йылғырлыҡ та, хәйләкәрлек тә, хатта бер аҙ ҡанһыҙлыҡ та талап ителә. Тимәк, панкратион менән шөғөлләнгәндә күнекмәләргә йөҙөү ҙә, йүгереү ҙә, һикереү ҙә, ауырлыҡ күтәреү ҙә, һәм башҡа төрҙәр ҙә инә. Алыш ваҡытында башың да тиҙ генә уйлап, самалап өлгөрөргә тейеш. Шул уҡ ваҡытта был - ҡағиҙәһеҙ һуғыш түгел, сөнки ММА-ла ҡағиҙәләр етерлек. Көрәштең нескәлектәрен белмәгән кешегә генә уның ҡағиҙәләрһеҙ булып тойолоуы ихтимал. Профессиональ ММА алышы ситлек эсендә үткәрелә. Әлбиттә, көрәштең башҡа төрҙәренә ҡарағанда, ирек күберәк, әйтәйек, быуыу кеүек алымдарҙы ҡулланырға була.

**Д. Аҡмырҙин:** Грэпплинг иһә бөтә һуғыш тәртиптәрен дә үҙ эсенә алған көрәш төрө. Панкратион менән улар бер-береһенә оҡшаған да, шул уҡ ваҡытта эске ҡағиҙәләрҙә айырмалыҡтар ҙа бар.

**▸ Илфат, һеҙ күберәген Рәсәй исеменән сығыш яһайһығыҙмы, әллә Башҡортостан исеменәнме? Ғөмүмән, һеҙҙең башҡорт милләтенән булыуығыҙҙы беләләрме ул ситтә?**

**И. Әмиров:** Мин Рәсәй эсендәге алыштарҙа һәр ваҡыт республикам исеменән сығам. Минә хатта Динар һәм уның егеттәре "Башҡорт" тигән ҡушамат та бирҙе. "Башҡорт Әмиров" атамаһы менән иғлан ителәм. Ә инде сит илдәрҙә, әлбиттә, Рәсәй иле һуғышсыһы булараҡ сығам, әммә унда ла милләтемде атамам әйтеп тора. Рингка ла милли башлыҡта сығам. Был минең халҡыма, милләтемә булған хөрмәтемде, уны ҙурлауымды күрһәтә. Ғәҙәттә, ниндәйҙер спорт төрө менән ҡыҙыҡһынған көйәрмән шул өлкәләге спортсылар хаҡында бөтә мәғлүмәттәрҙе лә туплай. Мине лә матбуғатта, интернет селтәрҙәрендә "башҡорт халҡының улы", "башҡорт һуғышсыһы", "Башҡортостан спортсыһы" тип яҙалар.

**▸ Тимәк, һеҙгә ҡушаматты "Тархан" егеттәре таҡты? Ә "Тархан" менән Илфат Әмиров араһында ниндәй бәйләнеш бар? Һеҙ Мәскәүҙә, улар Өфөлә, тигәндәй? Һәм "Тархан" һуғышсылар командаһы хаҡында ла мәғлүмәт биреп китһәгеҙ...**

**Д. Аҡмырҙин:** Башта, аңлайышлыраҡ булһын өсөн, АДСС грэпплинг Федерацияһының "Тархан" һуғышсылар командаһы тураһында әйтеп үтәйем. Команданың нигеҙләүсеһе үҙем булам, ойошма Өфө ҡалаһында урынлашҡан һәм Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты ҡурсыуы аҫтында йәшәп килә. Ләкин беҙҙә дини йәштәр генә шөғөлләнә икән тип аңларға кәрәкмәй, "Тархан"да төрлө милләт егеттәре тупланған.

Беҙ Илфат менән "Бәйләнештә" селтәре аша таныштыҡ. Уның хаҡында ишеткәс һәм бер-ике алышын ҡарағас та аралашыу теләге тыуҙы. Ул, әлбиттә, яуап бирҙе һәм күп тә тормай, Өфөгә килеп тә төштө. Беҙ уны шундуҡ үҙебеҙ шөғөлләнгән залға саҡырҙыҡ. Унан һуң Мәскәүгә Рәсәй чемпионатына барғанда Илфат үҙе беҙҙе башҡортсалап ҡаршы алды. Ике йыл ярымдай ваҡыт арауығында бергәләп республикабыҙҙың йәш спортсылары өсөн әллә күпме саралар үткәрҙек. Күнекмәләр, алыштар, тәжрибә уртаҡлашыу өсөн осрашыуҙар ҙа ойошторолоп тора. Илфат Әмировтың Рәсәй командаһы менән Бөрйән, Баймаҡ райондарында ла бер аҙналыҡ хәрби йыйын үткәрҙек.

**▸ Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты ҡурсыуы аҫтында булғас, һеҙ үҙегеҙ ҙә дине-**

**✓ Бынан тыш, күп спортсы бағыусылар иҫәбенә лә йәшәй, әйтәйек, рингҡа сыҡҡан ваҡытта теге йәки был компанияны рекламалаған өсөн айырым һәм ҙур ғына суммала аҡса түләнә.**



# БАЛАЛАРЫ...

## күтәрер

**беҙ ҡағиҙәләрен үтәйһегеҙҙер, моғайын?**

**Д. Аҡмырҙин:** Спортсы былай ҙа ниндәйҙер кимәлдә иманлы кеше. Ә дин уның рухын тағы ла нығыраҡ сыныҡтыра. Спортсының күңелендә ошо юғары төшөнсәләр, бөйөк ышаныс икән, уны еңеү мөмкин түгел. Хатта аренала еңелгән хәлдә лә, уның рухы, аңы бөгөлөп төшмәйәсәк. Динле спортсының уйҙары, ниәте таҙа була. Ул үҙен дан һәм шөһрәт өсөн түгел, ә башҡа бөйөгөрәк, изгерәк төшөнсәләр өсөн әҙерләй.

"Тархан" һуғышсылар командаһы республикала, Рәсәй кимәлендә үткәрелгән эскелеккә, наркоманияға, терроризмға ҡаршы бөтөн акцияларҙа ҡатнаша, йәш быуынды сәләмәт йәшәү рәүешенә өгөтләгән, саҡырған сараларҙың уртаһында була, традицион дин юлын һайлауҙа ярҙам итә, төрлө яңылыш ағымдарға, секталарға ылығып китеүҙән ҡурсалау эштәре алып бара. Барлыҡ эштәребеҙ ҙә тейешле органдар һәм республиканың спортҡа бәйле етәкселектәре менән килешеп, һөйләшеп алып барыла. Шунлыҡтан, ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡтар, ҡаршы төшөүҙәргә юлыҡҡаныбыҙ юҡ, Аллаға шөкөр.

**И. Әмиров:** Минең башҡа мосолман илдәренән булған дини коллегаларым, дуҫтарым да күп. Мин уларҙың шундай көслө рухлы була һәм дөрөҫ юл таба алыуҙарына һоҡланам. Үҙем иһә дин тәртиптәрен тотам, тип әйтә алмайым, әммә күңелемдә иман бар һәм ул, ваҡыты етеп, мине лә тейешле ыҙанға төшөрөр, тип ышанам. Был тәңгәлдә тағы ла шуны өҫтәп киткем килә. Бына һин, мәҫәлән, бик яҡшы физик һәм психологик тороштаһың, ти. Әҙерлегең - шәп, кәйефең - шәп, көсөңә, өҫтөнлөгөңә ышанаһың, әммә ниндәйҙер секундтар эсендә барыһы ла үҙгәрә лә ҡуя. Нимәлер тотҡарлай һинең еңеүҙе. Шул саҡта һин беләгеңдәге көстөң, ғорурлыҡтың Оло ҡөҙрәт алдында бер ни ҙә түгеллеген төшөнәһең...

**▸ Илфат, һеҙ донъя кимәленә сыҡҡан тәүге алышығыҙҙы хәтерләйһегеҙме? Ниндәй кисерештәр, тәьҫораттар солғанышында булдығыҙ? Ғөмүмән, турнир алдындағы спортсының психологик хәле хаҡында бер аҙ һөйләп китә алаһығыҙмы?**

**И. Әмиров:** 2013 йылда әрмән һуғышсыһына ҡаршы сыҡҡайным. Бик көсөргәнешле алыш минең еңеү менән тамамланды. Әлбиттә, иңемә шундай яуаплылыҡ ятҡанын аңлап, бик тулҡынландым. Турнир алдынан да, ул үткәс тә интернет аша яҙыусылар күп булды. Улар миңә ышаныс белдерҙе, кәңәштәр бирҙе, хупланы, дәртләндерҙе. Шунда көйәрмәндәремдең, рухташ милләттәштәремдең күплеген аңланым һәм мин инде уларҙың ышаныһын юғалта алмай инем.

Һәр спортсы ниндәйҙер кисерештәр менән көтәлер инде ул алышты. Әммә береһендә лә ҡурҡыу, үҙ-үҙенә ышанмау йәки икеләнеү тойғолары булмайҙыр, тип уйлайым. Сөнки спорт ул икеләнеүҙе, ике уйлауҙы кисерә торған донъя түгел. Ҡурҡыуҙы иһә һин уны әле бәләкәй саҡта уҡ торғоҙоп ҡалдыраһың. Был тәңгәлдә мин ярыштарҙан тыш булған, башҡа ҡиммәттәргә ҡоролған ҡурҡыуҙарҙы әйтмәйем. Мәҫәлән, яҡын кешең өсөн, кемдеңдер һаулығы өсөн ҡурҡыу, борсолоу кеүек төшөнсәләр гел йәшәй кеше күңелендә. Ә нимәнелер эшләй алмауҙан йәки хәлеңдән килмәүҙән, алдағы ауырлыҡтан ҡурҡыу спортсыға хас түгел.

**▸ Егеттәр, һеҙ икегеҙ ҙә спорттың дзюдо, көрәш, бокс, каратэ һ.б. төрҙәрен үҙләштергән кешеләр. Аңлауымса, икегеҙҙең дә әлеге шөғөлөгөҙ үҙ эсенә ошо спорт төрҙәренең ниндәйҙер алымдарын индерә барыбер, шулай бит? Һеҙҙең юлды һайлағанда әле бына ниндәй спорт төрөнә тотонорға белмәй торған балаларға, йәштәргә ниндәй кәңәш бирер инегеҙ: спорттың ҡайһы төрөнән башлаған кешеләргә ММА-ла уңыш яулау еңелерәк буласаҡ?**

**И. Әмиров:** ММА буйынса бөтә донъяла популяр бер нисә ойошма бар. Уларҙың береһе - UFC. Бындай ойошмаға эләгеү - ММА менән шөғөлләнеүсе бөтә донъя спортсылары өсөн иң юғары кимәл. Был кимәлдә еңеүҙәр өсөн приздар меңдәрҙә түгел, миллиондарҙа иҫәпләнә. Һорауға яуап биргәндә, UFC чемпиондары статистикаһына таянмаҡсымын: туғыҙ чемпиондың етеһе ММА-ға ирекле көрәш аша, икәүһе тай боксы аша килгән.

**Д. Аҡмырҙин:** Ә асылда спорттың ниндәй төрөнән дә башларға була. Һеҙ бит беренсе йылдан уҡ профессиональ спортсы булып китә алмайһығыҙ. Баштағы база әҙерлегенә йүгереү, йөҙөү, саңғы кеүек бөтөн күнекмәләр ҙә инә. Шунлыҡтан, ауылдамы, ҡаламы, ҡул аҫтында нимә бар, ниндәй мөмкинлектәр бар, барыһын да файҙаланығыҙ.

**▸ Илфат, Рәсәй йыйылма командаһы спортсыһы булараҡ, һеҙгә һорау: сит илгә сығып эшләргә тәҡдимдәр яһалмаймы? Һәм әлеге ваҡытта шөғөлләнгән командағыҙ, тренерҙарығыҙ тураһында ла белге килә.**

**И. Әмиров:** Беренсенән, минең кимәлем әлегә сит ил ойошмалары ҡыҙыҡһынырлыҡ юғары түгел, икенсенән, ММА-ла, ҡағиҙә булараҡ, үҙ иленән сыҡҡан спортсыларҙы үҫтереүгә ҙурыраҡ иғтибар бүленә. Миҫал өсөн алғанда, мәҫәлән, Америкала бокс яҡшы үҫешкән һәм унан шоу яһау менән бик күп ойошма шөғөлләнә. Ә ММА буйынса бер-ике генә етди ойошма эшләй. Шуға күрә, сит илгә сығып китеүҙең әлегә мәғәнәһен күрмәйем. Тренерҙар мәктәбе лә Рәсәйҙекенә еткәне юҡ.

Әле шөғөлләнгән урыным Рәсәйҙең топ-клубтарының береһе, "Клуб единоборств №1" тип атала. Йыйылмала - 12 спортсы, барыбыҙ ҙа клуб иҫәбенә шөғөлләнәбеҙ, туҡланабыҙ, кейенәбеҙ. Көнөнә ике тапҡыр - иртәле-кисле күнекмәлар үткәрәбеҙ. Әлбиттә, был спаррингтар үҙ-ара ғына була, тигәнде аңлатмай. Башҡа клубтар, мәктәптәр менән осрашабыҙ. Мәҫәлән, мин ирекле көрәш менән өҫтәмә шөғөлләнәм, минең менән бер нисә тренер ҙа эшләй: ирекле көрәш буйынса - берәү, физик әҙерлек буйынса - икенсе, һуғыу алымдары буйынса - өсөнсө. Быларға өҫтәп, башлап шөғөлләнеүселәрҙән үҙем команда йыйғанмын, унда башлыса башҡорт студенттары.

**▸ Әңгәмә башында, беҙҙең республикала ҡатнаш көрәш төрҙәре әҙ үҫешкән, тип белдергәйнегеҙ. Венер Ғәлиевтан тыш, Башҡортостандан сыҡҡан билдәле спортсылар юҡ иҫәбендә. Был хәл нимә менән бәйле, һеҙҙеңсә?**

**И. Әмиров:** Минеңсә, беҙҙең Хөкүмәт тарафынан был спорт төрөнә барыбер ҙә иғтибар аҙыраҡ бүленә. Шулай ҙа ыңғай үҙгәрештәр бар, мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа ММА буйынса Башҡортостан союзы эшләп килә. Әле балалар, йәштәр күпләп был спортҡа ылыға. Бер биш-алты йылдан улар күренә лә башлаясаҡ.

Был юҫыҡта күрше Татарстан республикаһында, шулай уҡ тау халыҡтары араһында ҡатнаш спорт төрҙәренә иғтибар ҙур тип әйтер инем. Уларҙа еңеүҙәре өсөн спортсыларға хөкүмәт тарафынан яҡшы матди бүләкләү билдәләнгән. Мәҫәлән, чечен егете ҡайҙалыр еңеү яулай икән, республика етәкселеге шәхсән килеп, уға ҙур бүләк тапшыра, бөтөн көнкүреш проблемаларын хәл итә, сөнки был егет уларға спортсы булараҡ кәрәк. Ошо хәлде күргән йөҙ чечен малайы шул көндән үк спортҡа баҫа. Сөнки шундай мотивация бирелә.

Дағстанда "Донъяның биш яғы" тигән мәктәп-интернат бар, унда спорттың тик ҡатнаш алыш төрө буйынса ғына шөғөлләнәләр. Бында йөрөгән һәр баланан көслө спортсы үҫтереү маҡсат итеп ҡуйылған. Беҙҙә, үкенескә ҡаршы, ундай кимәлдәге мәктәптәр юҡ. Мин хатта бында ҡайтып күнекмәләр ҙә эшләй алмайым.

Тағы ла бер нәмә: Ишембайҙа кадет корпусында уҡыған саҡта күп ата-әсәләр балаларына спорт кейемдәре, кәрәк-яраҡтары һатып ала алмай ине. Сөнки ауыл кешеһенең ундай ҡиммәтле әйберҙәрҙе һатып алыр аҡсаһы юҡ. "Ҡуйсәле, уйын өсөн шуны алғансы, өйгә кәрәкле икенсе нәмәгә тотонам", - ти ине улар балаларына. Шул арҡала әллә күпме һәләтле балалар спорттан ситләште. Ошо мәсьәлә лә хәл ителергә тейештер. Йәш спортсыларҙы хөкүмәт үҙ ҡанаты аҫтына алһын ине.

Спортта ҙур уңыш ҡаҙанып, ҙур аҡса эшләү мөмкинлеге хаҡында, бәлки, барыһы ла белеп бөтмәйҙер. Әйҙәгеҙ, гәзитте уҡыған йәштәргә стимул формаһында беҙҙең кимәлдәге уртаса спортсының һәм UFS-ла сығыш яһаған көрәшсенең эш хаҡын атап үтәйек. Эш хаҡы спортсылар өсөн индивидуаль билдәләнгән сумманан ғибәрәт, дөйөмләштереп әйтеүе лә ҡыйын. Рәсәйҙәге урта кимәлдәге профессиональ спортсы айына яҡынса 50 - 70 мең һум эш хаҡы һәм һәр еңеү өсөн 100 - 150 мең һум аҡса ала. Бынан тыш, күп спортсы бағыусылар иҫәбенә лә йәшәй, әйтәйек, рингҡа сыҡҡан ваҡытта теге йәки был компанияны рекламалаған өсөн айырым һәм ҙур ғына суммала аҡса түләнә.

**Д. Аҡмырҙин:** Мин дә Илфаттың, яҡын киләсәктә төрлө спорт төрҙәре буйынса көслө егет-ҡыҙҙарыбыҙ үҫеп сығасаҡ, тигән фекере менән килешәм. Һуңғы икеөс йылда ошо грэпплинг менән ҡыҙыҡһыныусы йәштәр ҙә бермә-бер артты. Райондарҙа, ауылдарҙа ла барҙар ундай егеттәр. Улар үҙҙәре кеүек ябай ғына ауыл егеттәренең ниндәй ҡаҙаныштарға өлгәшкәне тураһында уҡый, күрә лә, ниңә мин ауылда бер ниндәй маҡсатһыҙ ятам әле, тип уйлай. Әгәр ҙә кеше эсмәй, сәләмәт тормош алып бара, спортҡа яҡынлаша, дин тәғлимәттәрен аңлай икән, уның әллә ниндәй маҡсаттары барлыҡҡа киләсәк, донъяға ҡарашы үҙгәрәсәк, ул ыңғай тойғолар менән тулышасаҡ, уңышлы шәхескә әйләнәсәк.

Башҡорт егеттәренең рухы ла, физик үҫеше лә, мөмкинлектәре лә башҡаларҙан кәм түгел, хатта күпкә юғарыраҡ та. Тик уларға ялҡаулыҡты һәм үҙ яҙмышына битарафлыҡты ғына еңергә кәрәк.

**▸ Әйҙәгеҙ, ошо тәңгәлдә спортсы тәрбиәләргә теләгән ата-әсәләргә лә кәңәштәр биреп үтәйек...**

**И. Әмиров:** Әлегә үҙемдең балаларым юҡ, әммә киләсәктә уларҙы, малайҙарҙы инде, яуаплылыҡта, тәбиғи ҡатылыҡта үҫтерәсәкмен. Бала бәләкәй саҡта уның өсөн хәл итергә кәрәк, һин бит күрәһең уның мөмкинлектәрен - һаулыҡ торошо буйынса ниндәйҙер сикләү юҡ икән, ҡыу уны спортҡа, талап ит, ҡуш! Әллә ниндәй спортсы булып китмәгәндә лә, күркәм холоҡ тәрбиәләнер, физик һәм рухи көс тупланыр һәм был киләсәктә уға мотлаҡ ярҙам итәсәк. Ҡыҙҙарға ла сит булмаһын спорт. Сәләмәтлек, сынығыу, көс уларға ла кәрәк.

**Д. Аҡмырҙин:** Бөгөн йәштәрҙең тормошта үҙ юлын таба алмай ҡаңғырыуы уларҙың эске һәм тышҡы көсһөҙлөгөнән килә. Тимәк, ата-әсәләре уларҙы тамағына ашағанмы, йылы кейенгәнме, итеге өйкәмәйме, шарфы бармы, тип, ҡолға буйлы булғансы әпәүләгән. Әлбиттә, ата-әсәнең һөйөүе һәм ҡайғыртыуы тәбиғи. Әммә баланы йәлләүҙең, бәпләүҙең самаһы булырға тейеш барыбер. Минең үҙемде атайым улай әпәүләп торманы, ҡаты булды. Шуға ла бәләкәйҙән үҙаллы булдым. Ун ике йәштән интернатта йәшәнем. Һәм ошолар миңә бөгөнгө халәтемә килеп етеүгә булышлыҡ итте. Ир баланы бәләкәйҙән "ир" булыуға әҙерләргә кәрәк. Шундай башланғыс алмайынса, спорт өлкәһендә нимәгәлер өлгәшеп тә булмайҙыр.

**▸ Ярай, һеҙ рингта спортсылар, беҙ һеҙҙе шулай "ҡорос йөҙроҡло" егеттәр итеп беләбеҙ. Ә тормошта һеҙ ниндәй? Нимәләр яратаһығыҙ, ҡайҙарға йөрөйһөгөҙ, нисек ял итәһегеҙ? Ҡатын-ҡыҙҙы ла күҙгә элəһегеҙҙер бит?**

**И. Әмиров:** Әлбиттә! Ҡатын-ҡыҙһыҙ донъя һаңһыҙ! Мин күптән түгел генә өйләнгән кеше, яңы-яңы ғаилә тормошона өйрәнәм. Яратҡан шөғөлдәрем: уҡыу, театрға йөрөү, мюзиклдар тыңлау, тәбиғәткә сығыу. Мин, асылда, романтик та ул. Холҡом йомшаҡ, әммә ҡыҙыумын.

**Д. Аҡмырҙин:** Мосолманды түбәтәй кейеп, тәсбих тотоп, мәсет тирәһендә генә йөрөй тип уйлау стереотибы бар. Тик мин һәм мин белгән күп егеттәр улай түгел. Бәйғәмбәребеҙ ҙә, төрлө яҡлап үҫешегеҙ, тигән. Дини дәрестәрҙән тыш, төрлө фәнни-ғәмәли конференциялар үткәрәбеҙ, тарих, әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһынабыҙ. Төрлө хәйриә, йәмғиәт эштәрендә ҡатнашабыҙ. Шулай уҡ театр-концерттар ҙа тыйылмай, башҡорт йырсылары сығыштарын да күҙәтеп барам.

Ҡатын-ҡыҙҙарға килгәндә иһә, улар ир-ат тормошонда иң мөһим роль уйнаусы инде. Балаларындың, ғаиләндең ниндәй булыуы ла ҡатыныңдың ниндәй булыуынан тора. Ҡатын-ҡыҙ үҙенең ир кеше өсөн яралтылғанын аңлаһа, донъяла күп нәмәләр юлға һалыныр ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Егеттәр менән һөйләшеү күңелгә рух өҫтәне, ниндәйҙер патриотик концерт ҡараған, әҙәбиәт уҡыған, телмәр тыңлағандан һуң була торған тойғолар кисерелде. Милләттә ошондай бер-береһен күтәрер, бер-береһенә терәк булыр егеттәр булыуы ғорурлыҡ, әлбиттә. Гәзит уҡыусылар ни тиер?**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әңгәмәләште.**

**✓ - Ҡустым, бына нәмә, ағас кәрәк булһа, контораға бар, минең эш урыны шунда. Кабинетым да... Бында ултырып ҡына ундай нәмәне решать итеп булмай ул, - тине лә, һалмаҡ баҫып сығыу яғына ыңғайланы.**



Мәҙинә ЙӘҒӘФӘРОВА

# ҺЫҺАУ

(ХИКӘЙӘ)




– Әйҙә, төш тә атла, - тип дорфа ғына өндәште йәшерәге.

Машинаһын бикләргә ынтылған Ильястан:

- Нимә, милиция йорто алдынан юғалыр тип ҡурҡаһыңмы? - тип икәүләп тәләкә итеп алдылар. Ильяс улар ҡабаландыра тип иҫе лә китмәне, һәр ишеген, багажнигын ҡарап, бикләп сыҡты, шунан ғына һалмаҡ аҙымдар менән алдан төштө.

- Дә-ә-ә, ағай кеше, нервыларың ныҡ икән, һинең урында башҡа кеше булһа, әллә ҡасан сәбәләнеп-ғауғаланып ҡолаҡ итен ашар ине. Нимә, ысынлап та, белмәйһеңме нимәгә саҡыртҡандарын? Былай, ундай-быңдай эш боҙған кешегә бик үк оҡшамағанһың да... Ундайҙарҙы әллә ҡайҙан танып торам. Етерлек күрелде был эштә, - тип һүҙ ҡушты өлкәнерәге.

- Саҡыртҡас, сәбәбе барҙыр, инәйек әле, - тип ҡыҫҡа тотто һүҙҙе Ильяс.

Эскә инеп киттеләр. Ишек төбөндә һаҡта торған дежур милиционерға кабинетын, тикшереүсенең фамилияһын әйтеп, оҙатыусылар кире сыҡты. Ильясты коридор буйлап артабан алып киттеләр. Тар ғына коридор буйлап китеп барғанда, ҡапыл бер ишек асылып китте лә, унан уҡ кеүек атылып, дөбөр-шатыр ике уҫлаптай егет бер-береһен тапарҙай булып килеп сыҡты. Ябылып етмәгән ишек аша эстән кемдеңдер йән көсөнә: "Вон отсюда, молокосы! Я вам покажу кузькину мать!" тип, тоҙло-боросло ҡатлы-ҡатлы һүгенгәне ишетелде. Ильяс менән уны оҙатып барыусы егет көскә ситкә тайшанып ҡалды. Ҡыҙарып-бүртенгән йәш егеттәрҙе дежур егет: "Нимә, хужаның бөгөн кәйефе юҡмы? Да, не повезло һеҙгә... Бәләһенән баш-аяҡ, бөгөн күҙенә салынмау хәйерлерәк булыр ине лә",- тип, ҡарашы менән оҙатты. Ильяс ишек тышына яҙылған исем-фамилияны уҡып та өлгөрмәне, ҡапыл ул эс яҡтан асылып китте. Тупһала ҡулына ҡат-ҡат папкаларға һалынған эш ҡағыҙҙары тотҡан, уҙа-барһа 30-35 йәштәр самаһындағы егет күренде."Йәш кенә булһа ла, подполковник званиеһында икән", - тип кенә уйлап өлгөрҙө Ильяс уның иңбашындағы йондоҙҙарға күҙ һалып. Уны күреү менән дежур милиционер ыңғай кәүҙәһен шәм кеүек турайтып, честь бирҙе:

- Товарищ подполковник, гражданин Сынбулатов по вашему указанию доставлен!..

Тегеһе уға эйәге менән генә ымлап, китергә рөхсәт бирҙе лә кире бүлмәгә инде.

- Әйҙә, үтеп ултырығыҙ, ағай, - тип, Ильясҡа артынан эйәрергә ҡушты подполковник. Эш өҫтәле артына үтеп, ҡулындағы ҡағыҙҙарын кире өҫтәлгә өйөп һалды, йомшаҡ әйләнмәле ултырғысына урынлашҡас, уға ҡаршыһынан урын күрһәтте."Һе-е-е, ағайҙан һалдыра был, тимәк, эштәр әллә ней хөрттән түгелдер". Эсенә бер аҙ йылы йүгерҙе Ильястың, шулай ҙа һағайыңҡырап, ҡаршыһында ултырған егеткә текәлде. "Йүкә" телефон аша бынан бер-ике ай элек милиция етәксеһен баш ҡалаға ҙурыраҡ эшкә күсереүҙәрен, урынына күрше райондан яңыһының килеүен ишеткәйне инде. Хатта уның ниндәйҙер ҙур бер хужа малайы булыуын, уҡып бөтөп ҡайтыуы менән ыңғай кабинет эшенә генә ултырып, йәһәт-йәһәт кенә йондоҙҙар сүпләп, эш баҫҡысынан тиҙ арала үрләп китеүен дә һөйләп алғайнылар.

Бер килке тынып ҡалдылар. Яңы хужа нисегерәк һүҙ башларға белмәйенсә, ултырған урынында борғоланды, алдында сәселеп ятҡан эш ҡағыҙҙарын рәтләштерҙе, кәрәкмәһә лә тартмаһын асып япты. Уңайһыҙ тынлыҡ оҙаҡҡараҡ һуҙылғас, тамағын ҡырғылап алды ла, Ильясҡа күтәрелеп ҡараны.

- Ағай, минең йомош, тип, йомош та түгел инде, шәхси эш буйынса саҡыртҡайным һеҙҙе. Нисегерәк аңлатырға? Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул - район үҙәгенән ер алып, өй һала башлағайным. Таныштарым ағас алып бирешкәйне, шуны һәйбәт кенә урындан үлсәтергә ине. Кәрәкле кешеләрҙән белешеп бөттөм мин, лесхоздың быйылғы планы буйынса тотош ҡарағайҙан торған урындар тик һеҙҙең обходта ғына ҡалған икән, ҡалғандарҙыҡында яртылаш ҡайын, тинеләр... Тем более һеҙҙең шул кварталда 5-6 ҡарағас та күренеп тора картала, улары нигеҙгә китер ине... Ҡарағасты үҙегеҙ беләһегеҙ, хәҙер "Ҡыҙыл китап"ҡа индергәстәре, бөтөнләй ҡыйбат, табыуы ла ҡыйын...

Нимә-нимә, төрлөһөн уйлап ултырып, тик быңдайҙы көтмәгән Ильястың аптырауҙан күҙҙәре маңлайына менеп китә яҙҙы. Ҡапыл ярһып китеүҙән көскә тыйылып, үҙен ҡулға алды, һүҙҙәрен теш араһынан ҡыҫып тигәндәй, ижекләп сығарҙы.

- Нимә?.. Шуның өсөн генә мине ошолайтып конвой менән алып килделәрме?..

Уның көйҙөргөс ҡарашынан тегенеһе әҙерәк уңайһыҙланды, ыҡ-мыҡ итеп алды.

- Ярай, ағай, шулай тура килде инде... Бына бит, бер ҙә эштән бушап булмай... Бөтә нәмә яңы, өйрәнергә кәрәк. Ҡағыҙ эше менән дә күмделәр бит хәҙер беҙҙе, былайы ла етерлек. Бөгөн вапще без обеда ултырам, тын алырға ла ваҡыт юҡ... Аптырағандың көнөнән шылтыратҡайным, там внизу переборщили, наверно, начальник участковых өйөгөҙгә наряд ебәргән дә ҡуйған...

Ильяс үҙ ҡолағына үҙе ышанмай, шаңҡып ҡалды.

- Нимә-ә-ә? Минең өйгә - наряд?..

Хужа ҡулдарын йәйеп ебәреп, ихлас йылмайҙы.

- Ладно, ладно, сочтемся, ағай... Буш итмәм...

Йәне көйгән Ильяс урынынан торҙо ла, ҡарашын туп-тура йәш егеткә төбәп, һәр һүҙенә көслө баҫым яһап:

- Ҡустым, бына нәмә, ағас кәрәк булһа, конторағa бар, минең эш урыны шунда. Кабинетым да... Бында ултырып ҡына ундай нәмәне решать итеп булмай ул, - тине лә, һалмаҡ баҫып сығыу яғына ыңғайланы.

- Яҡшылыҡ менән килешербеҙ, тип уйлағайным, ағай, күрәһең, икенсе төрлөрәк һөйләшергә тура килер... Кемдең бүлмәһендә икәнлекте онотоп ебәрәһегеҙ, ахыры...

Хужаның һүҙҙәре Ильястың ныҡ итеп япҡан ишегенә ҡыҫылып, ишетелмәй ҡалды.

***

...Һәр ауылдың үҙенең "сход" үткәрә торған урыны була. Яҙылмаған ауыл ҡанундары буйынса, элек-электән ҡатын-ҡыҙ һуңғы яңылыҡтарҙы ауылдағы кетәк ояһындай ғына лавканың күтәрмәһендә ишетеп ҡайта: кемдең һыйыры быҙаулаған, һарығын эт ашаған, балаһы ике алған, малайы тәмәке тарта, ҡыҙын кем оҙатып ҡуйған, ире кем менән, нисә ярты эскән, нисәлә ҡайтып ҡолаған, кем менән ыҙғышҡан... Ирҙәр иһә күберәген ата коммун Хоҙайбирҙененең ҡапҡа алдында төйәкләнәләр. Кеме тәмәке көйрәтә, кемеһелер кәрт һуға, йәшерәктәре йүгереп кенә һырағa барып килә һәм китә гәп һатыу... Хатта ҡайһы бер хәбәрҙәрҙе ҡатын-ҡыҙҙан алдараҡ ишетә әле улар. Бөгөн был урындарҙан кеше өҙөлмәне: һәр береһе үҙенең ишеткәненә саҡ ҡына өҫтәй торғас, Гөлсөмдәр йортонда булған ваҡиға бөтөнләй икенсе төҫ алып ҡуйырып китте. Берәүҙәр әйтеүенсә, әҙ генә "һалмыш" ҡайтҡан Ильясты бисәһе шул ерҙә үк милиция саҡыртып, ун биш тәүлеккә яптырған, имеш. Икенселәр: "Юҡ таһа, Ильяс үҙенең обходынан ҡарағас урлаған да, милиция шуны тикшереп йөрөгән. Бына антымшантым, үҙем күрҙем", - тип еңеште. "Эшенән сығаралар уны былай булғас. Милиция бушҡа йөрөмәҫ! Һай-һай, әллә кем булып киткәйне!" - тине кемеһелер. Ҡыҫҡаһы, бәләкәй генә ауыл бөгөн йәнләнеп китте. Ирҙәр тәмәке көйрәткән, ҡатындар һыуға барған арала был яңылыҡ ауылды бер ҡат урап сығып өлгөрҙө. Телдән-телгә күсә торғас, үҙҙәре уйлап сығарған хәбәргә үҙҙәре лә ышанып бөттө...

Гөлсөм эш менән күңел болоҡһоуон баҫырға тырышһа ла, килеп сыҡманы, ҡулы өйрәнелгән хәрәкәттәр менән көндәлек мәшәҡәттәрҙе теүәлләй, мейеһе иһә ауыр уйҙарҙан ярылып килә. Түҙмәй, көн кискә ауыша башлағас, ҡапҡа тышына сығып баҫты. Уны күреп, баянан бирле һайыҫҡан шикелле был яҡты ҡарауыллаған Нәсимә йылп итеп янына килеп етте. Йөҙөнә мөмкин тиклем хәстәрлек сығарырға тырышып, уға өндәште:

- Ҡайттымы шул Ильясың?

Ни тиклем һарыуы ҡайнаһа ла, Гөлсөм уға белгертмәне.

- Юҡ әле, шуны көтөп торам. Әйҙә, ултырайыҡ әле әҙерәк.

Улар ҡапҡа тышындағы артлы эскәмйәгә йәтешләп ултырып та өлгөрмәне, оло юлдан саң борҡотоп Ильястың еңел машинаһы күренде. Нәсимә ырғып тороп уҡ китте.

- Ана, тегенең ҡайтып килә...

Гөлсөм, йөрәге тулап китһә лә, эске кисерештәрен белгертмәне, йөҙөнә күрәләтә битараф ҡиәфәт сығарып, тыныс ҡына яуап бирҙе:

- Әлләсе, шулмы икән, алыҫтан насар күрәм.

Ә үҙенең эсе яна... Ап-аҡ булып ҡобараһы осҡан Гөлсөм тыны менән тартып алырҙай булып яҡынлашып килгән машинаға текәлде. Был, ысынлап та, уларҙың "Нива"һы ине. Машина оло юлдан боролоп, ҡапҡа тышына килеп туҡтағансы, ҡатындар бер ни ҙә өндәшмәне. Тын да алмай көтөп торған Гөлсөмгә ҡарап тороуы ҡыйын ине. Нәсимә иһә эстән генә ниндәйҙер бер мөһим ваҡиға көткәндәй, урынында тороп сыҙамай тапанды. Машина эсенән бер ни булмағандай ғәҙәттәгесә йылмайып килеп төшкән Ильяс, артҡы ултырғыста ятҡан күстәнәстәрен үрелеп алды ла, ҡатындарға ҡарай ыңғайланы. Гөлсөмөнөң йөҙөнә ҡарау менән бөтәһен дә аңланы.

- Оҙаҡлап киттем бөгөн, юғалттығыҙмы? Азат улым ҡайҙа һуң? Уға балыҡ ҡармаҡларға ырғаҡтар алғайным, - тип ҡулындағы әйберҙәрен ҡатынына һондо.

- Ҡайҙа булһын, уйнай малайҙар менән. Әйҙә, һине көтә-көтә ашым иҙелеп бөттө. Күрше, һин дә ин, сәй эсеп ҡайт, - тип Гөлсөм ҡалтыранған аяҡ быуындарын көскә тыңлатып, ҡапҡа яғына ыңғайланы. Сиктән тыш мөһим, ниндәйҙер ҙур ваҡиға, талаш-тартыш көткән Нәсимә аптыранып уларға текәлде. Уның бөтә сырайында сикһеҙ ғәжәпләнеү ярылып ята ине. Күҙҙәрен берсә шаян көлөмһөрәгән Ильясҡа, берсә саманан тыш тыныс, хатта битараф Гөлсөмгә йүгертте.

- Әйҙә, ҡорҙашбикә, әйҙә, ин, - тип Ильястың саҡырыуына:

- Ҡуй, ҡайтайым, анау һәптән һыйырым төнһөҙ ҡайтып инмәй, һеҙҙекеләр иртә ҡайтҡас, рәхәт, эшегеҙ алданыраҡ бөтә, - тип һөйләнә-һөйләнә ҡайтыу яғына ыңғайланы.

Ҡапҡа эсенә инеү менән Гөлсөм иренең яурынына башын терәп, һулҡылдап илап ебәрҙе. Көнө буйы сикһеҙ көсөргәнешлектә йөрөү, билдәһеҙлек, башына инеп йөҙәткән әллә ниндәй ҡурҡыныс уйҙар уның бар көсөн алғайны. Ильяс кәләшенең сәсенән һыйпап иркәләне, бармаҡ остары менән сикәһенән йүгергән йәш тамсыларын һөрттө.

- Эй, илаҡҡынамды минең... Һөйләп ебәр, кем тейҙе?

Гөлсөм, үпкәләп, уның ҡултыҡ аҫтынан һурылып сыҡты.

- Нисек инде? Киреһенсә, һин миңә аңлатырға тейешһең был милиция менән фокустарыңды. Исмаһам, әҙерәк минең турала уйлаһаң ни була?

- Уйламаған ҡайҙа инде ул! Минут-секунд һайын иҫкә төшөп тик тораһың...

Ильяс, һәр ваҡыттағыса, һүҙҙе шаярыуға ғына бороп, еңел ҡотолорға уйлағайны ла, Гөлсөмөнөң күҙҙәренә ҡарағас, етди ҡиәфәткә инде.

- Эшем шулай булғас, ҡалайтайым инде... Һиңә инде күптән өйрәнергә ваҡыт, беренсе тапҡыр түгел дә һуң...

- Эйе, һиңә әйтеүе генә рәхәт... Һин, ней, иртәнсәктән сығып китәһең дә ҡара төнһөҙ ҡайтып инеүҙе белмәйһең... Бөтә ауылдың һүҙ-хәбәре миңә...

Күңеле тулышҡан Гөлсөм әйтәһе һүҙҙәрен әйтеп бөтә алманы, тауышы ҡалтыранып китте. Эштең тағы кәрәкмәгән йүнәлешкә боролоуон күргән Ильяс тиҙ генә ҡулдарын өҫкә күтәрҙе.

-Стоп, стоп, туҡта, кәләш, минең ғәҙәтте беләһең: тәүҙә ашыңды ашат! Шунан һуң ғына һөйләрмен... Әтеү үҙең беләһең, ас кешенең асыуы яман. Бына үҙеңде ашайым да ҡуям!..

Ире Гөлсөмдөң биленән ҡосаҡлап, өйгә алып инеп китте.

...Нәсимә, күршеләре яғынан тауыш-тын килмәйме, тип, әллә нисә тапҡыр ихатаға сығып әйләнде. Ике хужалыҡты ҡап уртаға айырып торған ҡойма янына килеп, суҡайып сығып торған ботағы төшкәндән һуң өңөрәйеп ҡалған тишек урынынан тегеләр яғын күҙәткеләне. Тик әйләнсек һарыҡ кеүек күпме генә ишек алдын тапамаһын, күршеләр яғынан шылт иткән дә тауыш-тын сыҡманы...

(Аҙағы. Башы 24-се һанда).

*✓ Тире бүрек бейек, өҫкә табан киңәйтелеп тегелгән тирәсле, яҫы, бәрхәт йәки тула менән ҡапланған ҡыйыҡлы булған. Эсенән һарыҡ тиреһе менән йылытылған. Бындай бүректәр бик матур булған, затлы тире күҙ яуын алып торған.*



*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...*

# ИКЕ КҮҘЕҢ МЕНӘН...

## баҡ был донъяға




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бер һүрәткә ҡарап..." тигән рубрикаһында тәҡдим ителгән Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, СССР, Рәсәй рәссамдары берлеге, Рәсәй рәссамдары ижади берлеге ағзаһы, живопись, графика, монументаль сәнғәт төрҙәрендә танылыу яулаған Вәкил Шәйхетдиновтың "Яугир, шағир, башҡорттоң милли геройы" тигән картинаһы буйынса үҙемдең фекерҙәремде уртаҡлашмаҡсымын.**

Картина киң ҡоласлы. Минеңсә, унда өс быуын тарихи сылбыры сағыла: батша заманы, Советтар союзы, демократия осоро. Рәссам ижады менән замандаштарына өндәшә, оран һала, халыҡтың мәҙәни, тарихи хәтерен тетрәндереп уятҡыһы килә кеүек. Аңһыҙ-наҙанлыҡ арҡаһында кешелек ҡимммәттәренең ҡыл өҫтөндә генә ҡалғаны һүрәтләнә.

Артҡы планда - тәбиғәт. Салауат кеүек шәхестәребеҙ тәбиғәтте йәнен аямай һаҡлап, киләсәккә тапшырған. Милли батырыбыҙ беҙгә бер күҙ менән баҡҡан, үҙе етди, уйсан. "Был донъяла аҙашмай атлар өсөн үткән тарихыңа ҡара бер күҙең менән", - тигән кеүек. Икенсе яҡтан, хәҙерге быуынды киҫәтә - донъя ләззәтенә, малға, аҡсаға табынып, фани донъя мәшәҡәттәренән айный алмай, ер, тел, ил, рухи ҡиммәттең юҡҡа сығып бөтөүенә ишара. Тарихтан белеүебеҙсә, динде, Аллаһы Тәғәләне инҡар иткән ҡәүемдәр һәм халыҡтар Ер йөҙөнән юҡҡа сыҡҡан. Күкрәгенә "Салауат" тип яҙылған Салауатыбыҙ: "Киләсәгегеҙ дин, иманға бәйле. Империализация, коммунизация, хәҙерге глобаллаштереү ҙә бер маҡсатлы - милләтте бөтөрөү", - тип өндәшмәйме икән беҙгә? Әхлаҡһыҙлыҡ, иманһыҙлыҡ, енәйәт, фәхишәлек - донъялағы иң яман ошо йөшөү рәүешенә ҡолағы, күҙе күрмәгән һуҡыр, һаңғырау ғына эйәрә, йөшәй.

Ата-бабаларыбыҙ донъяға ике күҙе менән баҡҡан. Доғалы-ғилемле, иманлы олатайҙарыбыҙ өҫкә аңға таяныу эш иткән, сөнки ҡәлебтәре асыҡ, таҙа булған. Беҙҙең быуын атеистар: бер ҡолаҡлы, бер күҙле, ҡәлеб - бысраҡ. Аҡса, малды, дәрәжә-байлыҡты ғына күрәбеҙ. Салауаттарыбыҙ, ата-бабаларыбыҙ иманлы булғаны өсөн дә меңдәрсә йылдар дауамында яндырылһа ла, һуйылһа ла, атылһа ла, ҡәләләре ҡыйратылһа ла, бирешмәгән. Донъя ләззәте бөгөн бар, иртәгә юҡ, ә мәңгелектең ҡиммәте сикһеҙ. Беҙгә, үҙебеҙҙе һаҡлайыҡ, тиһәк, иманға, милли асылға ҡайтыу кәрәк. Рәссам: "Күңеле һуҡырға юлдаш булма, күҙе һуҡырға юлдаш бул", - тигән кеүек. Был турала Ҡөрьән Кәримдә "Әләғрәф" сүрәһенең 179-сы аятында: "Уларҙың ҡәлебтәре бар - аңы менән фекерләп ҡарамайҙар. Уларҙың күҙҙәре бар, ул күҙ менән хаҡлыҡты күрмәйҙәр. Уларҙың ҡолаҡтары бар, уның менән хаҡ һүҙҙәр, вәғәздәр тыңламайҙар. Ул заттар төрлө хайуан кеүектәр, бәлки, уларҙан аҙғыныраҡтыр. Ул заттар ғафилдәр", - тиелә. "Юныс" сүрәһенең 10-сы аятында: "Уларҙа шундайҙары бар, улар һинә ҡарап торалар, һинең һүҙеңде ишетәләр, тыңлайҙар, әммә һин уларға - һаңғырауҙарға ишеттерә алырһыңмы һуң? Улар һинең һүҙеңде аҡылына һалып ҡарамаҫтар, әммә һин уларҙы хаҡ юлға күндерә алырһыңмы, әгәр улар уны - хаҡлыҡты күрергә теләмәһәләр", - тиелә. Ислам донъяһы бар, буласаҡ. Империализм, коммунизм, йәғни иманһыҙ короллоштар тарихи сәхнәнән юғалды, ҡоланы - Ислам мәңгелек.

Салауатыбыҙҙың атыһын башы өләшләтә һүрәтләнә, теҙгене бар - теҙген иманлының ҡулында, ат - ул ил. Ил менән иманлылар ғына идара итергә һәләтле, тигәнгә ишара. Ҡулланылмаған рухи байлыҡтарыбыҙ ресурсы, заман башҡорттары - йөштәребеҙ бар. Шуға ла киләсәктә халҡыбыҙҙың киләсәге яҡты булыр. Әммә бының өсөн дөрөҫ юлда булыу шарт. Ҡөрьән - Сөннәт буйынса йәшәп Кеше бейеклегенә күтәрелеү бурысы ҡуйған Вәкил Шәйхетдинов та.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

*ӘЙҘӘГЕҘ, ФЕКЕР ҠОРАЙЫҠ!*

# МИЛЛИ КЕЙЕМДӘ - МИЛЛИ ХОЛОҠ

## БҮРЕКТӘР

Көн-төн эштә йөрөгәнгә, йәйәү йөрөүгә ҡарағанда, һыбай йөрөүҙе хуп күргәнгә, башҡорт ирҙәрендә башын ел-һыуыҡтан һаҡлау мохтажлығы ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына ҡарағанда нығыраҡ булған. Шуға ла, ҡатын-ҡыҙҙарҙың байрам баш кейемдәре, биҙәүестәре күп, ә ирҙәрҙә көндәлек баш кейемдәре төрө күберәк.

Бөгөн һүҙ бүректәр хаҡында барасаҡ. Башҡа баш кейемдәре һымаҡ уҡ, бүректәр ҙә бейек ҡыйыҡлы булған. Ғөмүмән, ни өсөн башҡорт баш кейемдәренең формаһы бейек булған һуң? Был һорауға яуапты ата-бабаларыбыҙҙың көнкүреш шарттарында эҙләргә кәрәк. Ирҙәр һунарға йөрөгән, көтөү көткән, сит яҡтарҙа хеҙмәт иткән. Тиренән йәки кейеҙҙән тегелгән баш кейемдәре елдән һәм һыуыҡтан һаҡлаһа, бейек ҡыйыҡы эсендәге һауа тирләргә бирмәгән, был - үҙенә күрә гигиеник сара. Әйткәндәй, шул уҡ сәбәптән ир-аттар бер ҡасан да оҙон сәс үҫтермәгән. Аҙналар, айҙар буйы ситтә йөрөгәндә, оҙон сәсте нисек тәрбиәләмәк кәрәк? Шуға ла телевидение төшөргән ҡайһы бер клиптарҙа (мәҫәлән, 1812 йылдарҙа сығарылған "Һары ла сәс" йырына төшөрөлгән клипта) оҙон сәсле башҡорт егеттәрен күрһәтәләр икән, был - тупаҫ хата. Сөнки беҙҙең ата-бабаларыбыҙ таҙалыҡҡа бик ҙур иғтибар биргән, һәм ҡыҫҡа сәс бының билдәһе булып тора. Шуны ла әйтеп китергә кәрәк: башҡорт ирҙәре башын гел түбәтәй менән ҡаплаған, һәм бүрек аҫтынан да түбәтәй кейер булған.

Әгәр ҡолаҡсын һәм көләпәрәә ҡалыплаштырылған бер форма һаҡланып килһә, бүректәрҙең төрҙәре иҫ киткес күп. Байрамдарға ҡама бүрек, ҡамсат бүрек кейер булғандар. Ҡара төлкөнән тегелгән бүрек бигерәк тә затлы һаналған. Был йәнлек һирәк осрағанлыҡтан, ул иң ҡиммәтле бүләктәрҙең береһе булған, һабантуй ярыштарында еңеүселәргә бирелгән. Ябай төлкөнән тегелгән бүректе иһә бөтөн төбәктәрҙә лә кейгәндәр. Бүректәр шулай уҡ бүре, аҡ төлкө, ҡуян һәм тейен тиреһенән тегелгән, көндәлек кейә торғандары һарыҡ тиреһенән булған.

Тире бүрек бейек, өҫкә табан киңәйтелеп тегелгән тирәсле, яҫы, бәрхәт йәки тула менән ҡапланған ҡыйыҡлы булған. Эсенән һарыҡ тиреһе менән йылытылған. Бындай бүректәр бик матур булған, затлы тире күҙ яуын алып торған. Ҡатын-ҡыҙҙар кейгән бүректәр ҙә ошондай формала булған.

Икенсе төрлө тегелгән бүректәр ҙә булған, һәм, көнкүрештә кейеүгә уңайлыраҡ булғанға, киңерәк таралған. Күбеһенсә улар һарыҡ тиреһенән тегелә торған булған, уларҙы ҡыш та, йәй ҙә кейгәндәр. Улар тиреһен эскә ҡаратып, бейек итеп тегелгән, тула, бәрхәт менән көпләнгән, тирәсе тире менән биҙәлгән. Ҡыйығын уҡа йәки төҫлө таҫма менән биҙәгәндәр. Бындай бүректәрҙең формалары төрлө булған. Әлбиттә, ҡарауға ҡайтышыраҡ күренһә лә, көпләнгән бүректәр ҡулланыуға уңайлыраҡ булған, туҙып бармаған.



1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан башҡорттар төшөрөлгән һүрәттәрҙә тағы бер төр бүректәр күреп була. Улар бейек конус формаһында, өҫ яғы туҡыма менән ҡапланған, тирәсе тиренән тегелгән. Уға оҡшаш баш кейеме үзбәктәрҙә һәм тажиктарҙа һаҡланған һәм "кулох" тип атала. Күреүебеҙсә, был баш кейеме башҡорттарҙа ла киң таралған булған. Был бүректәрҙе тарихсылар боронғо сактарҙың баш кейеме менән бәйләй. А.Орловскийҙың һүрәттәрендә иһә бындай бүректәр дүрт йәки һигеҙ яҡлап, уҡа менән биҙәлгән. Шулай уҡ ҡолаҡсындыҡы һымаҡ бейек башлы төлкө бүрек тә күреп була уның һүрәттәрендә. Ә 1857 йылда, кантонлыҡ системаһы ваҡытында, Башҡорт ғәскәре өсөн махсус проектланған обмундированиеға киң тирәсле, түңәрәк ҡыйыҡлы бүрек индерелә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әгәр заманында рус һәм француз рәссамдары башҡорт һуғышсыларын төшөрөп ҡалдырмаған булһа, халыҡ костюмы тураһындағы бик күп мәғлүмәттән мәхрүм булыр инек. Әле беҙ уларҙы күрә алабыҙ, ләкин һүрәттәге бүректәрҙең ниндәй төрө нисек аталғанын белмәйбеҙ. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостандың үҙенә килеп сыҡҡан һа ине лә бит рәссамдар... Үкенескә ҡаршы, этнографтар башҡорттар менән ун туғыҙынсы быуаттың уртаһынан башлап ҡына ныҡлап ҡыҙыҡһына башлай, ә ул ваҡытҡа башҡорт кейеменең байтаҡ үҙенсәлектәре юйыла башлаған була. Шуға ла беҙҙең бурысыбыҙ - һаҡланып ҡалған өлгөләрҙе өйрәнергә һәм сәхнә костюмдарында ла, көндәлек тормошта ла ҡулланырға.**

**Таңсулпан БУРАҠАЕВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ВИТАМИНДЫ...
## күп эсмә

■ "Sleep Health" журналында баҫылған яңы мәғлүмәт буйынса, бала һәм үҫмер саҡта иртә йоҡларға ятмау һуңынан йоҡоһоҙлоҡҡа килтереүе ихтимал. 1103 кешенән алынған яуаптарҙың һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, 6-17 йәштәге балаларҙың 90 проценты етерлек йоҡламай, һуңғараҡ уларҙа психологик тайпылыштар башлана: эмоциональ фон боҙола, уҡыуға һәләтлелек түбәнәйә, артыҡ ауырлыҡ барлыҡҡа килә, наркотиктар ҡулланыу хәүефе ҙурая. Ҡағиҙә буларaҡ, төндә йоҡламаған балалар төрлө электрон ҡоролмалар ҡуллана, ә уларҙың экраны тәбиғи булмаған яҡтылыҡ бүлеп сығара. Көн тәртибен күҙәткән, ваҡытында йоҡларға ятҡан, төндә - планшеттар, ә иртән кофеин менән артыҡ мауыҡмаған ғаиләләрҙә йоҡоһоҙлоҡ менән бәйле проблемалар осрамай.

■ Хәтерҙе, тиренең, сәстәрҙең торошон яҡшыртыу өсөн төрлө витаминдарҙы йыш ҡабул итәһегеҙме? Белгестәр билдәләүенсә, кеше витаминдарҙы аҙыҡ-түлек менән дә етерлек ала, шуға ла өҫтәмә рәүештә витаминдар эсеүҙең кәрәге лә юҡ. Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары 120 мең кешенең ауырыу тарихын өйрәнгән. Тикшереү өсөн Е витаминын алғандар. Ғалимдар әйтеүенсә, был витаминды күпләп ҡулланыу баш мейеһе ҡан тамырҙарының зарарланыуына - инсультҡа килтереүе ихтимал. Ошондай уҡ тикшеренеүҙәр Швецияла ла үткән. Ул саҡта ғалимдар А витамининың артыҡ булыуы үпкә яман шешенә, Е витаминының инсультҡа килтереүе асыҡланған.

■ Эмоциональ кисерештәр кешенең психикаһына ғына түгел, ә физик сәләмәтлегенә лә йоғонто яһай. Аныҡыраҡ әйткәндә, улар бөйөргә таш ултырыуға булышлыҡ итә. Нью-Джерси штаты (АҠШ) ғалимдары билдәләүенсә, һейҙәк ташы ауырыуы менән ауырыған сирлеләр һау бөйөрләләргә ҡарағанда көнкүреш конфликттарына, эштәге күңелһеҙлектәргә, аҡса етмәүгә өс тапҡырға йышыраҡ зарлана икән. Әйткәндәй, быға тиклем ни өсөн бөйөрҙәрҙә таш барлыҡҡа килеүен фән аңлата алмай ине. Шуға ла был асыш ауырыуҙы артабан өйрәнергә ярҙам итәсәк. Статистика буйынса, халыҡтың 10 процентының бөйөрҙәрендә таш бар. Уларҙың күптәре был турала белмәй ҙә. Ғәҙәттә, таш урынынан ҡубып, хәрәкәт итә, йәиһә бөйөрҙән сыға башлағас ҡына ауыртыу барлыҡҡа килә. Ир-егеттәрҙә был сир йышыраҡ осрай.

■ Рухи сәләмәтлек нигеҙендә ябай ғына ҡағиҙәләр ята, тип белдерә белгестәр. Уның беренсеһе булып кеше эшенә ҡыҫылмау тора. Донъяла бер төрлө фекер йөрөткән, бер төрлө булған кешеләр юҡ - Аллаһы Тәғәлә беҙҙе төрлө итеп яратҡан. Шуға ла үҙ дөрөҫлөгөндө кешегә көсләп тағырға кәрәкмәй. Ғәфү итә һәм онота белеү - күңел тыныслығына өлгәшеү өсөн эффектлы сара. Тормош шул тиклем ҡыҫҡа, ҡасандыр кемдер һеҙҙе рәнйеткән өсөн йөрәктә таш йөрөтөү уны мәғәнәһеҙерәк итәсәк. Өсөнсө кәнәш - йәмғиәттә абруй яуларға ынтылмағыҙ. Донъяла эгоистар шул тиклем күп, шәхси мәнфәғәтен алға ҡуйыусы бер ҡасан да башҡаларҙы баһаламаясаҡ. Етмәһә, бөтөн яҡтан камил кешеләр булмай, шулай булғас, ни өсөн һеҙ үҙегеҙ кеүек үк кешенең маҡтауына лайыҡһығыҙ? Көнләшеү, башҡаларҙы үҙгәртергә тырышыу ҙа рухи тыныслыҡҡа әйә булырға ҡамасаулаясаҡ.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ЯРҘАМ КҮРҺӘТӘ БЕЛӘҺЕҢМЕ?



**Ҡайһы берҙә кеше үҙе лә уйламағанда юл-транспорт ваҡиғаһы шаһиты була йәки үҙе аварияға эләгә. Статистика буйынса, 70 процент осраҡта тиҙ ярҙам күрһәтелмәүе, яңылыш күрһәтелеүе арҡаһында фажиғәгә тарыусылар һәләк була. Әгәр шунда кемдер ваҡытында дөрөҫ ярҙам күрһәтһә, үлем осраҡтары был тиклем үк булмаҫ ине.**

Зыян күреүселәрҙең бер өлөшө баш һөйәге-мейе йәрәхәте ала һәм аңын юғалта. Был осраҡта йоҡо артерияһында пульс һаҡлана, кеше тын алғанда ғырылдай, тыны сыҡҡанда ғыжылдай. Зыянланыусы телен йотмаһын өсөн, арҡа һөйәгенең муйын өлөшөн нығытып, кешене һаҡ ҡына эсенә йәки ҡабырғаһына һалырға һәм "тиҙ ярҙам" килгәнсе, тын алыу юлдарының ҡапланмауын, тын алыуҙы, йоҡо артерияһы пульсын, йөрәк тибешен тикшереп торорға кәрәк. Әгәр фажиғәгә тарыусы тын алмай йәки тын алыуы боҙолған икән, уны арҡаһына һалып, иҙеүен ысҡындырырға, муйынына йәки ҡулбашы аҫтына валик һалырға, эйәге муйын менән бер һыҙатта булғансы башын ныҡ итеп артҡа ташлатып, ауыҙ ҡыуышлығын сит предметтарҙан (протездан, ҡандан, лайланан) таҙартып, "ауыҙҙан-ауыҙға" йәки "ауыҙҙан-танауға" яһалма һулыш алдырығыҙ.

Тынды бер секундтан артыҡ өҙөргә ярамай. Артабан - пассив һулыш сығарыу. "Ауыҙҙан-танауға" һулыш алдырғанда бер ҡулды баштың түбәһенә һалып, уны артҡа ташлайҙар, икенсе ҡул менән кешенең яңағын күтәреп, ауыҙын ябалар. Тәрән итеп тын алып һәм ирендәр менән зарарланыусының танауын урап алып, уға тын өрәләр. Ярҙам күрһәтеүсе тын өргәндә реанимациялағы кешенең күкрәге күтәрелергә тейеш. Йөрәк эшләп китҡәс тә, яһалма тын алдырыуҙы кеше үҙаллы тын ала башлағанға тиклем, минутына 12-15 тапҡыр тын биреп ҡабатларға кәрәк. Артыҡ күп һауаның ашҡаҙанға инеүе реанимацияны ҡатмарлаштыра. Шуға күрә даими рәүештә ашҡаҙандың кендектән өҫкәрәк өлөшөнә баҫып, эс күбеүен бөтөрөгөҙ.

Тын алыу туҡтауы менән бергә бик йыш йөрәк эшмәкәрлегенең туҡтауы ла күҙәтелә. Шуға күрә яһалма тын алдырыу менән бер рәттән, ҡан әйләнешен дә көйләргә кәрәк.

Йөрәккә тышҡы (тура булмаған) массаж яһағанда, устарҙы арҡыры итеп күкрәктең аҫҡы өлөшөнә ҡуйыбыҙ һәм беләҙек һөйәктәре менән (бармаҡтар ҡатнашмай) бер ритмда баҫабыҙ. Йөрәк күкрәк һөйәге һәм умыртҡалыҡ араһында баҫылып, унан ҡан ҡыуыла. Туҡтап торған арала күкрәк ситлеге турылана, йөрәк тағы ла ҡан менән тула. Ололарға массажды ике ҡулдың устары менән эшләгәндә, бер йәшкә тиклемге балаларға - ике бармаҡ менән. Күкрәк ситлеге 4-6 сантиметрға тиклем эскә инергә тейеш. Балалар өсөн был күрһәткес түбәнерәк.

Реанимацияны бер кеше генә үткәргәндә, зыян күреүсенең үпкәһенә ике тапҡыр тиҙ генә һауа тултырыу күкрәк ситлеген 15 тапҡыр баҫып алыу менән сиратлаштырыла. Әгәр ҡотҡарыусылар икәү икән, был нисбәт 1:5 (бер тапҡыр һауа өрөү, 5 тапҡыр күкрәккә баҫыу). Бөтөн ғәмәлдәр ҙә дөрөҫ башҡарылһа, һөҙөмтәләр - күҙ ҡараһының ҡыҫылыуы, тиренең алһыуланыуы - бер-нисә минуттан һуң барлыҡҡа киләсәк. Әммә массажды йоҡо артерияһында пульс һиҙелгәнсе йәки "тиҙ ярҙам" килгәнсе дауам итергә кәрәк. Баҫыу һәм яһалма һулыш алдырыуҙың биш циклын эшләгәндән һуң ғына икенсе нәмәгә иғтибар бүлергә була.

Ҡайһы берәүҙәр йөрәк-үпкә реанимацияһына ышанмай, уның һөҙөмтәлелегенә шикләнеп ҡарай. Әммә был алымдар бик күп ғүмерҙәрҙе ҡотҡарып ҡалырға ярҙам итте. Иң мөһиме - үлем менән көрәшкән кеше эргәһендә аптырап ҡалмаҫҡа кәрәк.

**Гөлнара МОСТАФИНА, 21-се дауахананың баш табибы, БР травма үҙәге етәксеһе.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# НӘФСЕ БӘЛӘҺЕ

**Иртән дуҫтарым менән парк аша үтеп барғанда йәмәғәт урындарында бик йыш осраған: "Эттәрҙе муйынсаҡһыҙ йөрөтөү тыйыла!" - тигән яҙыуға тап булдыҡ.**

Ошоға бәйле дуҫтарыма былай тинем: "Нәфсебеҙ (эго) ошо эткә оҡшаш. Тәртипһеҙ эт муйынсаҡһыҙ булһа, бик күп зыян килтерә: барыһына ла өрә, теләгән ерендә хәжәтен башҡара, кемдер тәрбиәләп үҫтергән сәскәләрҙе тапай, кешеләргә ҡамасаулай, үҙенә тәғәйенләнмәгән урынға менә, кешеләрҙе ҡурҡыта, уларҙы тешләүе, зыян килтереүе мөмкин. Шуға күрә былдай иҫкәртеүҙәр эттәрҙе муйынсаҡ менән йөрөтөүҙе талап итә. Өйрәтелгән эт муйынсаҡлы булһа, ул хужаһының контролендә булып, унайһыҙлыҡ тыуҙырмаясаҡ, зыян килтермәйәсәк. Ул хужаһының бойороҡтарын тыңлап, уның менән йәнәш барасаҡ.

Нәфсе лә ошо эт тәртибенә оҡшаш. Уны ла өйрәтергә, муштраларға кәрәк, уға ла муйынсаҡ талап ителә. Был муйынсаҡ - Ислам (шәриғәт) ҡанундары, Аллаһы Тәғәләгә һөйөү һәм уны таныу, Яуап көнөнән ҡурҡыу. Һәм был муйынсаҡты нәфсе муйынына ныҡлы һәм ышаныслы итеп бәйләргә кәрәк.

Муйынсаҡһыҙ кеше Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанды боҙасаҡ, әҙәп ҡағиҙәләрен үтәмәйәсәк. Урлашасаҡ, ҡомарлы уйындар уйнаясаҡ, зина ҡыласаҡ, ҡатыны, балалары, ата-әсәһе менән насар мөнәсәбәттә буласаҡ, уларҙы кәмһетәсәк, түбәнһетәсәк, башҡа кире ғәмәлдәр ҡыласаҡ. Уның йөрәгендә асыу, ҡомһоҙлоҡ, көнләшеү, тәкәбберлек һәм башҡа бысраҡ сифаттар урын аласаҡ. Кешеләр, зыяны тейеүҙән ҡурҡып, уны урап үтәсәк.

Шәриғәт ҡанундары аша Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанды үтәү еңел, сөнки кешенең нәфсеһе ауыҙлыҡланған була. Былдай кеше изгелек ҡылырға, башҡаларға файҙалы булырға, уларға матур өлгө күрһәтергә тырыша... Ул башҡаларға зыян килтермәй, ә ярҙам итә һәм уны шуның өсөн ярататсаҡтар ҙа. Ул кеше магазинға, заводҡа, аэропортҡа, дауаханаға һ.б. урынға барырға теләй икән, тәүҙә ул нәфсеһенең муйынына Аллаһ ҡаршыһында ҡурҡыу һәм уға һөйөү муйынсағы кейҙерәсәк, һуңынан ғына үҙ бурысын үтәйәсәк.

Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әйткән: "Теләгән ауыҙлыҡлап баҡый тормошто ҡуҙаллаған ғәмәлдәр ҡылыусы - аҡыллы. Аллаһы Тәғәләгә ышанып та нәфсеһенен теләгенә буйһондороусы - алйот".

**Шәйех Йонос ПАТЕЛЬ. (Интернеттан).**

# САБЫРЛЫҠ

**Хәҙистәрҙә әйтелә: Өхөд һуғышында бәйғәмбәребеҙ үҙенең ике туған ағаһы Хәмзәнең ҡот осҡос үлеменә шаһит була. Мөшриктәр уны үлтереп китеү менән генә сикләнмәй, ә күкрәген һәм ҡорһағын ярып, йөрәк-бауырҙарын өҙөп ала, моронон һәм ҡолаҡтарын ҡырҡып ташлай. Был вәхшилектән Бәйғәмбәребеҙ, ғәләйһис-сәләм, бөтөнләй тетрәнеп ҡала:**

"Эй, минең маҡтаулыларҙан да маҡтаулыраҡ булған Раббым! Күҙ алдыма килеп баҫҡан был хәлдә үҙемдә мин тик Һинә генә тапшырам. Һинә һәм Һинең ярҙамыңа ғына өмөт бағлайым!" - тип доға ҡылыу менән генә сикләнә.

Тап ошо мәлдә уға: "...Бер кешенән үс алырға теләгән саҡтарҙа ла насарлыҡты ул кеше үҙе эшләгән тиклем генә эшләгеҙ, бер һуҡҡанға ике тапҡыр һуҡмағыҙ. Әгәр ҙә инде сабырлыҡ күрһәтеп, үс алмай ҡалһағыҙ, был бигерәк тә яҡшы", - тигән аяттар инә. Сабыр булырға өйрәтә.

- Эй, Раббым! Мин сабыр итермен! Мин сабыр булырмын! - ти бәйғәмбәр. Бәйғәмбәребеҙҙең был тиклем дә киң күңелле һәм сабыр булыуын күреп торған ғәриптәр күпләп-күпләп Ислам динен ҡабул итә башлай.

"Сабыр ит! - тип өйрәтә Ҡөрьән. - Һинең сабыр булыуың - Аллаһтан. Уларҙың иманға килмәгәне, мәкер һәм хәйлә ҡороп ҡына йөрөүе өсөн көйөнмә!"

"Аллаһ Ул - тәҡүә кешеләр, игелек һәм яҡшы эштәр эшләп йөрөгәндәр менән бергә".

**"Ән-Нәхл", "Бал ҡорттары" сүрәһе, 126-128-се аяттар**

✓ *Аҡыл магнетизмы былай ти: нимә тураһында уйлайһығыҙ, шуны килтерәһегеҙ. Бында быға тиклем әйтелгәнде лә иҫкә төшөрөргә кәрәк: үҙебеҙ тураһында нимә уйлайбыҙ, шундай түгелбеҙ, ә нимә уйлайбыҙ, шуны тәшкил итәбеҙ.*



*МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ*

**Бөтә донъяла, төрлө ил ҡәүемдәрендә ижтимағи тормошҡа, көнитмешкә, шәхси сифаттарға, әхлаҡ-әҙәпкә бәйле меңәр йылдар буйына ҡулланылған, йола-ҡағиҙәгә әйләнгән эш-ҡылыҡ тәртиптәре, ғөрөф-ғәҙәттәр, аманаттар бар. Улар оҙайлы ваҡыт ҡат-ҡат һыналып, күп ҡабатланып, ырыу, йәмғиәт ағзаларының ғәҙәтенә кергән. Йәшәйешкә ҡағылған, кешеләрҙең холҡон, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен көйләүгә ҡоролған йола-ҡағиҙәләр араһында тыйыу, әйтәйек, берәй эш-ҡылыҡҡа рөхсәт бирмәү, уны туҡтатыу, ғәмәлгә ашырмау, бәғзе теләккә, хис-тойғоға, кисереш-ярһыуға, тотанаҡһыҙлыҡҡа, тәртипһеҙлеккә ирек ҡуймау кеүек ғәҙәттәр ҙә бар.**

# ТЫЙЫЛҒАНДАН - ТЫЙЫЛ, ТИГӘН...



## Тәғәмгә табу

Боронғо дәүерҙәрҙә үк бәғзе тәғәмгә, үҫемлектәргә, аш-һыуға табу һалынған. Күп төрлө ҡыр үҫемлектәренең, емеш-еләктең, ҡайһы бер бәшмәктәрҙең ныҡ ағыулы булыуын ҡанбабалар тәүтормош мәлендә үк танып белгән. Әйтәйек, күкшел һарғылт сәскәле, ваҡ ҡына орлоҡло үләнде, йәғни тилебәрәнде ашау ҡәтғи тыйылған, сөнки ул тилертә. Ваҡ япраҡлы ҡыуаҡта ҡыҙарып бешкән, ымһындырып торған емеште, йәғни бүре еләген тәғәм итеү ярамай.

Әҙәмгә хайуандар өҫтөнән хакимлыҡ итеү хоҡуғы бирелә, уларҙың фәҡәт ҡанһыҙландырылған итен генә ашарға рөхсәт ителә. Мәгәр үлем язаһы менән кешене ҡорбан итеү, үлтереү тыйыла: "Кем кеше ҡанын ҡоя, унның үҙенең ҡаны ҡойоласаҡ, сөнки кеше Аллаһы Тәғәлә өлгөһө һәм рәүеше буйынса бар ҡылынған". Әҙәм балаларын тура юлға өндәгән Ҡөрьәндә әйтелеүенсә, Аллаһ биргән ризыҡты ашағыҙ, эсегеҙ, ләкин һаҡ булығыҙ, аҙғынлыҡ, боҙоҡлоҡ таратмағыҙ. Һеҙгә шулар тыйыла: үләкһә, ҡан, сусҡа ите, Алланың исеме түгел, башҡаның исеме әйтеп салынған, быуып йәки бәреп үлтерелгән, бейектән йығылып төшөп йәки мал һөҙөп үлтергән хайуан ите, йола буйынса боғаҙланғандан башҡа - емтек ашаусы йыртҡыс ите һәм шулай уҡ һын алдында салынған ҡорбан ите, фал уҡтары менән бүлгеләнгәне. Былар - харам. Ғөмүмән, рөхсәт ителгән аҙыҡ менән ризыҡланғанда ла сама самаһын үтмәҫкә тейеш, күп ашау - яҙыҡ, саманан тыш күп ашау - гонаһ. Илаһ ҡушҡанса, эй, инсандар, ер йөҙөндәге ризыҡтарҙың хәләл һәм саф, таҙаларын ғына ашағыҙ.

Шумер мифологияһында ер аҫты донъяһы тәғәменә табу һалына. Эвен, эвенк мифтарында ҡатындарға айыу түшкәһенең ҡайһы бер өлөштәрен тәғәм ейеү тыйыла. Башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосында сағылғанса, Йәнбирҙе менән Йәнбикә "бала үҫеп еткәнсе, үҙе йәнлек тотҡансы, баш-йөрәкте ашауҙан, һыуһынға ҡан эсеүҙән балаларын тыйғандар, һис ярамай, тигәндәр".

Балалары иҫ белеп, Шүлгәнгә ун ике, Уралға ун тулғас, береһе, арыҫлан менәм, икенсеһе, шоңҡар сөйәм, тип маҙаһына тейгәс, Йәнбирҙе улдарына былай тигән:

*Икегеҙ ҙә - баламһыҙ,*
*Күҙемдәге ҡарамһыҙ,*
*Тешәр сағығыҙ уҙмаған,*
*Быуынығыҙ ҡатмаған,*
*Ҡулға суҡмар тоторға,*
*Ҡошҡа шоңҡар сөйөргә,*
*Әле арыҫлан менергә*
*Миҙгелегеҙ етмәгән.*
*Мин ни бирһәм - ашағыҙ,*
*Мин ҡушҡанды эшләгеҙ.*

Йәнбирҙе улдарын тыйыу менән генә сикләнмәй, ә утыҡҡансы, йәғни үҫеп тамам көскә ултырғансы, йола буйынса нимә мөмкин икәнен өйрәтә: "Күнегергә һыбайға, ана, болан менегеҙ, сыйырсыҡтың тыуына яғылбайҙы сөйөгөҙ, һыуһаһағыҙ уйында, ана, аҡ һыу эсегеҙ, ҡапырсаҡҡа тултырған ҡандан ауыҙ тартығыҙ".

Бында беҙ боронғо тәрбиә сараларынан тыйыу, һәр теләккә ирек бирмәү, тотанаҡһыҙ ҡылыҡҡа юл ҡуймау йолаһын күрәбеҙ. Ваҡыты, мәле етмәйенсә, атай-инәй тарафынан йәш үҫмерҙәргә көҫәгән нәмә рөхсәт ителмәгән. Тыйыуға ҡарамай, Шүлгән "ҡапырсаҡтан аҙ-аҙлап ҡанды һемереп эскән", ата һүҙен тотмаған - оролған да бәрелгән тигәндәй, кешеләрҙе ишһенмәҫ, яҡшылыҡты тиңһенмәҫ ыулы йөрәкле затҡа әйләнгән. Ата йөҙөн - ят, инә һөтөн ыу иткән, үҙе лә игелек күрмәгән, ҡәрҙәштәренә лә күрһәтмәгән.

Фәһем шунда: нимә ярамай, күңел шуны көҫәһә лә, тыйылған емеш тәмле тойолһа ла, инә хәтере, ата хаҡы өсөн үҙенде лә, нәҫел-нәсәбеңде лә хур ҡылмаҫ, бәхетһеҙ итмәҫ өсөн тыйылғанға ыҡламау зарур. Ғөмүмән, һәр кемгә үҙен тота белеү, тыйнаҡ булыу хәйерле вә сауаплы. "Урал батыр" эпосында һунарға, тәғәм эйеүгә бәйле - башҡорт халҡы өсөн мәңгелек тыйыу тасуирлана:

*Урал тоҡомо ҡоштар, тип,*
*Бер туғандай күрешеп,*
*Ау аулауҙан тыйышып,*
*Аҡҡош тотоп еймәҫкә,*
*Тип һәр кемгә әйтешеп,*
*Аҡҡош үрсеп киткән, ти.*
*Аҡҡош ите кешегә*
*Шуға харам икән, ти.*

Уйым-уйым күлдәрҙәге дейеүҙәрҙең ҡоһоро теймәһен өсөн, барыһы менән хушлашып, Урал халҡына, улдарына шуны әйтә:

*Күлдең һыуын эсмәгеҙ,*
*Эсеп әрәм булмағыҙ,*
*Хараплыҡҡа төшмәгеҙ.*

Башҡорттарҙың ғәҙәти аш-һыуы: бишбармаҡ, ҡуллама, ҡаҙылыҡ, өйрә, ҡорот, ҡатыҡ, эремсек, әжекәй, талҡан, ҡымыҙ, буҙа, айран, бал балы, бал, балтырған, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, йыуа, еләк-емеш... Ғәмәлдә башҡорт аштары бер-береһенә ярашлы, сәләмәтлек өсөн шифалы булған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер беҙ һаулыҡты уйламай, үҙ-ара ҡушыла, берләшә алмаған ризыҡ менән туҡланабыҙ.

Бер ултырғанда ит, йомортҡа, сыр, сәтләүек кеүек аҡһымлы аҙыҡтарҙы икмәк, бәрәңге һәм татлы емештәр менән тәғәм итергә ярамай. Икмәк, бәрәңге, борсаҡ, банан һәм башҡа углеводлы аҙыҡты - лимон, әфлисун, ананас, помидор, сейә кеүек емештәр; һөт, ҡаймаҡ, һыйыр, үҫемлек майҙарын ит, йомортҡа, сыр, сәтләүек менән ашарға ярамай. Бер туҡланғанда һөт, йомортҡа, сыр, балыҡты, икенсе мәртәбә икмәк, бутҡа, туҡмасты тәғәм итергә мөмкин. Ҡайнар аш, сәй, йәиһә һалҡын һурпа, эсемлек ҡулланыу, ашағанда һыу эсеү тыйыла. Башҡорт бисәләре сәй эсә - ут эсә, тигән әйтем ярамағанға ишаралыр, моғайын. Сәләмәт булайым тиһәң, дөрөҫ туҡланыу хәйерле. Был хаҡта хәҙер мәғлүмәт, белешмә етерлек.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 24-се һанда).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Аҡыл магнетизмы

Аҡыл магнетизмы былай ти: нимә тураһында нығышмал уйлайһығыҙ, шуны тартып килтерәһегеҙ. Бында быға тиклем әйтелгәнде лә иҫкә төшөрөргә кәрәк: үҙебеҙ тураһында нимә уйлайбыҙ, шундай түгелбеҙ, ә нимә уйлайбыҙ, шуны тәшкил итәбеҙ. Аҡыл магнетизмы тәбиғи магнетизм ҡанунына тап килә. Әгәр тимер магнитты алһаҡ, ул үҙенә барлыҡ тимер әйберҙәрҙе тартасаҡ. Шул уҡ ваҡытта тимерҙе генә, башҡа предметтарҙы түгел. Йәғни оҡшаш оҡшашты тарта. Ни өсөн магнит үҙенә тарта? Сөнки унның молекулалары бер йүнәлештә хәрәкәт итә. Уларҙың тартыу көсө бергә туплана. Ябай тимер молекулалары бер-береһен ситкә этәрә. Был феноменда маҡсат берлегенең мөһимлеге сағыла.

Ваҡытығыҙҙың күп өлөшөн нимә турһында уйлап үткәрәһегеҙ: сәләмәтлек йәки ауырыу, уңыш йәки уңышһыҙлыҡ, ярлылыҡ йәки байлыҡ, мөхәббәт йәки күрә алмаусанлыҡ - улар һеҙгә мотлаҡ тартыласаҡ. Мейе күҙәнәктәре магнетик уй тулҡындарын ебәрә, улар сикһеҙлеккә оҙатыла. Һәр күҙәнәк - ул башҡалар менән берләшеп һеҙҙең теләктәрегеҙҙе - ыңғай булһынмы ул, киреме - тартып килтереүсе теләк күҙәнәге. Иң мөһиме - нимә теләгәнегеҙҙе аныҡ белеү. Кире осраҡта һеҙ тәртипһеҙлек һәм хаос ҡына тартасаҡһығыҙ. "Ауырырға теләмәйем, әммә мин ауырыйым", - тип әйтергә мөмкинһегеҙ. Әммә күп ваҡытығыҙҙа нимә тураһында уйлайһығыҙ? Күберәк ваҡытығыҙҙы нимәгә бүләһегеҙ? Ауырыуға!

Бер ваҡыт билдәле уҡытыусы һәм метафизик Эрнест Холмсҡа унның ауыр сир менән яфаланыусы дуҫы мөрәжәғәт итә. Уға Эрнест: "Һинең ауырыуың беҙҙән башҡа ла бына тигән йәшәй. Әйҙә, һинең сәләмәтлегеңде нығытып алайыҡ", - ти. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, оҡшаш оҡшашты тарта. Иғтибар күп бүлгән нәмәне үҙегеҙгә тартып килтерәһегеҙ!

Нимә теләгәндәрен көсһөҙ генә итеп күҙаллаусылар теләктәренә тап килмәгән нәмә ала. Тәү ҡарашҡа, барыһы ла уңыш, дуҫлыҡ, мөхәббәт, бәхет, именлек һәм ышаныс тураһында хыяллана, әммә теләмәгән нәмәләренә иғтибарҙы күберәк бүлеп, теләгәндәрен үҙҙәренән этәрә. Бары тик ун меңдән бер кеше генә быны аңлай.

Әгәр кешеләрҙән иң мөһим теләктәрен һанап сығырға ҡушһаң, исемлектең бер-береһенә бер тамсы һыу кеүек оҡшашлығы хайран ҡалдырыр. Пункттарҙы бер уртаҡ һыҙат берләштерә: улар барыһы ла ыңғай. Эш шунда: беҙ үҙебеҙгә һәм башҡаларға бары тик ыңғай нәмәләр тураһында ғына асылабыҙ. Бер кем дә бер ваҡытта ла уңышһыҙлыҡ кисергеһе килеүе, ауырырға, ярлы, бәхетһеҙ йәки үҙ-үҙенә ышанысһыҙ булырға теләүе тураһында раҫламаясаҡ. Әммә шундай ҡыҙыҡ факт: магниттың бер ҡыры тартыу көсөнә, икенсеһе этәреү көсөнә эйә булған кеүек, һәр ыңғай теләккә бер кире теләк тура килә, ә беҙ был турала белмәйбеҙ йәки белергә теләмәйбеҙ, йәки был хаҡта уйлап та ҡарамайбыҙ. Бына ни өсөн үҙеңдең теләктәреңде аныҡ аңларға кәрәк, сөнки Аҡыл магнетизмы ҡануны беҙгә ысын теләктәребеҙҙе тартып килтерә. Ул көйһөҙлөк, еңмешлек йәки еңел-елпе фантазияларҙы тартмай.

Күптәр уңышлы булырға теләүен раҫлай. Ғәмәлдә улай түгел. Улар уңышлы булыу өсөн нимәлер эшләргә теләмәй. Мәҫәлән, кешене унның аҡсаһы булған өсөн генә уңышлы тип әйтеп булмай. Күптәребеҙ уңыш һөҙөмтәһе тураһында хыяллана, әммә ул тыуҙырған яуаплылыҡ тураһында уйламай.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

## РУХ

3. Суфыйсылыҡ ғилемендә нәфсе рухты биҙәрлек кимәлдә камил булырға тейеш, тип әйтелә. Шул уҡ ваҡытта рух күркәм итеп биҙәлмәйенсә тороп, нәфсе камил булмаясаҡ, тип тә әйтелә. Бары тик бер үк ваҡытта нәфсене камиллаштырғанда, йөрәкте таҙартҡанда һәм рухты биҙәгәндә генә кеше маҡсатына тиҙерәк ирешәлер. Шул уҡ ваҡытта нәфсеһенә тамам ҡол булғандарҙың юлына Иблес үҙҙәренә оҡшаған уҡытыусы, өйрәтеүсе сығарып, икеләтә ҡол яһай. Ундайҙар "остаз"дарының теләһә ниндәй фарманын тормошҡа ашырырға әҙер кимәлгә етә һәм ул ғәмәлде Аллаһы Тәғәлә ҡушыуы тип иҫәпләй.

4. Рух тәриҡәт юлы күкрәген имеүсе һәм матди донъянан азат бойондороҡһоҙлоҡ һөтөн эсеүсе сабыйға оҡшаған. Рух - ул кешенең матди донъяға бәйле сифаттарынан азатлығы. Ундай кеше Аллаһы Тәғәләгә яҡынлай. "Ҡайҙа ғына ҡараһам да, Аллаһы Тәғәләне күрәм", тигән бер суфый.

**(Дауамы бар).**



## 20 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.25 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.50 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25, 03.55 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 23-я и 24-я серии. Драматический сериал (12+)
23.30 "Познер" (16+).
00.30 Ночные новости.
00.45 "Наверное, Боги сошли с ума". Комедия (12+).
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор". Продолжение.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35, 14 :30, 17:30 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вкус граната". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Душа шпиона". Детектив (16+).
23.50 Футбол. Чемпионат Европы-2016. Россия - Уэльс. Прямая трансляция из Франции.
02.00 "Неотложка". Драматический сериал (12+).
03.00 "Догадайся. Спаси. Юрий Визбор". Док. фильм (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Учим башкирский язык" (0+).**
**10.15 "Городок АЮЯ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 17.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Следопыт" (12+).**
**17.15 "Личность" (12+).**
**18.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.00 "Интервью".**
**19.15 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Жизнь, которой не было". Сериал (16+).**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**23.00 "Морозов". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 21 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.00 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+).
23.15 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге" (16+).
23.50 Чемпионат Европы по футболу 2016. Сборная Хорватии - сборная Испании. Прямой эфир из Франции.
02.00, 03.05 "Наверное, Боги сошли с ума-2". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35, 14 :30, 17:30 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вкус граната". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.50 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "Не пара". "Найди того, не знаю кого". Мелодраматический сериал (16+).
20.50 Футбол. Чемпионат Европы-2016. Украина - Польша. Прямая трансляция из Франции.
22.55 "Вести.doc" (16+).
00.55 "Секретно. Сталину. Главная загадка Великой Отечественной войны", "Города воинской славы. Малгобек", "Города воинской славы. Полярный" (12+).
03.00 "Неотложка". Драматический сериал (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Знаменосец Победы" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Фанташ" (0+).**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.45 "Красная кнопка" (16+).**
**16.45 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Орнамент" (0+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.30 "Жизнь, которой не было". Сериал (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Заговор маршала". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 22 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 25-я и 26-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Ленинград. Номер 7". Док. фильм (16+).
01.25, 03.05 "Двое на дороге". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.45 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35, 14 :30, 17:30 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вкус граната". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Не пара". "Исчезающий Рафаэль", "Бермудский треугольник". Часть 1 (16+).
23.55 "Специальный корреспондент" (16+).
01.55 "Первые четыре часа", "Города воинской славы. Кронштадт", "Города воинской славы. Белгород" (12+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Люди 1941 года" (12+).**
**По окончании: Новости.**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 17.45, 19.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.15 "История в табличках" (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.15 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Жизнь, которой не было". Сериал (16+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Сейчас самое время". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 23 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.15 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". Драматический сериал (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "На ночь глядя" (16+).
01.20, 03.05 "Страх высоты". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35, 14 :30, 17:30 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вкус граната". Сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Не пара". "Бермудский треугольник". Часть 2-я, "Целитель". Часть 1-я (16+).
22.55 "Поединок" (21+).
00.55 "Брестская крепость", "Города воинской славы. Владикавказ", "Города воинской славы. Туапсе" (12+).
02.55 Торжественное открытие 38-го Московского международного кинофестиваля.
04.20 "Комната смеха" (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 17.15 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Перекличка" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Будем жить!" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Борсаҡ" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.45 "История признания" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Семь чудес Башкортостана" (12+).**
**18.00, 20.15 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Жизнь, которой не было". Сериал (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Флэш.ка". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Гайфи бабай, женись давай!" (12+).**

## 24 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 04.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.35 Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге" (16+).
00.30 "Достучаться до небес". Боевик (16+).
02.10 "Калейдоскоп любви". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вкус граната". Сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Не пара". "Целитель". Часть 2-я, "Старый знакомый". Сериал (16+).
23.55 "Красотки". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
04.00 "Неотложка". Сериал (12+).
04.55 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Борсаҡ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Жизнь после смерти" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 02.00 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Медаль" (12+).**
**13.00 "Башҡорт йыры" представляет…" (12+).**
**13.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**15.45 "Корабли застывших морей" (12+).**
**16.45 "Время башкирское" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**"Вопрос + Ответ = Портрет" (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Полезные новости" (0+).**
**20.30 "ДОСААФ: Испытано на себе" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Мы были солдатами". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 Ф.Буляков. "Коварная люб**овь" **(12+).**

## 25 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.20, 06.10 "Гарфилд".
06.00 Новости.
06.50 "Сказ про то, как царь Петр арапа женил". Худ. фильм.
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Валерий Золотухин. "Я Вас любил..." (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "Теория заговора" (16+).
14.15 "На 10 лет моложе" (16+).
15.15 Концерт Ирины Аллегровой в "Олимпийском" (16+).
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
17.50 Чемпионат Европы по футболу-2016. 1/8 финала.
20.00 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
21.00 "Время".
21.50 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.30 "Что? Где? Когда?"
23.50 Чемпионат Европы по футболу-2016. 1/8 финала. Прямой эфир из Франции.
02.00 "С 5 до 7". Романтическая комедия (16+).
03.50 "Полет Феникса". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.40 "Испытательный срок". Худ. фильм (12+).
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Лев Лещенко" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Гувернантка". Худ. фильм (16+).
13.20 "Деревенщина". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.25 "Вести-Башкортостан".
14.35 "Деревенщина". Продолжение сериала (12+).
17.50 "Ты будешь моей". Мелодрама (12+).
19.50 "Вести в субботу".
20.50 Футбол. Чемпионат Европы-2016. 1/8 финала. Прямая трансляция из Франции.
22.55 На перекрестке радости и горя". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
02.35 "Марш Турецкого-2". Детективный сериал (12+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ
**07.30, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Волшебное серебро" (12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Надежда". Худ. фильм (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 "Праздник курая-2016". Гала-концерт (0+).**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (6+).**
**20.45 "Воспоминания о будущем" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Киберспорт" (16+).**
**02.15 "Родительский контроль" (12+).**
**02.30 М.Гафури. "Черноликие" (12+).**

## 26 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Предварительное расследование". Худ. фильм.
08.05 "Служу Отчизне!"
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Открытие Китая".
12.50 "Гости по воскресеньям".
13.45 "Ледниковый период-4: Континентальный дрейф". Полнометражный анимационный фильм.
15.35 "Что? Где? Когда?"
16.45 "Следуй за мной".
17.05 "Бенефис Геннадия Хазанова" (16+).
19.20 "Воскресное "Время".
20.50 Чемпионат Европы по футболу-2016. 1/8 финала. Прямой эфир из Франции.
23.00 "МаксимМаксим" (16+).
00.10 "Четыре свадьбы и одни похороны". Комедия (12+).
02.25 "Кабинетный гарнитур". Худ. фильм.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.10 "Грустная дама червей". Худ. фильм (16+).
07.00 "Мульт утро".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 04.05 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.20 "Под прицелом любви". Худ. фильм (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Под прицелом любви". Продолжение фильма (16+).
15.50 "Заезжий молодец". Мелодрама (12+).
17.50 Футбол. Чемпионат Европы-2016. 1/8 финала. Прямая трансляция из Франции.
20.00 "Вести недели".
21.50 "Родная кровиночка". Худ. фильм (12+).
23.50 Футбол. Чемпионат Европы-2016. 1/8 финала. Прямая трансляция из Франции.
01.50 "Отдаленные последствия". Худ. фильм (12+).
04.30 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Алиса знает, что делать" (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай" (12+).**
**09.30 "Семь чудес Башкортостана" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Ученый, певец, домрист". Риф Сулейманов (12+).**
**15.30 "В вихре танца" (12+).**
**17.00 "Дорога к храму" (0+).**
**17.30 "Историческая среда" (12+).**
**18.00 "Киногерой. Век русской мистификации" (12+).**
**18.45 "История признания" (12+).**
**19.00 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.30 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**19.45 1/4 Межрегиональной лиги ВКН. 2-я часть (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Красная кнопка" (16+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Жизнь за гранью". Худ. фильм (16+).**
**01.15 "Свидание с джазом" (12+).**

ӘҘӘБИӘТ, МӘҘӘНИӘТ, СӘНҒӘТ

# МӘРТӘБӘЛЕ БӘЙГЕ

**Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премиялары буйынса комиссия 2016 йылдың 15 июненән 15 июленә тиклем документтар ҡабул итә.**

Йәмәғәтселектә танылыу алған һәм Башҡортостандың художество мәҙәниәтен байытҡан иң талантлы, яңылығы һәм үҙенсәлеге менән айырылып торған әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура әҫәрҙәре өсөн ике йылға бер тапҡыр өс премия бирелә. Конкурсҡа эштәрҙе ҡабул итеү ваҡыты үткәнгә тиклем кәмендә ярты йыл алдан халыҡҡа сығарылған: әҙәбиәт өлкәһендә - матбуғатта донъя күргән; музыка, театр, һынлы, хореографик, эстрада һәм цирк сәнғәте, дизайн, кино һәм телевидение өлкәһендә - йәмәғәтселектең киң ҡатнашлығында башҡарылған; архитектура өлкәһендә файҙаланыуға тапшырылған әҫәрҙәр ҡатнаша ала. Дәүәсәләр коллективы биш кешенән артмаҫҡа тейеш. Министрлыҡтар, ведомстволар, предприятиелар, учреждениелар һәм ойошмалар, йәмәғәт берекмәләре, уҡыу йорттары, гәзит һәм журнал редакциялары әҫәрҙәрҙе һәм эштәрҙе премияға тәҡдим итә ала. Материалдар 15 июлгә тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450101, Өфө ҡалаһы, Тукай урамы, 46, Башҡортостан Башлығы Хакимиәте, 315-се, 419-сы бүлмәләр. Белешмәләр өсөн телефон: 280-80-93, 280-80-75.

# ҠУРАЙСЫЛАР БАҺАЛАНА

**Башҡортостанда Йомабай Иҫәнбаевтың тыуыуына 125 йыл тулыуға арналған республика конкурсы уҙғарыла. Сара 23-25 июндә Хәйбулла районының Аҡъяр ауылында ойошторола.**

Конкурсты ойоштороусылар - Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Хәйбулла районы хакимиәте, республика Ҡурайсылар союзы. Бәйге ҡурайҙа уйнау традицияларын һаҡлау, тергеҙеү һәм үҫтереү, һәләтле башҡарыусыларҙы асыҡлау, йәштәрҙе башҡорт инструменталь фольклорына йәлеп итеү, ҡурайҙа уйнау сәнғәтен пропагандалау һәм атаҡлы ҡурайсының тыуыуына 125 йыл тулыу уңайынан уҙғарыла. Конкурсҡа үҙешмәкәр һәм профессиональ ҡурайсылар, ансамблдәр ҡатнаша. Бәйге өс йәш категорияһында (12 йәшкә тиклем, 12-16 йәшлектәр, 16 йәштән өлкәндәр) ике турҙа үтә. Һәр ҡатнашыусы конкурс тураһында положениела бирелгән исемлек буйынса 100 башҡорт йырын һәм уларҙың легендаһын белергә тейеш. Сара барышында конкурс лауреаттары, халыҡ йырсылары, бейеүселәр, сәсәндәр һәм быйылғы бәйге еңеүселәре ҡатнашлығында концерт була.

# БЕЙЕҮ ТУРАҺЫНДА КИНО

**Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле "Бейеүҙең йәме" документаль кино проекты серияларының береһендә төп герой булды.**

Май айында Санкт-Петербургтың "Кинооко" студияһы Өфө районындағы Зәңгәркүл буйында ҙур фильм төшөрҙө. Тамашасылар унда ансамблдең алтын фондына ингән бейеүҙәрҙе - "Гөлнәзирә"не (ҡуйыусыһы - Фәйзи Ғәскәров), "Бөрйән ҡыҙҙары"н (Хашим Мостаев), "Еҙ үксә"не (Риф Ғәбитов) тамаша ҡыласаҡ. Фильм авторҙары Учалы районына барып, һыбай оҫта йөрөүҙе, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен, кейемдәрен төшөргән.

Режиссер һәм продюсер Василий Щербенконың "Бейеүҙең йәме" кино проекты бейеү мәҙәниәтенә һәм милли кейем традицияларына арналған. Ижади төркөм Үзбәкстанда, Әрмәнстанда һәм Рәсәй төбәктәрендә: Ингушетияла, Башҡортостанда, шулай уҡ илдең үҙәк өлөшөндә булған. "Милли бейеү һәм костюмдың матурлығы аша халыҡтың күңеленә үтеп инәбеҙ", - тип һөйләй фильм авторҙары. Кинотаҫма геройҙары - ингуштар, башҡорттар, әрмәндәр, үзбәктәр һәм рустар.

"Рәсәй киноһы йылында ғәскәровсылар яңы проекттарҙа ҡатнашып, тамашасыларҙы ҡыуандырыуын дауам итә. "Бейеүҙең йәме" фильмын интернетта ҡарарға мөмкин буласаҡ", - тип хәбәр иттеләр ансамблдең матбуғат хеҙмәтендә.

# БАЛАЛАР МӘСКӘҮҘӘ БЕЙЕНЕ

**Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбленең балалар студияһы - Мәскәүҙә "Беҙ бергә - Рәсәй" Бөтә Рәсәй балалар фестивалендә иң яҡшыларҙың береһе тип танылды.**



Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Альбина Нуриманова етәкселегендәге бейеү коллективы илдең иң яҡшы 100 балалар фольклор коллективы, халыҡ йыры, музыка һәм бейеү ансамблдәре араһында икенселә урын яулаған. Йәш ғәскәровсылар абруйлы жюри ағзаларына "Бөркөттәр иле" һәм "Башҡорт сувениры" бейеүҙәрен тәҡдим итте. Ҡуйыусыһы - Альбина Нуриманова. Беренсе урында - Ҡырым коллективы, өсөнсөлә - Ҡалмыҡстан вәкилдәре. Һайлап алыу турҙары Людмила Рюмина етәкселегендә Мәскәү мәҙәниәт фольклор үҙәге сәхнәһендә үтте. Гала-концерт Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһенең Йәшел театрында булды. Унда иң яҡшылар иҫәбендә Фәйзи Ғәскәров исемендәге ансамблдең балалар студияһы сығыш яһаны. Уларҙан тыш бында Адыгей, Бүрәт, Ҡалмыҡстан, Карелия, Марий Ил, Төньяҡ Осетия - Алания, Тыва, Удмуртия, Сыуашстан республикаларынан, шулай уҡ Камчатка, Красноярск һәм Ставрополь крайҙарынан, Үҙәк Рәсәйҙең төрлө өлкәләренән, Севастополдән һәм Мәскәүҙән йәш һәләттәр үҙҙәренең сәнғәтен күрһәтте.

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# ӨЙӨҢ ТАҘА БУЛҺЫН

**Хужабикәләргә бер нисә кәңәш рәүешендә, ҡайһы бер йорт йыһаздарын, көнкүреш әйберҙәрен ҡасан, ниндәй ваҡыт арауығы менән йыуып, таҙартып торорға кәрәк икәнлеген хәтерҙәренә төшөргө килә.**

Түшәк япмаһын аҙна һайын алыштырып торорға кәңәш ителә. Ни өсөн тигәндә, йоҡлаған саҡта тиреләге кер, йәғни, бәләкәй генә тире киҫәктәре япмаға йоға ла, артабан тир һәм саң менән буталып, алама еҫ барлыҡҡа килтерә. Юрғанды иһә, ярты йыл һайын йыуып алыу зарур. Көн һайын мунса төшөргә яраткан кешеләргә таҫтамалды ике-өс йыуынған һайын йыуып тороу ҡамасауламаҫ. Еүеш таҫтамал - бактериялар өсөн "ожмах" икәнлеген онотторға ярамай.

Ҡала әбрәкәһен, унитазды аҙнаһына бер тапҡыр яҡшылап щетка менән йыуып алырға кәңәш итә белгестәр. Эште еңеләйтеү өсөн ярты стакан аш һеркәһе менән сирек стакан белизна ҡатнашмаһын бысраҡ урындарға һирпеп, ярты сәғәттән унитаз таҙартҡыс щетка менән ышҡып, сайып төшөрөргә генә ҡала.

Аш-һыу бүлмәһендәге өҫтәл һөрткән сепрәкте лә, тиҙ бысраныуы арҡаһында, аҙнаға бер йыуыу фарыз. Тағы, ванна бүлмәһендәге плиткаларҙы аҙнаһына бер тапҡыр йыуып, йыуыныу бүлмәгеҙҙе бөшмәктән азат итә алаһығыҙ. Әйткәндәй, бында ла аш һеркәһе менән сода ҡатнашмаһы килешер.

Ваҡыты-ваҡыты менән балаҫты йыуып алыу тураһында ла онотторға ярамай. Әйткәндәй, аш бүлмәһендәге улаҡты (слив) аҙна һайын йыуып торорға, ә торбаларҙы айына бер тапҡыр яҡшылап таҙартып алырға кәңәш ителәр.

Духовка мейесен һәр файҙаланған һайын еүеш сепрәк менән бер мәртәбә һөртөргә, ә ярты йылға бер тапҡыр ныҡлап йыуып алырға кәрәк. Был эштә лә аш һеркәһе менән сода ҡатнашмаһы ҡулай.

Һыуытҡысты иретеп, йыуып алыу ҙур сабырлыҡ талап итә торған эш, әлбиттә. Шулай ҙа, бысранып, еҫләнеп китмәһен, тиһәгеҙ, "аҡ һандығығыҙҙы" өс ай һайын йыуып алығыҙ.

Тимер һауыт-һабаны өләсәйҙәр аммиак менән һыу ҡатнашмаһы ярҙамында ялтыратҡан. Ныҡ шәп һөҙөмтә бирә, тиҙәр. Автоматик кер йыуыу машинаһының тышын һабынлы һыуҙа еүешләтелгән губка менән һөртөү килешһә, эсен аш һеркәһе ярҙамында сафландырыу ярап ҡала. Машинаның иң юғары температуралы һәм керҙе иң оҙаҡ әйләнтә торған режимын ҡуйып, кәрәкле "кеҫә"гә 2 сынаяҡ аш һеркәһе тондороп, ҡабыҙып ебәрәһегеҙ. Ләкин бер-ике минуттан һуң тимер атыҡҙы бер сәғәткә туҡтатып, "ебетеп" алырға тура килер. Бер сәғәт үткәс, кер йыуыу машинаһын йыуҙырыуҙы дауам иттерергә лә була.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1437 һижри йыл.

| Июнь (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ахшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (15) дүшәмбе | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 21 (16) шишәмбе | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 22 (17) шаршамбы | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 23 (18) кесе йома | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 24 (19) йома | 2:42 | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 20:55 | 23:25 |
| 25 (20) шәмбе | 2:42 | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 26 (21) йәкшәмбе | 2:43 | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

КИҪӘТӘБЕҘ!

## Тире ауырыуҙары

Йәйге осорҙа ҡорсанғы йә бөшмәк ауырыуы йоҡтороуы бик еңел. Пляж, бассейн буйында ялан аяҡ йөрөгән саҡта микоз (бөшмәк) йоҡтороу ҡурҡынысы янай.

**Ни эшләргә?** Яҡын-тирәләгеләргә тәнегеҙ менән тейеүҙән һаҡланығыҙ, һыҙырылған йә яраланған урындарығыҙҙы пластырь менән ҡаплағыҙ, пляжда аяҡ кейемдәрегеҙҙе сисмәгеҙ, үләнгә һәм ҡомға түшәк түшәмәйенсә ултырмағыҙ. Тәнегеҙҙе низер борсой башлаһа, шундуҡ һаҡлыҡ сараларын күрегеҙ.

## Ангина, ларингит, фарингит

Туңдырма, һыуыҡ һут, һалҡын һыуҙа йөҙөү - былар барыһы ла йоҡлолоҡта йәшәүсе вирус һәм бактерияларҙы ҡуҙғытып ебәреүсе саралар. Һөҙөмтәлә инде - тамаҡ шеше.

**Ни эшләргә?** Йылымыс итеп күп миҡдарҙа һелтеле эсемлек эсергә (йылытылған минераль һыу, йәшел сәй, мүк еләгенән морс), муйынға йылы әйбер ҡаплап йөрөргә (мәҫәлән, мамыҡ шарф). Әгәр ҙә инде табип, ангина менән ауырыйһығыҙ, тиһә, дарыу ҡулланырға тура килер. Сөнки ангина йөрәк һәм бөйөргә ауырлыҡ килтереүе мөмкин.

## Эсәк инфекциялары

Улар 30-ҙан ашыу. Ауырыу тыуҙырыусы микробтар бөтә ерҙә лә булыуы мөмкин, улар кеше организмына һыу, ашамлыҡ йә ҡул йыумайынса ашауҙан килеп инә ала. Был инфекциялар эҫелә тиҙ үрсей. Бигерәк тә вирустар ныҡ зарарлы, шунлыҡтан кеше ғаилә, коллектив менән ауырый. Эсәк ауырыуҙары тыуҙырыусы микробтар төрлө шарттарҙа ла йәшәүсәндәр. Инфекция йоғоуҙың тәүге симптомдары: хәлһеҙлек, күңел болғаныу, эс китеү, юғары температура.

**Ни эшләргә?** Тиҙ генә һауығып китеүҙең төп шарты - һыуҙы күп эсеү. Һоло, дөгө бутҡаһы ашарға кәрәк.

✔ *Ораторҙың иң бөйөк сифаты - кәрәк нәмәне әйтеү генә түгел, ә кәрәкмәгәндә өндәшмәй ҡалыу ҙа ул.*

*(Цицерон).*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЯБАЙ ТАМАША ТҮГЕЛ,

## ә рухыбыҙ сағылышы ла был уйындар



(Башы 7-се биттә).

Уҡтан атыу беренсе тапҡыр ошондай ҙур кимәлгә сыҡты. Уҡ, ат менән үҙебеҙҙе бөтөн донъяға таныткан башҡорттар бит әле беҙ, үҙебеҙҙең тамырҙарыбыҙҙы барлау, тарихыбыҙҙы иҫкә төшөрөү өсөн дә бындай байрамдар кәрәк", - тине тамашаның режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәйес Низаметдинов та. Әйткәндәй, ойоштороусылар был байрамды киләсәктә лә ҡабатлау мөмкинлеген күҙ уңында тота.

Белеүебеҙсә, был байрамда тамашасы роленд 20-нән артыҡ ил вәкиле лә булды. Баш ҡалабыҙға суд приставтарының Халыҡ-ара конференцияһына килгән белгестәр башҡорт уйындарын ҡарап кинәнде. Аңлашылыуынса, уларҙың күптәре бындайҙы тәүге тапҡыр күреп, хайран булып ултырҙы. Һүҙ - ҡунаҡтарға:

**Француаза АНДРИЕ, Франция:** Төрки халыҡтар тураһында киноларҙа ғына күргәнем бар ине. Шундай сағыу, сюжетлы, йөкмәткеле сара булды был. Ат өҫтөндәге кешеләргә ҡарап һоҡландым. Уйындарҙа халыҡтың темпераменты, хатта бер аҙ ҡырағайлыраҡ ҡанлы булыуы ла сағыла. Уйын өсөн дә шундай физик әҙерлек кәрәк булғас, ни эшләп был милләт сәләмәт һәм көслө булмаһын!

**Гантулга НАВААН, Монголия:** Беҙҙә июлдә "Ир-егеттең өс уйыны" тигән милли ярыштар байрамы үтә. Бында уҡ атыш, көрәш һәм бәйге инә. Күрәм, һеҙҙә лә ошо уйындар төп күренеш булып тора. Күп нәмәләрҙе сағыштырып ултырам, оҡшашлыҡтарын да, айырмалыҡтарын да аңғарам. Беҙҙә бәйгелә ат өҫтөнә ун йәшкә тиклем малайҙар ғына ултыртыла, бында йәш айырмаһы юҡ икән. Шулай уҡ көрәштә лә батырҙар ауырлығына, йәшенә ҡарап бүленмәй, кем кем менән булһа ла, һуңғы еңеүсе тороп ҡалғансы, бил һынашалар. Башҡорттарҙың милли уйындарын шулай онотмай, тотош байрам итеп ололауҙары бик хуп, бик мәслихәт.

**Урмас ТАРХОО, Эстония:** Башҡортостанға тәүге тапҡыр аяҡ баҫыуым, башҡорт милләте менән дә тәүге танышыуым. Өфө ҡалаһын һоҡланып ҡарап сыҡтым. Бөгөнгө байрамдың халыҡтың милли уйындарынан тороуын аңлаттылар. Беҙҙә был ярыштарҙың бер төрө лә юҡ. Беҙ футбол, хоккей уйындарын тамаша ҡылырға яратабыҙ. Был уйындар күпкә ҡыҙығыраҡ, минеңсә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Уйын уйнап кинәнде был көндө халыҡ. Аллаға шөкөр, уйнаһаҡ - үҙ уйындарыбыҙ, йырлаһаҡ - йырҙарыбыҙ, һыҙҙырһаҡ - ҡурайыбыҙ, ашаһаҡ аш-һыуыбыҙ бар. Берәүҙән дә һорарға, өйрәнергә, үтескә алырға түгел. Бары тик шуларҙы йәшәтер һәм киләһе быуындарға тапшырыр рух ныҡлығы ғына булһын. Ошоно уҡ раҫланы Ҡырмыҫҡалы районы муниципаль район хакимиәте башлығы Фәнзил Сыңғыҙов та: "Бындай саралар ҡунаҡтар өсөн генә түгел, ә халыҡ өсөн, айырыуса йәш быуын өсөн ойоштоpола. Йәштәр белһен, күрһен, өйрәнһен, киләсәк быуындарға тапшырһын өсөн. Бөгөн беҙ ҡараған уйындар ябай тамаша ғына түгел, унда беҙҙең халҡыбыҙҙың тарихы ла, йолаларыбыҙ ҙа, рухыбыҙ ҙа сағыла. Улар беҙгә быуындан-быуынға тапшырылып килеп еткән, хәҙер инде беҙ үҙебеҙ уларҙы йәш быуынға рухи мираҫыбыҙ итеп тапшырабыҙ..."**

**Миләүшә ИСМӘҒИЛОВА.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылып, Ҡол Ғәлиҙең "Киссаи Йософ" китабын уҡырға тәҡдим итәм.**

Башҡорт халҡының ҡульяҙмалар рәүешендә һаҡланып килгән әҫәрҙәренең береһе - 1212-1233 йылдар араһында яҙылған "Киссаи Йософ" булыр. Уны Әйле ырыуы башҡорто Ҡол Ғәли ижад иткән. Автор тураһында мәғлүмәт күп түгел, әммә уның әҫәрен быуындан-быуынға ҡульяҙмалар рәүешендә күсереп яттан һөйләп тә йөрөр булғандар. Әлеге көндә китапханаларҙа тәҡдим ителгән "Киссаи Йософ" әҫәренең тексы Илеш районы Һеңрән ауылында табылған ҡульяҙма. Текстың күләме 1257 строфа, 5028 юл. Был юлдар Йософтоң аяныслы яҙмышы, Зөләйхаға булған мөхәббәт хисе тураһында ғына түгел. Мәшһүр әҫәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте лә бик юғары, иҫ киткес тел байлыһы, мауыҡтырғыс сюжетына һоҡланырға ғына ҡала. Ғөмүмән, китапты ҡулға алыу менән уны уҡып бөтмәйенсә айырылып булмай. "Киссаи Йософ"та үҙенә күрә мөғжизәгә урын бар, ләкин улар ысын булған хәл кеүек ҡабул ителә. "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһының исемлегенә Ҡол Ғәлиҙең "Киссаи Йософ" әҫәрен автор үҙе күрһәткән сәбәптәр буйынса тәҡдим итәм:

*"Киссаларҙан хикмәтлерәк*
*вә күрклерәк,*
*Тыңлағанда ла ҡолаҡҡа ятышлыраҡ,*
*Китаптарҙың барыһынан мәшһүрерәк*
*Ошо ҡисса икәнлеге мәғлүм имде".*

Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! Һеҙҙән тағы ла "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына тәбәп ебәрелгән хаттар көтөп ҡалабыҙ. "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып та үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БОЛЛАНҺАҢ - БОЛОНДО,

## уйлаһаң, уйынды йәшер

Киленең сибек булһа - бирҙе Хоҙай; киленең убыр булһа - орҙо Хоҙай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бала саҡта - һүрәттәрҙе, өлкәнәйгәс тормошто төҫтәргә буяйбыҙ. Тормош палитраһы һәр кемдең үҙенсә: йә йылы төҫтәр күберәк, йә һалҡын төҫтәр. Һәр төҫтө кеше үҙе һайлай, ә тормош төҙәтмәләр генә индерә.

**(Илья Шевелев).**

Ораторҙың иң бөйөк сифаты - кәрәк нәмәне әйтеү генә түгел, ә кәрәкмәгәндә өндәшмәй ҡалыу ҙа ул.

**(Цицерон).**

Бөйөк аҡыллы кешеләр ошо өс бәләнең ҡорбаны була: ул йә иртә донъя ҡуя, йә хәйерселектә йәшәй, йә үҙенән һуң тоҡом ҡалдырмай.

**(Боронғо һинд мәҡәле).**

Ерҙә нығ баҫып торғанда, дуҫтарың һинә тоғро, саҡ ҡына бәүелдеңме, дуҫтарың ситкә ҡаса.

**(Плавт).**

Ҡурҡаҡ эт тешләй алмай, әммә барыһынан да нығыраҡ өрә.

**(Курций).**

Бәғзе бер әҙәм тарихта ҡалған бысраҡ эҙҙәре менән таныла.

**(Тәлғәт Абдрахманов).**

**Шулай итеп, риүәйәт: "Балсыҡтан эшләнгән бәләкәй һыу көршәге өҫтәлдә ултыра. Бүлмәнең бер мөйөшөндәге караватта ауырыу ята. Ул бик ныҡ сарсаған. "Һыу, һыу..." тигән өн сығарып-сығарып ала, ләкин уны берәү ҙә ишетмәй, өйҙәгеләр ҡайҙалыр киткән. Ауырыуҙың ялбарыуы шул тиклем ҡыҙғаныс була, хатта көршәк тә тетрәнә. Ул кешегә ярҙам итергә теләп, ныҡ итеп көсәнә һәм мөмкин булмағанды эшләй: ауырыу янына, тап уның ҡулы эргәһенә шыуып барып туҡтай. Ауырыу күҙҙәрен аса һәм көршәкте күрә. Бөтөн көсөн йыйып, көршәкте күтәрә һәм уны һыуһауҙан ярылған ирендәренә терәй. Шунда ғына көршәк эсендә һыу булмағанын аңлай. Ауырыу һуңғы көсөн көршәкте мөйөшкә бәреп ватыуға исраф итә... Һығымтаһы шул: хәҙерәнде белмәгәндәргә яраҡлашып, уларға ярҙам итергә тырышып, юҡҡа сығыуҙан һаҡлан. Кемдер һиңә ярҙам итергә теләп тә, ярҙамы килеп сыҡмаһа, уның тырышлығын лайыҡлы баһала".**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 1068/06